✔ Үҙеңә бик нык ҡыйын булғанда, юғарыға түгел, түбәнгә ҡара. Ул саҡта һинән дә бәхетһеҙерәк, һинән дә уңышһыҙыраҡ кешеләр, ағзалары теүәл булмағандар барлығын күрерһең...


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№27 (497)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мәскәүгә лә керҙек беҙ,
Парижды ла күрҙек беҙ...



3

Мин башҡорт телен күтәрәм,
башҡорт теле мине күтәрә!



7

Үҙ аллылыҡҡа ынтылғандар...



8-9 ижад үрен яулар

Милли кейем кейәйек тә...
яман күҙҙәрҙән һаҡлаулы булайыҡ!



10

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәйге ял һеҙҙең өсөн шифаханамы, сит илгә сәйәхәтме, әллә баҡса һәм ауылмы?



**Рөстәм КЕЙЕКБИРҘИН, эшсе:**
Йәйге ял тормошобоҙҙоң түҙемһеҙлек менән көтөп алынған сағыу бер мәле. Шуға ла ул йыл буйына етерлек көс-ҡеүәт, дарман бирерлек булырға тейеш, тигәнгә инанғанмын һәм ялымды мөмкин тиклем файҙалы һәм ҡыҙыҡлы итеп үткәрергә тырышам. Быйыл шуныһы уңай тура килде: кәләшем ваҡытлыса эшләмәй, өйҙә йәш бала менән декрет отпускыһында ултыра. Шуға күрә ялымды, элекке кеүек, уның отпускыһына тура килтереү өсөн мәшәҡәтләнергә, борсолорға тура килмәне. Машинабыҙға тейәләбеҙ ҙә тиҙерәк ауылға һыпыртабыҙ. Отпускымдың бер генә көнөн дә ҡалала бушҡа ятып үткәргем килмәй. Тыуған ауылым Баймаҡ районының иң төпкөл, урманлы ерендә ултыра, матурлығы хаҡында һөйләп тә бөтөрлөк түгел. Йылғаһы ла, күле лә, ҡая ташлы тауҙары ла, әҙәм аяғы баҫмаған ҡалын урмандары ла бар уның. Һулар һауаһы саф, эсәр һыуы таҙа - әллә ниндәй курорттарың ары торһон! Төркиәме, Египетмы, шундай бер сит илгә барып ҡайтырға мөмкинлек тә бар, әлбиттә, тик теләк юҡ, ауылыма ашҡына йөрәк. Ҡатыным менән бер ауылдан булыуыбыҙ ҙа һәйбәт, юғиһә, ялды икегә бүлеп, уның яғына ла ҡайтырға тура килер ине, тием. Балалар ҡыш буйына ҡартаталары менән өләсәләрен һағынып, йәйҙе көтөп еткерә алмайҙар. Ауылға ҡайтыу менән улар үҙ стихияларына бирелә, көнө буйы йылға буйынан ҡайтмайҙар: һыу инәләр, ҡыҙыналар, балыҡ ҡармаҡлайҙар, селбәрә һөҙәләр, урман-тау гиҙәләр. Әле тап картуф утау, күмеү, ҡуңыҙ сүпләү кеүек эш мәленә тап килә ялыбыҙ, унан ҡырҙа ҡыуыш ҡороп, ҡуна ятып бесән эшләргә лә ваҡыт етә. Дөрөҫ, хәҙер ауылда бесәнде машина менән саптырып, йыя ла алалар, тик шулай ҙа урман ерендә ҡул салғыһына ла эш етерлек. Ҡатыным балалар менән емеш-еләк тирә, дарыу үләндәре йыя, киптерә, күп итеп ҡайнатма әҙерләй. Шуға күрә лә беҙ ҡалала әлегә баҡса участкаһы алмай торҙоҡ, сөнки баҡсаң булһа, күршеләребеҙ кеүек, йәй буйы бер ҡайҙа китеп булмаясаҡ. Атайым менән әсәйем, ҡайны-ҡәйнәм дә, беҙ иҫән саҡта йышыраҡ ҡайтып тороғоҙ, тип гел әйтеп торалар. Аңлаған, ҡәҙерен белгән кешегә атай, әсәй янында булған һәр сәғәт, һәр минут алтынға тиң, тиер инем мин. Уларҙың фатихаһы йөрөтә беҙҙе, тормошобоҙға ҡот бирә, юлдарыбыҙҙы уң итә. Ауылыбыҙҙа беҙҙе һағынып көткән кешеләребеҙ барҙа, шатланып, һөйөнөп, атлығып ҡайтайыҡ улар янына!


**(Дауамы 2-се биттә).**


АФАРИН!

# УНЫҢ ТУРАҺЫНДА...

## ишетербеҙ әле

**Тхэквондо буйынса 13 тапҡыр - Башҡортостан, 2 тапҡыр - Рәсәй һәм кикбоксинг буйынса 5 тапҡыр Рәсәй чемпионы тигәндә... күҙ алдына нескә һәм хисле ҡыҙыҡай түгел, ә мыҡты кәүҙәле, көслө егет баҫа. Ләкин барлыҡ исемдәрҙең хужаһы - Әбйәлил районы Асҡар ауылы ҡыҙы Илмира Ғәйнуллина.**



Илмира "Батыр" физкультура-һауыҡтырыу комплексында тхэквондо һәм кикбоксинг менән 2008 йылдан шөғөлләнә. Ошо уҡ йылда ул тәүге ҙур уңышына - Өфө ҡалаһында уҙған тхэквондо буйынса республика чемпионатында ҡатнашып, I урын яулауға өлгәшә. Был еңеү уға артабан тағы ла әүҙемерәк шөғөлләнергә, оҫталыҡты арттырыу өҫтөндә даими эшләргә этәргес көс була. Тырышлыҡ үҙ һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмай һәм Илмира еңеү пъедесталының тәүге баҫҡысына тағы ла күп тапҡырҙар күтәрелә.

- Спорт - үҙ-үҙенә ышанған һәм күнекмәләргә яуаплы ҡараған кешегә генә "баш эйә". Тәүге тапҡыр келәмгә сығыу алдынан булған ҡурҡыу тойғоһо хәҙер бөтөнләй юҡ, ә һалҡын ҡанлылыҡ һәм йыйнаҡлыҡ ҡына бар. Нәҡ ошо сифаттар яҡшы күрһәткестәргә өлгәшеүҙә үҙ ролен уйнай. Ләкин спортсы янында уны аңлаған, өйрәткән, таянысы һәм ышаныслы дуҫы булған тренеры һәм яҡындары булмаһа, уңышҡа өлгәшеүе бик ауыр. Был йәһәттән мин бәхетле, сөнки эргәмдә үҙ эшенең оҫтаһы булған тренерым Дим Вәлиев һәм һәр яҡтан ла ныҡлы терәгем - әсәйем бар. Ваҡытында тхэквондо һәм кикбоксинг менән шөғөлләнеү түңәрәгенә килеүемә бик шатмын, сөнки спорт ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәтә, кешене физик һәм рухи яҡтан нығыта. Шулай уҡ спорт миңә ныҡлы һаулыҡ һәм яҡшы кәйеф бүләк итә, тәртипкә һәм көнөмдө планлаштырырға өйрәтә. Ә ярыштағы еңеү минуттары ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ яҡты иҫтәлектәр булып күңелдә һаҡлана һәм тормошома йәм өҫтәй.

Тхэквондола спортсының оҫталығы билбау төҫөнә ҡарап билдәләнә. Илмира әле ҡара буйлы ҡыҙыл билбауға дәғүә итә, ә киләсәктә уның тхэквондолағы иң юғары күрһәткес булған 9-сы данға эйә булырына ла шик юҡ. Әлеге көндә тырыш ҡыҙ август айында Канадала үтәсәк донъя чемпионатына әҙерләнә. Тырыш һәм маҡсатлы ҡыҙҙың унда ла уңышҡа өлгәшеүен ишетербеҙ әле.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА**
**яҙып алды.**

✓ "Мин "Киске Өфө"нө йыйнаҡ, нурлы, яҡты йорт эсендәге урындыҡта һәр ингән кешегә аҡыл-кәңәш биреп, аҙашыусыларға дөрөҫ юл күрһәтеп, зиһенен яҡтыртып, изгелектәр өләшеп ултырыусы ипле, илаһи ағинәйгә оҡшатам".



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәйге ял һеҙҙең өсөн шифаханамы, сит илгә сәйәхәтме, әллә баҡса һәм ауылмы?

(Башы 1-се биттә).

***Нәсиҡә ВАҺАПОВА, хеҙмәт ветераны:*** Күптән хаҡлы ялға сыҡһам да эшләүемде дауам итәм, сөнки өйҙә ултырыу минең өсөн түгел. Унан һуң, яңғыҙым өйҙә ни йәм тапмаҡ кәрәк? Балалар башҡа йәшәй, ҡартым дүрт йыл элек вафат булып ҡалды. Эштә, исмаһам, үҙеңде кеше итеп тояһың, кәрәклегеңде күрәһең. Үҙем кеүек әхирәттәрем менән, бер-беребеҙгә таяныс булып, бергә йәшәргә тырышабыҙ. Былтыр ҡыш компьютер курсына йөрөп уҡып алдыҡ, шулай уҡ "Социаль туризм" программаһы буйынса шифаханала ял итеп ҡайттыҡ. Әлбиттә, был программа буйынса ни бары биш мең түләп, Төркиәгә лә барып ҡайтырға була ине, тик беҙ әхирәтем менән үҙебеҙҙең "Красноусольск" шифаханаһын һайланыҡ, сөнки өлкән кешегә алыҫ сәфәргә сығыуы үҙе бер стресс, тип уйланыҡ. Ә былай, Красноусольскийға ҙур йомшаҡ автобуста 2 сәғәт эсендә барып та еттек. Мәрхүм ҡартым менән егерме йыл элек тә булғайныҡ был шифаханаға, шул ваҡыттан алып ни тиклем үҙгәргән, яңырған, заманса төҫ алған ул! Европа кимәлендәге дауаланыу учреждениеһы, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр икән шул уны. Сит илдәрҙән дә, башҡа төбәктәрҙән дә кеше күп килә икән бында. Космонавтарыбыҙ ҙа үҙ итте бит шифахананы. Беҙгә лә бик оҡшаны сәфәр. Әллә ни ҡиммәткә лә төшмәне, беҙ ни бары путевка хаҡының утыҙ процентын ғына түләнек, ҡалғаны бюджет иҫәбенә субсидия рәүешендә ҡапланды. Әле ошо "Социаль туризм" йүнәлешен артабан үҫтереү буйынса яңы программа ҡабул ителде, тип уҡыным гәзиттә. Был бик һәйбәт сара, рәхмәт етәкселәргә пенсионерҙар хаҡында шундай хәстәрлек күргәндәре өсөн.

***Зиннәт АЛТЫНБАЕВ, табип:*** Эшем буйынса ла, отпускылар ваҡытында ла ил буйлап сәфәр ҡылырға, сит илдәрҙә стажировкаларҙа булырға тура килгеләне. Сит илгә бер, ике бараһың, унан йөрәгең лә килмәй башлай, мәшәҡәте лә күп. Бер заман килеп тыуҙы бит ысынлап та ошо мәсьәлә: йәйге ялды ҡайҙа, нисек үткәрергә? Ауылда туғандар бар, әлбиттә, ләкин унда барыбер атаң-әсәң йортона ҡайтҡандағылай тойоп булмай шул үҙеңде. Хәҙер үҙем пенсия йәшенә яҡынлайым, атай ҙа, әсәй ҙә вафат булды. Атай йортонда ҡустым йәшәй ҙур ғаиләһе менән, унда ҡайтып та эш кешеләрен борсоп йөрөгө килмәй. Шунан ҡатыным менән һөйләштек тә, 5-6 йыл элек баҡса ере һатып алдыҡ. Алмағас, ҡарағат, сейә, ҡурай еләге ултырттыҡ, йыл да мул ғына йәшелсә, еләк уңышы алабыҙ. Бәләкәй генә булһа ла йорт, уның янына мунса һала башланғабыҙ. Шулай итеп, башҡолә баҡсаға әүрәнек тә киттек. Мин быға бер ҙә үкенмәйем, киреһенсә, бик ҡәнәғәтмен. Хәләл көсөң менән баҡса ултыртыу, йорт һалыу һәр кемгә фарыз гәмәл. Йәйге ялды ғына түгел, тотош йәйҙе ошонда үткәрергә тырышабыҙ, сөнки эшкә машина менән йөрөйбөҙ. Үҙ ҡулдарың менән ултыртҡан үҫентеләрҙең шытып сығыуын, үҫеп, емеш биреүен күҙәтеү күңелгә ҡыуаныс килтерә; йортоңа ҡаҡҡан һәр ҡаҙаҡ яҡын, ҡәҙерле. Үкенескә ҡаршы, балалар ҙурайғас, баҡсаға һыуына төштеләр, бик йөрөмәйҙәр, ә ҡатыным менән икебеҙ ҙә ауыл балалары булғас, рәхәтләнеп ерҙә соҡонабыҙ. Олоғая килә, күрәһең, кешегә ер ҡәҙерлерәк була бараһыр, йәш саҡта бит ер тойғоһо тиген нәмә ят була. Ә хәҙер тормошомдо баҡсамдан тыш күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Һеҙ биргән һорауҙан һуң мин үҙем өсөн шундай асыш яһаным: баҡса минең өсөн йәйге ял ососоро ғына түгел, ә тормош рәүеше лә икән! Ҡала фатирында диванда телевизор ҡарап ятҡансы, мин баҡсала эшләйем, хәрәкәт итәм, тимәк, йәшәйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ БАҺАҺЫНА...

## артабан да лайыҡ булырға яҙһын!



**Быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланды. Уның һөҙөмтәләре әллә ни ҡыуандырманы, әлбиттә. Башҡа баҫмалар кеүек үк, беҙ ҙә бер аҙ юғалтыуҙар кисерҙек. Әле бына шул хәлдә баштан үткәреп, уның сәбәптәрен асыҡларға тырышып ултырыла.**

Беләбеҙ, гәзитебеҙ уҡый алмаҫлыҡ түгел. Уҡыусыларыбыҙҙан баҫмабыҙ тураһында хуплау, маҡтау һүҙҙәре генә ишетәбеҙ. Сөнки коллектив ысынлап та шуға ынтыла: гәзитебеҙҙәге һәр мәҡәлә уҡыусылар зиһененә уй һалһын, уларҙы аҡыллы фекергә ылыҡтырһын, һығымталар яһатһын, анын уятһын, рухландырһын. Тоғро уҡыусыларыбыҙ, әлбиттә, был тырышлыҡты баһалай. "Мин "Киске Өфө"нө йыйнаҡ, нурлы, яҡты йорт эсендәге урындыҡта һәр ингән кешегә аҡыл-кәңәш биреп, аҙашыусыларға дөрөҫ юл күрһәтеп, зиһенен яҡтыртып, изгелектәр өләшеп ултырыусы ипле, илаһи ағинәйгә оҡшатам", - тигәйне Ейәнсура районындағы бер осрашыуҙа Нәзирә Кәримова тигән уҡыусыбыҙ. Ошондай ағинәй дәрәжәһенә өлгәшергә, уҡыусыбыҙ биргән баһаға лайыҡ булырға яҙһын!

Ни генә тимә, туған телебеҙҙә нәшер ителгән баҫмаларҙың тиражы йылдан-йыл кәмеүенең төп сәбәбе ошолор тием: аңыбыҙ ойой һаман. Ғәфү, шулай булмаһа, һәр милләттәш үҙ туған телендәге баҫманың тап уның өсөн, башҡорт кешеһе өсөн иждат ителеүен аңлар, ул хатта оҡшамаһа ла, уны уҡырға ваҡыты булмаһа, уны интернетта уҡыу мөмкинлегенән файҙаланһа ла, ҡағыҙ баҫманың артабан йәшәүенә, тиражы үҫеүенә булышлыҡ итер ине. Аңлы кеше милләте өсөн файҙалы булған бөтөн эштәргә аҡсаһын да, көсөн дә йәлләмәй. Шулай тим, сөнки башҡа милләт вәкилдәрендә осратабыҙ шул өлгөнө. Мәҫәлән, Башҡортостанда йәшәүсе татар ҡәрҙәштәребеҙ "Өмет" татар йәштәре гәзитенең тиражын тап аңлылыҡ күрһәтеп, кәметмәй һаҡлап килә. Афарин уларға!

Аңғарғанһығыҙҙыр, иплән кенә күңелдәге үпкәләү тойғоһон да белгертеп ҡуйҙым. Гәзит-журналдарға яҙыла алып та, йә онотоп, йә почта бүлексәһенә инеп сығырға ваҡыт тапмаған, йә үҙ туған телендәге баҫмаларға битараф ҡалған милләттәшебеҙгә бер аҙ үпкә тойғоһо бар шул күңелдә. Үпкәләүҙең мосолман кешеһе өсөн гонаһ икәнен дә, үҙ туғаныңа үпкәләргә ярамай икәнен дә беләм. Әммә... Туған телдәге матбуғат баҫмаһына яҙылыу - ул милләтебеҙҙең абруйын күтәреү, һанлау һәм һаҡлау икәнен онотоп ебәргәндәр барыбер ҙә әрнетә шул...

Онотоу, тигәндә, буш түгел был һығымтам. Гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланыр алдынан бик күп таныштарыма шылтыраттым, телефон аша СМС-тар ебәрҙем. Аныҡраҡ әйткәндә, бындай шөғөләм менән йөҙләп танышымды борсоғанмындыр. СМС-хәбәремә биш-алты кеше йөрәккә май булып яғылыр яуап бирҙе, "Киске Өфө"гә яҙылырға онотманым, унһыҙ йәшәй алмайым", тине. Тиҫтәләп кеше "Әлдә хәтергә төшөрҙөң, яҙылырға онотҡанмын", тине. Бына шулай...

Был һүҙем Өфөлә йәшәүсе, гәзиткә яҙылырлыҡ 350 һум аҡсаны бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ таба алған, ғөмүмән, аҡсаһыҙлыҡтан интекмәгән уҡыусыларыбыҙ тураһында булды. Бик теләп тә, баҫмаларға яҙылыу мөмкинлегенә эйә түгелдәр, тере аҡса төҫө күрә алмағандар ҙа бар. Ауылдарҙа йәшәүселәрҙә әйтәм. Әммә бына улар осон-осҡа ялғап йәшәһә лә, гәзиткә яҙылырға мөмкинлек таба. Тап улар тотоп тора бөгөн башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдар тиражын. Рәхмәтебеҙ уларға. Тап уларға ярҙам йөҙөнән "Киске Өфө" - бүләгем" тигән акция иғлан иткәйнек. Шул акцияға ҡушылған изге күңелле, йомарт дуҫтарыбыҙға тағы бер тапҡыр рәхмәт әйтәбеҙ. Эшҡыуарҙар Фәниә Йәнбирҙина, Рәйлә Фәсхетдинова, Иршат Аҫылғужин, Гөлсәсәк Әлибаева, "Салют" шифаханаһы директоры Наилә Усманова ярҙамы менән йөҙләп уҡыусыбыҙ икенсе ярты йыллыҡта ла баҫмабыҙҙы алдырып ҡыуанасаҡ.

**Әйткәндәй, июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе башлыса ауылдарҙа йәшәүсе уҡыусыларыбыҙға матур китаптар вәғәҙә иткәйнек: 3 кеше - башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим", 3 кеше - "400 башҡорт халыҡ йыры", 3 кеше - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", ҡалғандар иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптарына эйә буласаҡ. Июнь һөҙөмтәләрен һуңғараҡ хәбәр итербеҙ. Бындай бүләкләүҙәр гәзитебеҙгә июль айында яҙылыусылар өсөн дә дауам итәсәк. 17 июлгә тиклем яҙылып өлгөргәндәр гәзитте августан алдыра башлаясаҡ, тип иҫкәртәбеҙ. Индексыбыҙ: 50665. Биш айға яҙылыу хаҡы - 295 һум 20 тин.**

**Бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, шатлыҡта ла, хәтәр хәлдәр килеп тыуғанда ла бергә булайыҡ, мөхтәрәм йәмәғәт!**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының ведомство-ара Йәмәғәт именлеге советы ултырышын үткәрҙе. Унда республиканың бюджеттың 60-65 процентын тулыландырыусы эре предприятиелары етәкселәре саҡырылғайны. Билдәләнеүенсә, уҙған йылдағы кимәлгә ҡарағанда һалым керемдәре 10 процентҡа артҡан. Әммә былтырғы йылға ҡарағанда табыштың бер ярым тапҡырға кәмеүе күҙәтелә. Президент бөтөн һалым түләүселәрҙең дә үҙ бурыстарына яуаплы ҡарамауын билдәләне: "Төрлө сығанаҡтарҙан беҙ йылына 15-20 миллиард һум самаһы һалымды алып бөтөрмәйбеҙ. Әгәр йөн башына уртаса табыш буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә 23-сө урында килһә, йөн башына уртаса һалым кереме буйынса республика ни бары 40-сы урында", тине Президент.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Свердлов урамындағы ихаталарҙың нисек төҙөкләндерелеүен баһаланы. Бер ай элек республика башлығы Свердлов урамындағы 45-се, 49-сы һәм Ғафури урамындағы 50-се йорт ихаталарын тәртипкә килтерергә ҡушҡайны. Ул Өфө ихаталарын тағы бер ҡарап сыҡты. Бер нисә аҙна эсендә йорт яны биләмәһе күҙгә күренеп үҙгәргән. Юлдар ярайны ныҡ киңәйтелгән, автомобилдәр ҡуйыу өсөн яңы туҡталҡалар эшләнгән. Киров районында ғына әле тағы шундай 14 ихата төҙөкләнерелә. Ә бер йыл эсендә Өфөлә 500 ихата яңыртыласаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә СССР-ҙың 50 йыллығы урамындағы ихатаны барып ҡараны. Ул бында май айында булып киткәндән һуң башланған үҙгәрештәрҙе тикшерҙе. Был арала 45/1 һанлы йорт ихатаһы ярайһы ҙур үҙгәрештәр кисергән. Бер нисә гараж һүтелгән, уларҙың урынында яҡын арала заманса туҡталҡалар барлыҡҡа киләсәк. Асфальт юлдар ҙа киңәйтелгән. Балалар майҙансығы ла яңыртылған. Яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәр ҙә төбәк башлығына көнүҙәк проблемалары менән мөрәжәғәт итте.

✓"Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте бүлендек предприятиеһы - "Башкирнефтепродукт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте аша Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәрен 2012 йылдың июленән ноябренә тиклем 53,4 млн тонна дизель яғыулығы һәм 2,7 млн тонна бензин менән тәьмин итәсәк.

СӘФӘРҘӘН ҺУҢ...

**Үткән аҙнала бер төркөм яҙыусыларыбыҙ илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә сәфәрҙә йөрөп ҡайтты. 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған сараларҙа яҙыусылар Марат Кәримов, Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар, Риф Мифтахов, Факиһа Туғыҙбаева, Ғәлим Хисамов, Әмир Әминев, Мәүлит Ямалетдинов, Әнисә Таһирова, Таңһылыу Ҡарамышева, Фәнил Күзбәков, Рәшит Низамов, Владимир Денисов, Юрий Горюхин, Мөхәмәт Закиров, Фәниә Ғәбиҙуллина, Мөнир Вафин ҡатнашты. Иждаи делегацияны Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина етәкләне. Яҙыусылар балалар шағиры Корней Чуковскийҙың йорт-музейын, Ҡыҙыл Майҙанды, 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған "Бородино һуғышы" музей-панорамаһын ҡараны, Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы идараһы секретариатында үткән түңәрәк ҡорҙа һәм шиғыр кисәһендә ҡатнашты, сығыш яһаны, илебеҙҙең баш ҡалаһында йәшәүсе яҡташтар менән осрашты.**



# МӘСКӘҮГӘ ЛӘ КЕРҘЕК БЕҘ,

## Парижды ла күрҙек беҙ...

"Мәскәү күптән инде Рәсәй тормошо менән йәшәмәй. Барыһына ла аҡсанан башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Әгәр ҙә йыбанмаһаң, Мәскәүҙә аҡса эшләүҙең юлдары бихисап, шуға күрә лә хәҙер донъяның эте лә, бете лә Мәскәүгә ағыла. Мәскәү - анһат тормошҡа өйрәтеүсе ҡала. Путин дөрөҫ әйткән: ысын Рәсәй "тамсылағы кеүек" Башҡортостанда сағыла ул..." тигәйне һуңғы йылдарҙа Мәскәүҙә эшләй һәм йәшәй башлаған бер танышым. Уның һүҙҙәренә ышанмайыраҡ ҡараһам да, Мәскәүгә был барыу танышымдың хаҡлығына инандырҙы кеүек. Бер яҡтан уйлаһаң, быға ниңә аптырарға? Капитализм донъяһы капитал туплау менән генә мәшғүл инде, уға ниндәйҙер гуманистик идеялар хас түгел.

Рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса, Мәскәү эргәһендә генә ике миллион ярым бер ерҙә лә теркәлмәгән мосолман ҡасағы йәшәй, тиҙәр. Элекке данлыҡлы әҙәбиәт инфраструктураһының "һуңғы кәлһәһе" һаналып, әлегә һатылмайынса ҡалған Переделкино ижад йортонда йәшәгәнгә күрә, беҙ был мәғлүмәттең дә хаҡлығына ышандыҡ. Ҡыҫҡаһы, рәсәйлеләр бик аҙ күҙгә салына Мәскәүҙә, Мәскәү өлкәһендә лә, Ҡыҙыл Майҙанда ла, вокзалдарҙа ла, һәр урында ла - ситтән килеүселәр. Мәскәү хәҙерге көндә илебеҙҙең баш ҡалаһын түгел, күберәгән Евразияның, бар донъяның тимер юл вокзалын, аэропортын, баҙарын хәтерләтә. Мәскәү - киң күңелле ҡала хәҙер, унда һәр кем килеп йәшәй һәм эшләй ала. Мәскәү - ауыҙ ҡала, унда сыҙамлылар һәм көсләләр генә төйәк таба ала. Ирекһеҙҙән, 1812 йылғы Ватан һуғышында француз армияһына ҡалдырып киткән Мәскәү ҡалаһы иҫкә килеп төшә. Үкенескә күрә, кем өсөндәр, ни өсөндәр йылдан-йыл Мәскәүҙе ҡалдырабыҙ, данлыҡлы илебеҙҙе юғалтабыҙ кеүек.

Әгәр ҙә элекке ваҡыт булһа, беҙҙе, Мәскәү ҡунаҡтарын, мотлаҡ рәүештә Үҙәк телевидение аша күрһәтерҙәр, һәр хәлдә, Рәсәй өсөн хәл иткес һуғышта ҡаһарманлыҡ күрһәткән башҡорт яугирҙәре варисҙарының 200 йылдан һуң да изге антына тоғрологон илебеҙҙең берҙәмлеген нығытыусы күренеш итеп баһаларҙар ине. Үкенескә күрә, яҙыусыларыбыҙҙың Мәскәүҙә изге ниәт менән йөрөүен беҙҙең менән мөнәсәбәтле ойошмаларҙан тыш, берәү ҙә белмәй ҡалды кеүек. Ә бына Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзында осрашыуҙа сығыш яһаусы Мәскәү яҙыусылары һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорт яугирҙәренең ҡаһарманлығына юғары баһа бирҙе. Мин был йәһәттән РФ Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Валерий Ганичев менән яҡташыбыҙ, Социалистик Хеҙмәт Геройы Тәлғәт Хурамшиндың сығыштарын билдәләп китер инем. Тәлғәт Закир улының башҡорт яугирҙәренең Парижды алғандан һуң уның күркәмлеген һаҡлар өсөн күрһәткән фиҙаҡәрлеге хаҡында һөйләүе берәүҙе лә битараф ҡалдырмағандыр. Шулай уҡ Мәскәү яҙыусылары З.Немченконың, С.Глозюктың, В. Широковтың, Аршак Тер-Наркарьяндың, Николай Переясловтың, Мәскәүҙә йәшәүсе яҡташ яҙыусылар Йәмил Мостафиндың, Зимфира Сәхипованың сығыштары, танылған йырсы, яҡташыбыҙ Шәмсиә Нагаеваның "Любизар" йырын башҡарыуы онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Марат КӘРИМОВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры:** Мәскәүгә был барыуыбыҙ һәм данлыҡлы ата-бабаларыбыҙҙы иҫкә алыуыбыҙ ошондай ҡырағай капитализм шарттарында намыҫыбыҙҙың уяу булыуын аңлата. Мин бигерәк тә "Бородино һуғышы" музей-панорамаһын ҡараған саҡта тетрәнеү кисерҙем, үҙемде бер мәлгә 1812 йыл шул яланда барған мәхшәр эсендә тойҙом. Рәсәй Яҙыусылар союзындағы осрашыуҙа идара рәйесе Валерий Ганичевтың сығышы йөкмәткеле һәм иҫтәлекле булды. Осрашыуға яҡташыбыҙ, Борай районы кешеһе, армия генералы Владимир Бобровтың килеүе лә сараны йәмләне.

**Әмир ӘМИНЕВ, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире:** Мәскәүҙә булыу беҙгә күп кенә проблемаларҙы, киләсәктә тормошҡа ашырасаҡ маҡсаттарҙы билдәләргә ярҙам итте. Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы идараһындағы түңәрәк ҡорҙо ҙурыраҡ форматта үткәреп, унда әҙәби Мәскәү менән әҙәби Өфө араһын артабан нығытыу сараларын билдәләргә мөмкин булыр ине тип уйлайым. Әйтәйек, Башҡортостан яҙыусыларының әҫәрҙәрен Мәскәү журналдарында, Рәсәй яҙыусыларының әҫәрҙәрен беҙҙең әҙәби журналдарҙа алмаш һандарҙа сығарыу мәсьәләһен хәл итеү юлдары тураһында һөйләшеү килешле булыр ине. Ошонда уҡ яҙыусыларҙың Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашыуында күтәрелгән Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылары союзы кҫсмә секретариатын Өфөлә үткәреү, айырым яҙыусыларҙың китаптарын Мәскәүҙә баҫтырыу мәсьәләләре лә ҡалҡып сығыр ине. Ләкин был мәсьәләләр буйынса һөйләшеү насип булманы.

Өфөгә ҡайтышлай поезда беҙ Мәүлит Ямалетдинов менән "Бородино һуғышы" музей-панорамаһына ҡуйылған экспонаттар, документтар һәм 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле документтар хаҡында һөйләшеп килдек. Үкенескә күрә, был һуғышта һан буйынса урыҫтарҙан ҡала икенсе урында торған башҡорт полктары тураһында мәғлүмәттәр бик аҙ унда. Булғандары ла тулы кимәлдә түгел. Әйтәйек, билдәһеҙ француз рәссамының "Төньяҡ амурҙары" тигән һүрәтендә башҡорт яугиры уктан атып, дошмандарын ҡыйрата, әммә унда башҡортҡа бәйле бер ниндәй ҙә аңлатма юҡ. Беҙҙең республикала башҡорт яугирҙәренең 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыуына бәйле бик күп документтар, Орловский һәм башҡа сит ил рәссамдарының һүрәттәре, тарихи сығанаҡтар, экспонаттар бар. Ана шуларҙы ла Мәскәү музейында күрге килә.

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә:** Мәскәүгә был барыу үткән быуаттың 90-сы йылдар башында илебеҙҙең баш ҡалаһында уҙған Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзының яңы устав ҡабул иткән съезын хәтерләтте. Яңы уставты ҡабул итер алдынан тәүҙә беҙгә уның проектын таратып сыҡтылар. Ҡараһаҡ, унда "Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы" тигән һүҙ урынына "Рәсәй Яҙыусылар союзы" тип кенә яҙылған. Яңы документты тауышҡа ҡуйыр алдынан мин трибунаға сыҡтым да, "федерация" һүҙенә бәйле үҙ дәғүәмде белдерҙем. Миңә Нәжип Асанбаев, Рәшит Шәкүр, Аҫылғужа Баһуманов ҡушылды. Шунан микрофонды һүндергәйнеләр, "Башҡортостан яҙыусылары залды ташлап сыға", тигән белдереү ташланыҡ та, залдан сыға башланыҡ. Беҙҙе Мостай Кәрим туҡтатты. Зал ыҡҡа килде. Микрофонды тоташтырҙылар, беҙ үҙ һүҙебеҙҙе дауам иттек һәм ошо юл менән генә төп документҡа "Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы" тигән терминды индереүгә өлгәштек. Быларҙы ни өсөн һөйләйем һуң? Миңә ҡалһа, ваҡытында беҙ яҡлап ҡалған Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы статусы үҙ көсөн юғалтҡан һымаҡ тойолдо миңә. Был власть вертикале касафатымы, һәр хәлдә, беҙ нисектер айырыла барған кеүекбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Мәскәүгә лә керҙек беҙ,**
**Парижды ла күрҙек беҙ.**
**Французларҙы еңгәндә**
**Ер емертеп йөрөнөк беҙ,**
**тип йырлана данлыҡлы "Любизар" йырында. Беҙ ҙә илебеҙҙең баш ҡалаһында һәм донъяла барған төрлө күренештәрҙең береһенә лә иғтибар итмәҫкә тырышып, башыбыҙҙы юғары тотоп йөрөп ҡайттыҡ. Ғорурланырға хаҡыбыҙ бар беҙҙең...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан игенселәре иртә өлгөрөүсе иген культураларын урыпйыйыуға төштө. Ужым арышы урағын беренселәрҙән булып Мәләүез районының Салауат исемендәге ауыл хужалығы етештереү кооперативы һәм Ергән МТС-ның Ейәнсура районындағы Инәк бүлексәһе игенселәре башланы. Ә Дүртөйлөнөң Вәлиев исемендәге ауыл хужалығы кооперативы эшсәндәре ураҡты борсаҡты йыйып алыуҙан башланы. Ураҡ уҙған йылға ҡарағанда 20 көнгә алдараҡ башланды. Был яҙҙың иртә килеүенә һәм йәйҙең эҫе булыуына бәйләнгән. Был йәйҙә игенселәргә йәмғеһе 1 млн 900 гектарҙа ураҡ эштәре башҡарасаҡ.

✓Игенде урып йыйыу эштәренә Башҡортостанда 2519 комбайн йәлеп ителәсәк, уҙған йылға ҡарағанда был 23 берәмеккә күберәк. Республика МТС-тарын иҫәпкә алғанда бер комбайнға уртаса 480 гектар майҙан тура киләсәк. Норма буйынса ул 350 гектарҙан ашмаҫҡа тейеш. Йыл һайын игенде урып йыйыу техникаһын 300 берәмеккә яңыртҡанда, төбәк өс-дүрт йылдан норматив күрһәткескә сығасаҡ, тип хәлдәрҙә аңлатма бирҙеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында.

✓Башҡортостанда 9 июлдән 15-енә тиклем "Миңә ғүмер бүләк ит!" акцияһы (аборттар менән көрәш аҙналығы) үткәрелә. Ул йәмәғәтселек иғтибарын аборттар проблемаһына йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы статистикаһы буйынса, Рәсәйҙә 100 яңы тыуған сабыйға 59 аборт тура килә. Әлеге акция саралары сиктәрендә ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларында асыҡ ишектәр көнө ойоштороу, кәрәкле мәғлүмәт биреүсе реклама материалдары, брошюралар таратыу, юристар, психологтар һәм социаль хеҙмәткәрҙәрҙең консультацияларын үткәреү ҡаралған.

✓Башҡортостандың Бүздәк районында гәҙәттән тыш хәл режимы индерелде. Быға сәсеүлектәрҙә, тугайҙарҙа һәм көтөүлектәрҙә саранчалар таралыуы сәбәпсе. Ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрендә күпләп хәүефле ҡоротҡостар (болон күбәләгенең ҡарышлауыҡтары, саранчалар) таралыуы арҡаһында йәмғеһе ете муниципаль район биләмәһендә ошо арала ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелгән.

**"Башинформ"дан.**

АЛДАЙҘАР!



# БАНК ЗАКОНЛЫ ЭШЛӘЙМЕ - 

## башта шуны тикшер

**Башҡортостандың Милли банкы Рәсәй банкы лицензияһына ярашлы банк операциялары хеҙмәте күрһәтеүсе кредит ойошмалары исеменән финанс хеҙмәттәр күрһәтеүгә бәйле мутлашыу осраҡтары теркәлеүе хаҡында хәбәр итә.**

Мәсәлән, Өфөлә "Мәскәү кредит банкы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте исеменән эш итеүсе офис эшләүе теркәлгән. Баш ҡаланың Комсомол урамы, 125-се һанлы йорт адресы буйынса теркәлгән был офис вкладтар буйынса юғары проценттар вәғәҙә иткән. Ләкин был ойошманың законлы банк эшмәкәрлегенә бер ниндәй ҙә ҡатнашы юҡ, сөнки "Мәскәү кредит банкы", Рәсәй банкы лицензияһына ярашлы, үҙ эшмәкәрлеген тик Мәскәү ҡалаһында һәм Мәскәү өлкәһендә генә алып барыу хоҡуғына эйә. Әлеге ваҡытта банк исеменән эш иткән ойошмаға ҡарата оперативтикшеренеү эштәре алып барыла. Ошо мутлашыуҙан зарар күреүселәргә хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Башҡортостан Милли банкы граждандарҙы уяу һәм теге йәки был банк хеҙмәтләндереүен һайлағанда һаҡ булырға һәм түбәндәге кәңәштәрҙе торға саҡыра:

1. Теге йәки был банк бүлегенең республикала законлы эшмәкәрлек алып барыуына инаныу өсөн рәсми телефон линияһы аша банктың төп офисына шылтыратырға. Телефон һандары банк бүлегенең күренгән урынында эленеп торорға тейеш. Шулай уҡ бүлек офисында Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкы тарафынан бирелгән лицензияның һәм банктың вкладтарҙы страховкалау системаһына инеүе тураһындағы сертификаттың күсермәләре булырға тейеш. Был мәғлүмәт банктың рәсми сайтында ла урынлаштырыла.

2. Вкладтар буйынса тәҡдим ителгән процент ставкаһы күләменә иғтибар итергә. Хәүеф тыуҙырмаған процент ставкаһы - ул иң ҙур ун банктың уртаса процент ставкаһы. Был хаҡтағы мәғлүмәт даими рәүештә Рәсәй банкы тарафынан www.cbr.ru сайтында "Пресс-релиздар" бүлегендә яңыртылып торола.

Шулай уҡ өҫтәмә мәғлүмәтте Башҡортостан Республикаһы Милли банкы "ҡыҙыу линияһы"ның (347)279-65-00 телефоны буйынса ла алырға мөмкин.

**БР Милли банкының матбуғат хеҙмәте.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты "Бөтөн Рәсәй сифат ойошмаһы" менән "Сауҙа палатаһы"ның сифат менеджменты өлкәһендә үткәргән Бөтөн Рәсәй конкурсы лауреаты исеменә лайыҡ булды. Дүртенсе тапҡыр уҙғарылған был конкурс иң уңышлы сифат менеджменты булған ойошмаларҙы асыҡлау һәм уларҙың тәжрибәһен таратыу, шулай уҡ сифат менеджменты заманса яңы ысулдар индереүгә булышлыҡ итеү маҡсаты менән уҙғарыла. Был турала журналистар менән осрашыуҙа Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил ӘСӘҘУЛЛИН һөйләне.**

# ИҢ ҘУР ҠАҘАНЫШЫБЫҘ...



## белемле студенттарыбыҙ

Һәр өлкәлә лә сифат менеджменты системаһы эшмәкәрлекте даими камиллаштырыу, ойошманың ил һәм донъя баҙарындағы конкурентлыҡҡа һәләтлеген күтәреүгә йүнәлтелгән. Баҙар шарттарында белем биреү системаһы ла иҡтисадта иң мөһим йүнәлештәрҙең береһе булған менеджмент менән шөғөлләнергә мәжбүр. Республиканың иң йәш вуздарының береһе булған М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты етәкселеге идара итеүгә яңы ҡараш талап ителгәнен күптән аңлаған һәм шуға ла ул бөгөн илдең педагогик вуздары рейтингы араһында яҡынса өсөнсө-туғыҙынсы урындар араһында тора.

БДПУ мәғариф өлкәһендә белгес әҙерләүсе вуз ғына түгел, ул республика белем биреү системаһында үҙенсәлекле ғилми-белем биреү методик үҙәге булып тора. Бөгөн бында республиканың һәр мәктәбе менән интернет аша бәйләнеш булдырылған, квалификация күтәреү, квалификация алыштырыу эшмәкәрлеге яҡшы эшләй. Студенттар ғилми эшкә ылыҡтырыла, төрлө проекттарҙа ҡатнаша. Университет ректоры Раил Әсәҙуллин әйтеүенсә, яуланған гранттар буйынса килгән өҫтәмә саралар иҫәбенә фәндә үҫтереү эше әүҙем бара. Быларҙың барыһы ла уҡытыу, белгестәр әҙерләү процесын камиллаштырыу мөмкинлеге бирә.

Университеттың халыҡ-ара ғилми үҙәктәр менән бәйләнеше лә артҡан. Быйыл ғына билдәле физик-теоретик, Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Алексей Старобинский студенттарға лекциялар уҡыһа, тарихсы Александр Чубарьян университет базаһында Рәсәй тарихсылары һәм студенттар менән эшләгән.

- Шулай ҙа уҡыу йортоноң иң ҙур ҡаҙанышы - студенттарыбыҙ, - ти Раил Мирвай улы. - Йылдан-йыл студенттарҙың инициативаһы арта. Беҙҙең педагогик вуз хәҙер Башҡортостанда педагогик белем биреүсе берҙән-бер юғары уҡыу йорто булып ҡалһа ла, уның баш ҡалала урынлашыуы сәбәпле, һәр абитуриент өсөн кәрәшергә мәжбүрбеҙ. Шуға ла уҡыу йортонда сифатлы белем биреүгә һәр уҡытыусы етди ҡарай. Ике курсы тамамлауға студенттар шундай юғары кимәлгә етә һәм Рәсәй кимәлендә уҙғарылған конкурстарҙа еңеү яулай башлай.

Ошоларҙың барыһы ла университетҡа белем биреү системаһында иң сифатлы хеҙмәт күрһәтеүсе исеменә лайыҡ булыуға мөмкинлек бирә лә инде. Дүрт этаптан торған конкурстың ҡатмарлы һайлап алыу турҙарын үткәндән һуң, белем биреү эшмәкәрлегенең сифаты нигеҙендә БДПУ сифатлы белем биреүсе Рәсәй лидеры исеменә лайыҡ була. Шулай уҡ университеттың ике хеҙмәткәре - филологик белем биреү һәм мәҙәни-әт-ара коммуникациялар институты директоры Хәлиҙә Ғәлимова менән ғилми-методик идаралыҡ етәксеһе Гүзәл Кәлимуллинаға Рәсәй сифат лидеры-2012 исеме тапшырыла. Ошо уҡ юғары награда менән 2009 йылда уҡыу йортоноң ректоры Раил Әсәҙуллин, ә 2010 йылда белем биреү эштәре буйынса проректор Максим Михайлов бүләкләнгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Педагогик белем биреү тотош мәғарифтың киләсәген билдәләй, тип бушҡа әйтмәйҙәрҙер инде. Бөгөнгө көндә мәғариф системаһы үҫеше концепцияһы йышыраҡ аңлашылмаусанлыҡтар тыуҙырһа ла, был һөнәр үҙенең актуаллеген юғалтмай. Июль башында уҡыу йорто ике мең йәш белгескә диплом тапшырырға әҙерләнһә, әлеге көнгә ғүмерен уҡытыусы һөнәре менән бәйләргә теләгән 785 абитуриент был вузға документын тапшырған да инде.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ!

# БЕРЕНСЕ УРЫН БИРӘМ...

**Гәзитте өсөнсө йыл рәттән алдырам һәм һәр һанын, һәр битен уҡып барам. Уны алдараҡ алдыра башламай, күп мәғлүмәттән мәхрүм ҡалғанымды аңлайым хәҙер.**

Әгәр ҙә берәй ярыш ойоштороп, республика баҫмалары араһында иң шәп гәзитте һайлағыҙ, тиһәләр, рейтинг буйынса "Киске Өфө"нө иң төүге урынға ҡуйыр инем. Эстәлеге яғынан да, тышҡы биҙәлеше яғынан да оҡшай ул миңә. Гәзит ниндәй генә тема күтәрһә лә, уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә. Шуныһы менән ул миңә бигерәк тә ҡыҙыҡлы. Ә инде гәзиттең 16-сы битендә донъя күргән аҡыллы фекерҙәр һәр кемде ылыҡтыра икәнен беләм. Күп таныштарым ундағы риүәйәттәрҙе ҡат-ҡат һөйләй, үҙ-ара фекер алыша, шуға ялғап, үҙенең әләсәй-олаталары һөйләгәнде иҫкә төшөрә.

**Илгиз ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**БДУ-ның Сибай институты тәбиғи фәндәр һәм математика факультеты деканы, техник фәндәр кандидаты.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың урта дөйөм белем биреү мәктәптәрен тамамлаусыларға Санкт-Петербург дәүләт иҡтисад һәм финанс университететында белем алыу мөмкинлеге бирелә. Башҡортостан Республикаһының Иҡтисади үҫеш министрлығы дәғүәселәрҙән (абитуриенттарҙан) "Иҡтисад" һәм "Ғәмәли информатика" йүнәлештәре буйынса Санкт-Петербург дәүләт иҡтисад һәм финанс университетына уҡырға инеү өсөн конкурс буйынса һайлап алыуға ғаризалар ҡабул итә (ике маҡсатлы урын). Документтар ҡабул итеү 9 июлдә тамамлана.

✓Өфө Эшҡыуарҙар союзының йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә июлдә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса бушлай ике индивидуаль консультация үткәреләсәк. 11 июлдәге "Реклама. Өфө ҡалаһында тауар һәм хеҙмәттәрҙе алға һөрөү" темаһына, 25 июлдәгеһе "Бәләкәй эшҡыуарлыҡ предприятиеларында кадрҙарға бәйле документтар әйләнеше" темаһына арналасаҡ. Консультациялар алдан теркәлеү буйынса 16 - 18 сәғәттәрҙә үтә. Белешмәләр өсөн телефон: 241-47-44.

✓Баш ҡаланың Дим районындағы Ухтомский, Дағстан һәм Магистраль урамдары менән сикләнгән яңы кварталды планлаштырыу проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙары 15 августа билдәләнде. Өфө халҡы майҙаны 21 гектарға тиң кварталды планлаштырыу буйынса үҙ фекерен белдерә аласаҡ. Торлаҡ йорттар төҙөүгә 16,5 гектар бүленгән. Бында мәктәп һәм балалар баҡсаһы, автомобиль ҡуйыу өсөн тукталҡалар төҙөргә ниәтләйҙәр. Проектҡа ярашлы, яңы биҫтәлә 8 мең кеше йәшәйәсәк. Йәмәғәт тыңлауҙары 123-сө лицейҙың ҙур залында үткәрелә.

✓2011 йылдың 1 сентябрендә көсөнә ингән такси тураһындағы федераль законды тормошҡа ашырыу сиктәрендә Башҡортостанда пассажирҙар ташыуға 2800-ләгән рөхсәт ҡағыҙы бирелгән. Эшмәкәрлеген законлаштырырға теләгән автоводителдәрҙән 3 меңдән ашыу заявка алынған. 2012 йылдың 1 июленән махсус рөхсәт ҡағыҙы алмайынса пассажирҙар һәм йөк ташыу буйынса хеҙмәттәр күрһәткән өсөн биш мең һум күләмендә административ штраф һалыуҙы ҡуҙаллаған РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексына үҙгәрештәр көсөнә инде.

*✓ Йәй етеү менән мотоциклда һәм скутерҙа йөрөүселәр арта. Уларҙың күбеһе - юл ҡағиҙәләрен белмәй. Сөнки, ғәҙәттә, был транспортҡа бәлиғ булмағандар ултыра.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҠЫШҠЫ ВАҠЫТ КИРЕ ҠАЙТЫРМЫ?

**Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаттары тағы ла, сәғәт уҡтарын күсерергәме, юҡмы, тип баш вата. Улар былтыр йәйгеһен ҡабул ителгән "Ваҡытты иҫәпләү тураһында"ғы документҡа үҙгәрештәр индерергә әҙерләнә.**

Ҡыш буйына беҙ йәйге ваҡыт буйынса йәшәнек. Ләкин ҡышҡы ваҡыттан баш тартыу һөҙөмтәһендә эшкә йәки мәктәпкә ҡараңғыла барырға тура килде. Ә инде Алыҫ Көнсығыш төбәгендә, сәғәт поястарын ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә, төш мәлендә генә көн яҡтыра башлаған икән. Һорау алыуҙар иһә халыҡтың йоҡоһо туймауын һәм хроник арыуҙы асыҡлаған. Табиптар ҙа рәсәйлеләрҙең былай ҙа саҡ торған сәләмәтлеген ҡаҡшатмаҫҡа саҡырған. Хатта көйәрмәндәр ҙә ҡәнәғәтһеҙлек белдергән: баҡтиһәң, күпселек матчтар Европала үтә икән, ә Рәсәй менән ЕС араһындағы ваҡыт айырмаһы ҡышын 3 сәғәткә айырылған. Һөҙөмтәлә рәсәйҙәр уйындарҙы төн буйына ҡарап, иртән йоҡоһонан тора алмай ҡаҡшаған. Әле РФ Дәүләт Думаһында әҙерләнгән закон проекты быйыл көҙгөһөн ҡарауға сығарыласаҡ. Ул ҡабул ителһә, октябрь һуңында, элеккесә, сәғәт уҡтарын бер сәғәткә артҡа күсерәсәкбеҙ.

## ГАЗ, ЭЛЕКТР УТЫ, ЙЫЛЫЛЫҠҠА...

**Рәсәйҙә 1 июлдән Торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәттәренә хаҡтар артты. Башҡортостанда ниндәй тарифтар ғәмәлдә буласағын республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты билдәләне.**

Ҡалала, газ плиталары булған йорттарҙа йәшәүселәр өсөн электр энергияһының 1 киловатт-сәғәте 1,91 һумдан 2,02 һумғаса артты. Ә инде өйҙәрендә электр плитаһы ҡуйылған ҡала халҡы, шулай уҡ ауылда йәшәүселәр өсөн был сумма 1,33 һумдан 1,41 һумғаса күтәрелде. Әгәр иҫәп ҡорамалдары булғанда, тәбиғи газдың кубометры халыҡҡа 3,94 һумдан (элек 3,43 һум ине) һатыласаҡ. Әгәр иҫәп ҡорамалдары булмаһа, газ торлаҡ биналарҙы йылытыу өсөн 2,87, аш-һыу әҙерләү һәм һыу йылытыу өсөн кубометры 5,60 һумдан биреләсәк. Өфөлә йылылыҡ энергияһының гигакалорияһы өсөн тариф 711,66 һумдан 754,36 һумғаса күтәрелде. Башҡортостан райондары буйынса ла был күрһәткес шул самала тирбәлә. Һыуҙың кубометры хәҙер 9, 80 һум буласаҡ (элек 9,25 һум ине). Һыуыҡ һыуҙың кубометрына 11,51 һум түләргә тура киләсәк. Быйылға электр энергияһына һәм газға хаҡтар башҡаса артмаһа ла, 1 сентябрҙән һыу һәм йылылыҡ өсөн түләү тағы ла күтәреләсәк әле.

## ЮЛҒА СЫҒАМ, ТИҺӘҢ...

**Экспорттар фекеренсә, йәй миҙгелендә авиабилеттарға хаҡ 5 процентҡа артҡан.**

Хаҡтарҙың артыуы ҡотолғоһоҙ, ләкин улар бик әһәмиәтле булмаясаҡ, сөнки авиация яғыулығына хаҡтар тотороҡланды, ә был, үҙ сиратында, билет хаҡына тәьҫир итәсәк, ти белгестәр.

Ә бына поездар менән хәл күпкә аныҡыраҡ, сөнки тимер юлындағы тарифтар, бөтә өҫтәмә хаҡтар һәм ташламалар менән, "юғары" һәм "түбән" миҙгелдәрҙе көҙ уңында тотоп, бер йылға билдәләнә. Йәйгеһен "түбән" миҙгелдәр булмаһа ла, билетҡа хаҡ тирбәләсәк. Мәҫәлән, 13 июлдән 2 сентябргә тиклем хаҡтар 20 процентҡа артасаҡ, тип билдәләнә.

Яҡшы хәбәрҙәр ҙә бар. Рәсәй тимер юлдары, касса янындағы "тере" сиратты кәметеү, ә интернет селтәре аша һатыуҙы әүҙемләштереү маҡсатында, 16 майҙан электрон билеттарға 5 процент ташлама яһай башланы. Ләкин был яңылыҡ люкс, СВ һәм купе вагондарына ғына ҡағыла, ә плацкарт һәм дөйөм вагондарға ташламалар булмаясаҡ.

Шулай уҡ 21 майҙан башлап алыҫ араға йөрөүсе Рәсәй поездарына билетты, хаҡы 25 меңгә тиклем булған осраҡта, кредитҡа ла һатып алып була. Бының өсөн илдең 57 вокзалында махсус кассалар эшләй. Әгәр ҙә аҡса 55 көн эсендә ҡайтарылһа, хеҙмәтләндереү өсөн алынған 800 һумдан тыш, бер ниндәй ҙә проценттар булмаясаҡ.

Сит илгә барыу өсөн путёвкалар йәй башына, былтырғы йыл менән сағыштырғанда, уртаса 10 процентҡа артҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, туристар төрлө йүнәлештәге сәфәрҙәрҙе алдан бронләүен дауам итә. Экспорттар фекеренсә, июль уртаһында хаҡтар тағы ла бер аҙ күтәреләсәк.

## ТУҠТАЛЫШТАРҘА ЭСЕҮ ТЫЙЫЛА!

**1 июлдән һыраны араҡы, коньяк кеүек үк алкоголле эсемлектәргә тиңләштереүсе федераль закон көсөнә инде. Тимәк, был эсемлекте хәҙер автобус туҡталыштарында, мәктәптәр һәм дауаханалар эргәһендә, шулай уҡ киске сәғәт 11-ҙән һуң һатыу тыйыла.**

Бөгөн кибеттәрҙең, бәләкәй һатыу нөктәләренең 60-70 процент килеме тап һыра һатыуҙан йыйыла ине. Тимәк, улар үҙенең эшмәкәрлеген туҡтатырға йәки сауҙа төрөн алмаштырырға мәжбүр буласаҡ. Ә әлегә улар 1 ғинуарға тиклем ҡеүәте 5 проценттан артмаған һыра менән һатыу итә ала.

## ҺАҠЛАНҒАНДЫ ХОҘАЙ ҺАҠЛАР

**Аномаль эҫелек һөҙөмтәһендә республика райондарында йыландар күбәйгән.**

Үткән аҙнала ғына Өфөнөң 21-се дауаханаһына йылан сағыуҙан зыян күргән ике ҡатын килтерелә. Был осраҡ республикала йылан ағыуына ҡаршы дарыу булмауын асыҡлай. Шуға күрә белгестәр, әгәр йылан саҡһа, үҙ аллы дауаланырға тырышмаҫҡа, ә яраны йыуып, табипҡа мөрәжәғәт итергә, табип ярҙам күрһәткәнгә тиклем күп итеп һыу йәки башҡа шыйыҡлыҡ эсергә, тынıслыҡ һаҡларға кәңәш итә.

## ЛЬГОТА ОСОРО ОҘАЙТЫЛДЫ

**Эре инвесторҙарға килемгә кәметелгән ставка буйынса һалым түләү мөҙҙәте ике тапҡырға оҙайтылған.**

Хәҙер республика иҡтисадына 2 миллиардтан 5 миллиард һумға тиклем аҡса һалған эшҡыуарҙар - биш, күберәк һалыусылар 10 йыл льготалы осор менән файҙаланасаҡ. Ә инде башҡа кимәлдәге эшҡыуарҙар өсөн был осор биш йыл тип билдәләнгән.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АТА-ӘСӘ СКУТЕРҘЫ...

## уйынсыҡ тип иҫәпләйме?

**1 июлдән юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтар күләме артты. Тейешле законға төҙәтеүҙәр бер йыл элек үк индерелгәйне. Хәҙер тыйылған урында туҡтаған йәки автомобилен ҡалдырған водителдәргә 1500 һумлыҡ штраф ҡарала.**

Шулай уҡ трамвай юлында һәм юлдың икенсе, өсөнсө һыҙатында туҡтаған өсөн дә ошо сумманы кеҫәнән сығарып һалырға тура киләсәк. Йәйәүлеләр үткәүелендә, йәмәғәт транспорты туҡталышында туҡтағандарға 1 мең һум штраф һалына. Әгәр ҙә водитель тоннелдә туҡтаһа, 2 мең түләйәсәк. Элек был ҡағиҙәләрҙе боҙғандарға киҫәтеү эшләнә йәки 300 һум ғына штраф һалына ине.

Әйткәндәй, яңылыҡ водителдәргә генә ҡағылмай. Әгәр машиналар өсөн парковка урыны эшләргә тейешле чиновник был бурысты үтәмәгән икән, уға ла штраф түләргә тура киләсәк. Шулай уҡ йәмәғәт транспорты туҡталыштарын дөрөҫ ойоштормағаны өсөн дә чиновниктар яуап бирәсәк һәм 2-15 мең һум аҡсаһын сығарып һаласаҡ.

Водителдәргә, машинистарға, кондукторҙарға һәм башҡа транспортсыларға эшләргә ҡамасаулаған өсөн дә штраф ҡаралған. Закон талаптарын үтәүҙән баш тартҡан закон боҙоусыларға (мәҫәлән, юл хаҡын түләргә теләмәүселәр) штраф 300 һум тәшкил итә. Өҫтәүенә, билетһыҙ юл йөрөгән өсөн 100 һум штраф түләргә лә тура киләсәк.

Быға тиклем машина тәҙрәһенең тонировкаһы яҡтылыҡты 70 проценттан әҙерәк үткәргәндә транспорт хужаһы 500 һум штраф түләү менән ҡотола ине. Хәҙер был осраҡта ГИБДД хеҙмәткәрҙәре, штрафтан тыш, автомобилдең номерҙарын тартып алырға тейеш буласаҡ. Өфө ҡалаһы буйынса ЮХХДИ идаралығы начальнигы Илдус Хисмәтуллин әйтеүенсә, яңы төҙәтмәләр ғәмәлгә индерелеү менән баш ҡалала ҡараңғы быялалы автмобилдәр һиҙелерлек кәмене. "Етешһеҙлекте водителдәр менән бергә урында уҡ бөтөрөргә тырышабыҙ. Был осраҡта машинаның номерҙарын тартып алырға тура килмәй", - ти полиция хеҙмәткәрҙәре.

Водителдәр ҙә, йәйәүлеләр ҙә юлда йыш ҡына кеҫә телефоны менән ҡуллана. Ошоноң арҡаһында фажиғәләр булып тора. Баш ҡаланың ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре фекеренсә, йәйәүлеләр юлында кеҫә телефоны ҡулланған өсөн дә ниндәйҙер яза индерергә кәрәк.

Йәй етеү менән мотоциклда һәм скутерҙа йөрөүселәр арта. Уларҙың күбеһе - йәштәр. "Юл хәүефһеҙлеге йәһәтенән был иң борсоған мәсьәләләрҙең береһе, - ти И.Хисмәтуллин. - Скутерҙа йөрөүселәр юл ҡағиҙәләрен белмәй. Сөнки, ғәҙәттә, был транспортҡа бәлиғ булмағандар ултыра. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ата-әсәләр был ни тиклем хәүефле икәнен аңлап етмәй, уларҙы балаларына шундай "уйынсыҡ" алыуҙан тыйылырға саҡырам". Скутерҙа йөрөүсе йәштәр менән профилактик саралар үткәрелеп тора, әммә был ғына етмәй, скутер менән идара итеүселәргә лә, водитель таныҡлығы бирергә кәрәк, тигән фекерҙә юл ҡағиҙәләрен һаҡлаусылар.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ағымдағы йыл эсендә меңгә яҡын юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән. Унда дүрт тиҫтәнән ашыу кеше һәләк булған. 341 ваҡиға йәйәүлеләрҙе бәрҙереп китеү менән бәйле - 24 кешенең ғүмере өҙөлгән. Был осраҡта йәйәүлеләрҙең юлды тейешле урында үтмәүе төп сәбәп булып тора. Автомобилде иҫерек килеш йөрөтөүселәр ҙә йыш теркәлә. Ошо сәбәпле йыл башынан алып 3750 кешенән водитель таныҡлығы тартып алынған.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Аллергик диатез



❖ Лавр япрағы ҡайнатмаһы һәм әүҙемләштерелгән күмер яҡшы ярҙам итә.

❖ Кесерткән япрағы, мәтрүшкә, эт дегәнәге (череда) үләндәре, аҡ сәскә (ромашка), бесәй үләне (валериана) һәм татлы тамырҙы (солодка) бер тигеҙ күләмдә алып, бергә болғатырға. Бер ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә, 15 минут һыуы ҡайнап ултырған һауытта тоторға һәм 45 минут төнәтергә. Балаларға көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡлап бирергә. Ашарҙан ярты сәғәт алда ҡулланырға. Ошо уҡ үләндәргә сөйәл үләне (чистотел), һары мәтрүшкә һәм бесәй ҡойроғо (шалфей) үләндәре өҫтәп, дауалаусы ванналар яһарға була.

### Тәндә аҡ таптар булһа...

❖ 1 ҡап бор кислотаһы порошогын ванна ҡабул иткәндән һуң еүеш тәнгә, аҡ таптар булған урындарға һөртөргә. Был процедураны бер нисә тапҡыр ҡабатларға, тик мотлаҡ рәүештә ваннанан һуң ҡулланырға. Тәжрибә күрһәтеүенсә, дауаны өс тапҡыр ҡулланыу аҡ таптарҙан ҡотолорға ярҙам итә.

❖ 1 ҡап гидросульфитты 1 литр һыуҙа иретергә һәм 3-4 аҙна дауамында таптарға һөртөргә. Был урындарҙы йыуымаҫҡа, һөртмәҫкә, гидросульфит үҙе ҡойолоп бөтөргә тейеш.

### Ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙары

❖ Каланхое һуты менән ингаляциялар һөҙөмтәле. Шулай уҡ теш ҡаҙналары ҡанауы, ҡысыу тойғоһо бөтә, 10-12-се көнгә эренле яралар бөтәшә.

❖ Данияның балалар табибы К. Лунд Аагаард фекеренсә, күп ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән пародонтозды дауалау өсөн прополис ҡулланырға була: көн һайын 1-3 грамм прополисты сәйнәргә, был саҡта бүленеп сыҡҡан төкөрөктө йоторға. Дауаланыу курсы - 4-14 көн.

❖ Күп осраҡта календула ярҙам итә. 1 балғалаҡ календуланы 1 стакан һыуҙа төнәтергә, көнөнә бер нисә тапҡыр сайҡатырға.

❖ Көн һайын 2-3 аҙна дауамында төнгөлөккә теш ҡаҙналарын һарымһаҡ менән ышҡырға. Ун көндән һуң ял итеп алығыҙ.

❖ Көнөнә 2 литр һуған ҡабығы ҡайнатмаһын төнгөлөккә эсергә. 1 литр ҡайнар һыуға 3 ҡалаҡ ваҡланған ҡабыҡты һалып төнәтергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Никахтар тарҡалыуында, эскелектән тыш, бүтән сәбәптәр ҙә бар. Ул матди ауырлыҡты күтәрә алмау, хыянат, бер-береңде тыңларға теләмәү, үҙ һүҙлелек...*



ФЕКЕР ҠОРО

**Ер шарының бер нисә илендә ошо көндәрҙә Халыҡ-ара атайҙар көнө киң билдәләнде. Байрам Рәсәйҙә лә иғлан ителеүенә ҡарамаҫтан, уның тураһында беҙ йүнләп белмәйбеҙ ҙә. Шул уҡ ваҡытта атайҙар бәҫе, уларҙың абруйы тураһында һуңғы ваҡытта йыш телгә алабыҙ. Ғаилә, бала тәрбиәләү тураһында күберәк ҡатын-ҡыҙ халҡы һөйләй. Ә ир-егеттәр ошо хаҡта үҙҙәре ни ти икән? Баймаҡ район китапханаһындағы түңәрәк ҡорҙа ҡатнашҡан арҙаҡлы ир-егеттәрҙең фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ИР ҠӘҘЕРҺЕҘ ЙОРТҠА...

## ҡот ҡунмаç



**Илдус ЗӘЙНУЛЛИН, район хакимиәте башлығы урынбаҫары:** Хәҙерге заман атайҙарын ниҙәр борсой? Ил яҙмышы атайҙар иңендә булыуын ир-егеттәребеҙ нисек аңлай? Ғаилә, бала проблемаһын хәл итер өсөн атайҙар ни эшләргә тейеш? Минең үҙемдә, райондың балиғ булмағандар эштәре буйынса комиссия рәйесе булараҡ, ғаиләләрҙең күпләп тарҡалыуы, балаларҙың атай тәрбиәһен күрмәй үҫеүе борсой. Был ҡатмарлы күренештең нигеҙендә эскелек ята. Күптәр эшһеҙлеккә лә һылтана. Әммә "эш юҡ" тип зарланһалар ҙа, йәмғиәтебеҙгә табиптар, полиция хеҙмәткәрҙәре, эшселәр, тәҙөүселәр һ.б. етешмәй бит. Тимәк, төп сәбәп эшһеҙлек түгел. Үҙенең кешелектән сығып барыуын: "Ҡатыным эсмәһә, мин дә эсмәҫ инем", - тип аҡлап маташыусыларҙы ла күнел ҡабул итмәй. Сөнки был ир-егет һүҙе түгел. Үкенескә ҡаршы, балаһынан баш тартҡан йәки уны әләсәй тәрбиәһенә ташлап киткән ҡатындар күбәйҙе. Икенсегә өйләнгән ирҙәрҙең тәүге никахтан булған балаларын онотоуы ла башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Сөнки атай кеше, ниндәй генә хәл килеп тыуыуға ҡарамаҫтан, үҙенең балаһынан баш тартырға, уны яҙмыш еленә ташларға тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта арабыҙҙа ул һәм ҡыҙҙарын яңғыҙы тәрбиәләгән атайҙар ҙа бар. Кемеһенендәр ҡатыны сабыйынан баш тартҡан, бәғзе берәүҙәр мәрхүмә булған ҡатынын рухы алдында яуаплылыҡ тойоп, балалары өсөн терәк-таянысҡа әүерелгән. Эйе, замана ҡатындары салбар ҙа кейә, машина ла йөрөтә, аҡса ла таба. Әммә һәр ғаиләне, шулай уҡ ҡатынды ла ир кеше тоторға, тәрлө яҡтан тәьмин итергә бурыслы бит.

**Илшат ХИСМӘТУЛЛИН, I Әткол мәктәбе уҡытыусыһы:** Атай булыуы оло бәхет булыу менән бергә, ҙур яуаплылыҡ та. Шулай ҙа ауырлыҡтарҙан уның ҡыуанысы күберәк. Никахтар тарҡалыуында, эскелектән тыш, бүтән сәбәптәр ҙә бар. Ул матди ауырлыҡты күтәрә алмау, хыянат, бер-береңде тыңларға теләмәү, үҙ һүҙлелек... Һәр ғаиләнең үҙенең шатлыҡлы ваҡиғалары, йолалары күп. Мәҫәлән, беҙҙең ғаиләлә туй көнөбөҙ оло байрам. Уны беҙҙең ғаилә көнө тип иғлан иткәнбеҙ. Ғаилә ҡороуҙың ни тиклем яуаплы аҙым икәнлеген кескәй саҡтан аңлатырға кәрәк балаға. Беҙ ҙә улыбыҙ һәм ҡыҙыбыҙға ниндәй кешегә күҙ һалырға, уның ниндәй сифаттарына иғтибар итергә кәрәклеген аңлатабыҙ. Ғаилә ҡороу бик мөһим аҙым икәнлеген улар яҡшы аңларға һәм уйлап эш итергә тейеш. Юғиһә, ҡайһы бер ир менән ҡатындың көн дә талашып-һуғышып йәшәүен, юҡ-барға ғауға сығарыуын, ғүмерҙәрен заяға уҙғарыуҙарын күреп, йән әрней.

**Әскәт ФӘЙЗУЛЛИН, Күсей урта мәктәбе уҡытыусыһы:** Хәҙерге ваҡытта ир-егеттәр араһында ла: "Ауылда йәшәүе ауыр", - тип зарланыусылар күбәйеп китте. Эйе, енел түгел. Әммә шул уҡ ваҡытта хәлебеҙ шул тиклем мөшкөл тип тә зарлана алмайбыҙ. Юҡ. Сөнки иғтибар итһәгеҙ, ауылда береһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡлыраҡ, ҙурыраҡ йорттар ҡалҡа, ғаиләләр сит ил машинаһында ғына елдерә. Был тырыш кешеләрҙең ауылда ла яҡшы йәшәй алыуын дәлилләй бит.

**Мансур АЛТЫНБАЕВ, Мерәҫ мәктәбе директоры:** Ғаилә - мәңгелек мәсьәлә ул. Шулай ҙа никахтың ныҡлығы атай абруйына бәйле. Беҙ ғаиләлә 10 бала үҫтек. Беҙҙең өсөн атайҙан абруйлыраҡ кеше булманы. Сөнки әсәйебеҙ нимә генә эшләһә лә, уның менән кәңәшләште, һәр саҡ "Атайығыҙ нимә әйтер?", "Атайығыҙ нисек хәл итер", "Атайығыҙҙан һорарға кәрәк" тип әйтер ине. Әлбиттә, был ҡатын-ҡыҙҙың аҡылына, ғаиләне һаҡларға булған теләгенә бәйле. Хәҙер беҙ атайҙарҙың бәҫе төшөүен күҙәтәбеҙ. Ә бит һуңғы йылдарҙа атай әйткән ғаилә генә ныҡ һәм бәхетле була. Никахтар тарҡалыуҙың сәбәптәренә килгәндә, шуны әйткем килә: беҙ, ололар, йәш ҡына өйләнешкәс тә йәштәрҙең матди һәм һүҙ ярҙамына мохтаж булыуын онотабыҙ. Ә бит уларға һәр саҡ терәк булырға әҙер торорға кәрәк. Нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан - егермеләме, ҡырҡтамы - бала бала булып ҡала һәм ул ата-әсә ҡурсалауына мохтаж. Ғаилә йолаларын ныҡытыу, уларҙың берҙәмлеге өсөн мәктәптә ата-әсәләр университеты булдырҙыҡ. Ҡайһы бер ата-әсәләр, балаһы тураһында насар һүҙ ишетеүҙән ҡыйынһынып, мәктәпте урап үтә. Ә беҙҙең университетта беҙ тик уҡыусыларыбыҙҙың уңышы, уларҙың ҡаҙаныштары, һәр береһенең айырым яҡшы сифаттары тураһында һөйләйбеҙ. Шул рәүешле атайҙар мәктәп тормошона йәлеп ителә, ул "Балам тураһында ҡасан, нимә ишетәм?" тип ҡурҡып та ултырмай.

**Миңлеғәле ҒҮМӘРОВ, Баймаҡ үҙәк ҡала дауаханаһының баш табибы:** Беҙ бар бәләлә эскелекте генә ғәйепләп өйрәнгәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта ир-егеттәрҙең ҡырылыуы уға ғына бәйлеме икән? Уйлап ҡарағыҙ: ҡатын-ҡыҙҙың һаулығын күҙәтеү өсөн нисәмә белгес-табип бар. Ә ир-егеттәрҙең сәләмәтлеге менән генә шөғөлләнгән врач юҡ. Статистик мәғлүмәттәргә күҙ һалһаң, илебеҙҙә малайҙар күберәк тыуа, әммә хаҡлы ялға яҡынлашҡанда ҡатын-ҡыҙҙар күберәк булып сыға. Хеҙмәткә яраҡлы йәштәге ирҙәрҙең вафат булыуы айырыуса аянысло. Быға малайҙарҙың һаулығы кескәйҙән күҙәтелмәүе лә сәбәпсе. Шуға күрә улар араһында түлһеҙлек тә йышайҙы. Беҙҙең районға мотлаҡ ир-егеттәр табибы - андролог кәрәк. Мин яныраҡ Өфөлә медуниверститет үткәргән вакансияларҙ йәрминкәһендә булып ҡайттым һәм беҙгә ошо өлкәлә эшләүсе белгес килергә вәғәҙә бирҙе. Эйе, эскән килеш һәләк булыусылар, үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар тураһында беҙ күп һөйләйбеҙ. Ә уларҙы ҡотҡарыу өсөн ниҙәр эшләйбеҙ һуң? Эскесенең ғүмере өҙөләсәген беләбеҙ, аҫылынасаҡ кеше лә бының тураһында алдан һөйләп йөрөй. Шул саҡта уларға психологтар ярҙамға килергә тейеш бит. Улар ярҙамы менән кешене ҡараңғылыҡтан сығарыу, уға йәшәүгә өмөт, дәрт биреү мотлаҡ.

**Артур КӘРИМОВ, хәрби комиссариат хеҙмәткәре:** Ысын ир-егет, яуаплы атай тәрбиәләү өсөн малайҙар хәрби-патриотик тәрбиә алырға тейеш. СССР заманында балаларҙы лидер, шәхес булырға өйрәтә торғайнылар. Хәрби әҙерлек дәрестәре лә юғары кимәлдә үтте. Сәйәсәт үҙгәреп, армияға кире ҡараш уяныу менән егеттәр ҙә һалдат тормошонан ҡаса башланы. Һуңғы осорҙа, хәрбиҙәрҙең эш хаҡы артҡас, хеҙмәт итергә теләүселәрҙең һаны артыуы күҙәтелә.

**Фәйзулла хәҙрәт САРИН:** Тәрбиәнең нигеҙе - дин һәм иман ул. Беҙ ваҡытында етем үҫкән, үлән ашап тере ҡалған балалар. Әммә ул йылғы балалар ныҡ һәм сыҙам була. Атайһыҙ үҫһәм дә, әсәйем тураһында хәстәрлек күрергә, уны бәхетле итергә тырыштым. Аяҡҡа баҫҡас, тәүҙә әсәйемә өй һалдым, кейендерҙем, артабан үҙемә йорт ҡалҡыттым. Һөйөклө тормош юлдашым менән 4 бала үҫтерҙек. Һәр саҡ, минең ҡатыным иң яҡшыһы, тип йәшәнем. Ологайған көнөгөҙҙә ҡәҙерле булыу өсөн ата-әсәйегеҙҙе ҡәҙер итегеҙ, артабан балаларығыҙҙы һөнәрле итегеҙ. Ошо хаҡта фәһемле риүәйәт тә бар. Бай улы бер ҡарттың ҡыҙын һоратырға килгән, ти. Тегеһе: "Ниндәй һөнәрең бар һуң?"- тип һорағас, егет: "Ә нимәгә миңә һөнәр? Минең байлығым әллә нисә быуын балаларыма етерлек", - тип яуап биргән. Әммә аҡыллы бабай ҡыҙын ябай, әммә икмәкте хәләл көсө менән тапҡан кешегә биргән, ти. Эйе, атай кеше - ғаиләһенең көтөүсеһе.

**Мифтахетдин ЙӘНБӘКОВ, эшҡыуар:** Мин ғаиләмде тәьмин итеү теләге менән Себер яҡтарына сығып киттем. Сөнки балалар ҙурая, ә уларҙы кейендерергә лә, уҡытырға ла кәрәк ине. Үҙемдә аҙыраҡ һынап ҡарайым әле, тип уйлаһам да, Себер тарафтарында 20 йылдан ашыу эшләнем. Хәҙер тыуған яҡтарға ҡайтып, үҙ эшемдә аҫтым. Әлбиттә, ситтә эшләгән ир-аттарға тотороҡлоҡ, тырышлыҡ, насар ғәҙәттәрҙән ары булыу мөһим. Шул саҡта ғына ул ғаиләһен тәьмин итеп тә, һаҡлап та ҡаласаҡ.

**Марат БИЛАЛОВ, Ҡуянтау ауылынан пенсионер:** "Эш юҡ" тип ситкә китеүселәрҙе аңламайым. Ундайҙарға кәңәшембал ҡорто тотоғоҙ. Мин хаҡлы ялға сыҡҡас, тәүге умарталарымды ҡуйҙым. Әлбиттә, бал ҡорто ялҡауҙарҙы яратмай, йоҡоно, ҡәйефһеҙ саҡтарыңды онотоорға тура килә. Уның ҡарауы, был шул тиклем мауыҡтырғыс шөғөл. Килеме лә һәйбәт, ғаилән дә һәр саҡ шифалы бал менән һыйлана.

**Фәрит МОРАТОВ, полиция начальнигы урынбаҫары:** Ир-егеттәргә уңған ғаилә башлығы булыу ғына аҙ. Ул атайһыҙ үҫкән балалар, йәшәгән урамы, ауылы, ҡалаһы өсөн дә яуаплылыҡ тоторға бурыслы. Арабыҙҙа битарафлыҡ көслө булыуы көйөнөслө. Көмөшкә һаталар, уны балалар эсеп ағыулана йә иҫерек көйө енәйәткә бара, ә көмөшкәсегә бер һүҙ әйтеүсе юҡ. Ни өсөн бар ауыл, урам менән уның үлемесле кәсебен туҡтатыуын талап итмәҫкә? Полиция хеҙмәткәрҙәренең генә рейдҡа сығыуы аҙ, улар барыһына ла өлгөрә алмай. Шулай уҡ иҫерек кешенең рулгә ултырып йөрөүен күрәләр, әммә өндәшмәйҙәр. Ә уның бит беҙҙең балаларҙы, яҡындарыбыҙҙы тапатыуы ихтимал. Көн һайын ирҙәрҙең ҡатынын туҡмауы тураһында егермеләп ғариза алабыҙ. Әммә балаһын, уның әсәһен рәнйеткән кешене лә туҡтатыусы юҡ. Күрше-тирә күрһә лә, өндәшмәй ҡала. Ә юл буйлап ҙур тиҙлектә йөрөгән скутерҙар! Беҙгә тәртип урынлаштырыу, балаларыбыҙҙы һаҡлау өсөн халыҡ дружинаһын тергеҙергә кәрәк. Бөтөн бәләләрҙең башы - битарафлыҡ икәнен хәтерегеҙҙән сығармағыҙ.

**Илфат МЫРҘАБУЛАТОВ, "Баймаҡ урманы" дәүләт унитар предприятиеһы директоры:** Ир-егеттәр өсөн эшһеҙлек мәсьәләһе тормай. Теләгең, тырышлығың ғына булһын. Хәҙер бит ябай тракторсы, урман ҡырҡыусы булып эшләрҙәй кешеләрҙе лә табып булмай. Беҙ яҡшы эшләгән эшселәргә иғтибар бүлергә, уларға матди яҡтан ярҙам күрһәтергә тырышабыҙ. Етешһеҙлектәр тураһында күмәкләшеп йыйылып һөйләшеп алабыҙ, хатта насар күренештәрҙе фашлаған "Крокодил" кеүек стена гәзите лә сығарабыҙ. Ысын атай эшендә алдынғы хеҙмәткәр, йортонда хәстәрлекле хужа ул. Шулай уҡ ҡайһы бер атайҙарҙың, бала тәрбиәләү тик ҡатындар эше, тип ҡарауы аңлашылмай. Сөнки көтөп алынған сабыйы өсөн ир кеше ҙурыраҡ яуап тота. Юҡҡа ғына табиғәт уны көслө, ҡаҡшамаҫ рухлы итеп яралтмаған бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Түңәрәк ҡорға йыйылған атайҙар бик күп проблемаларҙы күтәрҙе. Сит милләткә кейәүгә сығыу, ҡарт буйҙаҡтар, ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәртибе, районды белгестәр менән тәьмин итеү, йәштәрҙе тәрбиәләү... Оло быуын ағайҙарҙың ғаилә ныҡлығы тураһындағы фекерҙәре, балаларын яңғыҙы тәрбиәләгән Мансур Артыҡаевтың сығышы бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Ир-егеттәр атайҙар посы булдырыу фекеренә лә дәррәү ҡушылды. Районыбыҙҙың билдәле аҡһаҡалы, судья Салауат Шараповтың: "Ир-егеткә бәхетле булыу өсөн һаулыҡ, яраткан һөнәр һәм уңышлы өйләнеү генә кәрәк", - тигән аҡыллы һүҙҙәре менән бар атайҙар ҙа килеште.**

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.
Баймаҡ районы.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# МИН БАШҠОРТ ТЕЛЕН КҮТӘРӘМ,

## башҡорт теле мине күтәрә!



**Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 80 йыллығына арнап уҙғарылған "Урал-Алтай: быуаттар аша киләсәккә" V Бөтә Рәсәй төркиәт конференцияһында матур итеп башҡортса һөйләшкән, ләкин төҫ-башы менән генә айырылып торған ир-азамат берәүҙең дә иғтибарынан ситтә ҡалмағандыр. Баҡтиһәң, бынан ике тиҫтә йыл самаһы элек бөгөн Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры булып эшләүсе Фирҙәүес Хисамитдинова Башҡорт дәүләт педагогия институтында декан булған ваҡытта Башҡортостанға уҡырға килгән иң тәүге төрөк студенттарының береһе Исмәт Бинәр икән ул. Ул БДПИ-ның башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультетында белем ала, аспирантура тамамлап, Төркиәгә ҡайта. Үҙе әйтеүенсә, ҡайҙа ғына булмаһын, тел буйынса үткәрелгән сараларҙа ҡатнашырға һәм сығыш яһарға тырыша. Әйҙәгеҙ, һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.**

- Ғилми эшем - тормошомдоң бер өлөшө. Башҡорт теле, башҡорт әйтем-мәҡәлдәре буйынса фәнни эш яҙам. Төркиәлә иң абруйлы Истанбул, Анкара, Гази университеттарында халыҡ-ара конференцияларҙа ҡатнашҡанда ла гел башҡорт телендә сығыш яһайым. Былтыр Ҡырғыҙстанда халыҡ-ара конференция булды. Унда Төркиәнән, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Әзербайжандан һәм башҡа бик күп төрки халыҡтары йәшәгән илдәрҙән ғалимдар ҡатнашты. Шунда бер ҡырғыҙ профессоры: "Бына мин ҡырғыҙса һөйләйем. Ә һеҙҙең арағыҙҙа төрки телдәренең береһендә һөйләүселәр бармы?" - тип залға мөрәжәғәт итте. Минең сығышым төрөк телендә лә, башҡорт телендә лә әҙерләнгәйне. Ҡырғыҙ профессорының мөрәжәғәтенән һуң, исемлек буйынса сиратым еткәс, башҡортса сығыш яһаным. Һуңынан бөтөн зал аяғүрә баҫып алҡышланы. Ә Төркиәнән килгән профессорҙар, шаяртып: "Һин беҙҙең намыҫты ҡотҡарҙың", - тине. Шулай итеп, төрки халыҡтары йәшәгән ниндәй генә дәүләттә сығыш яһамайым, мин - башҡорт телен, башҡорт теле мине күтәрә.

**➔ Бөгөн Башҡортостанда башҡорт телен мәктәптәрҙә уҡытырғамы, юҡмы, ул кәрәкме, юҡмы, тигәнерәк фекерҙәр яңғырай һәм бәхәстәр бара. Балалар ғына түгел, уларҙың ата-әсәләре лә, башҡорт теле нимәгә кәрәк, тигәнерәк ҡараштa тора. Ошо мәсьәлә буйынса фекерегеҙ?**

- Хоҙайға шөкөр, башҡорт телен белеүем, уны бар камиллығында өйрәнгәнем менән ғорурланам. Әле мин Төркиәлә Юныс Эмре исемендәге институтта бүлек директоры булып эшләйем. Институтыбыҙ Мәғариф, Мәҙәниәт һәм Сит ил министрлыҡтары менән хеҙмәттәшлек итә. Польшала, Косовола Юныс Эмре исемендәге төрөк мәҙәни үҙәктәре астыҡ, улар беҙҙең институттың филиалдары булып тора. Шуны ҙур ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ менән әйтә алам: Төркиәнең иң юғары университеттарының береһендә Төркиәт бүлеге асылғас, унда башҡорт теле дәрестәрен индереү инициаторы булдым. Хәҙер башҡорт теле Төркиәнең бер нисә университетында уҡытыла. "Урал - Алтай: быуаттар аша киләсәккә" конференцияһында ла үҙебеҙҙең институт исеменән ҡатнаштым. "Башҡорт мәҡәл-әйтемдәрендә изге йолаларҙың сағылышы" тигән тема буйынса башҡортса сығыш яһаным. Башҡортостан, Татарстан ғалимдарының сығыштарынан һуң уларға башҡортса һорауҙар бирҙем. Ултырыш тамамланғас, конференцияны алып барыусы "Төркиәнән килгән ҡунағыбыҙға ла рәхмәт", тигәйне, Татарстан ғалимдары аптырап: "Кем ул Төркиәнән?" - тип тирә-яғына ҡаранды. Минең Төркиәнән һәм төрөк милләтенән икәнлекте белгәс, ғәжәпләнеүҙәренең сиге булманы. Эйе, минең 100 проценты менән башҡортса һөйләшеүем күптәрҙе аптырата. Хатта Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы: "Тап-таҙа башҡортса һөйләйһең, шуға күрә һин ысын башҡорт түгел, бер-ике рус һүҙен ҡыҫтырып ебәрһәң, ысын башҡорт булырһың", - тип көлә. Ә инде курсташтарым: "Нисек йәшәйһең?" - тип хәл һорашһа, "Мин башҡортса йәшәйем", тием. Уны мин кемгәлер ярар өсөн әйтмәйем, башҡорт теле лә, мәҙәниәте лә, йәшәйеше лә ҡаныма һеңгән, яҙмышыма ингән. Мин генә түгел, кем заманында Башҡортостанда белем алған, барыбыҙ ҙа шулай яҡын күрәбеҙ башҡорт телен һәм башҡорттарҙы. Башҡорт телен өйрәнеп, беребеҙ ҙә тормош юлында аҙашып, юғалып ҡалманы. Төркиәнең иң юғары вазифаларында эшләйбеҙ. Арабыҙҙа Президент, Хөкүмәт аппаратында эшләүселәр, университеттарҙа белем биреүселәр, парламент депутаттары бар. Унан һуң, башҡорт телен дә белеү башҡа төрки телле халыҡтар менән иркен аралашыу мөмкинлеген бирә.

**➔ Тимәк, һеҙ - Башҡортостан балалары инде. Ә Төркиәлә һеҙ бер-берегеҙ менән нисегерәк аралашаһығыҙ?**

- Беҙ, Башҡортостанда белем алған студенттар, һаман да Төркиәлә үҙ-ара аралашып, осрашып торабыҙ. Бер-беребеҙгә: "Әйҙәгеҙ, башҡорттар, йыйылышабыҙ", - тип оран һалабыҙ, ваҡыт билдәләйбеҙ ҙә, осрашҡас, башҡортса һөйләшергә тырышабыҙ. Үҙем шәхсән телевизорҙанмы, радионанмы, гәзиттәрҙән булһынмы, Башҡортостан хәбәрҙәрен ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам. Хатта туғандарым да Башҡортостан тураһында хәбәр уҡыһа, миңә еткерә һалалар. Башҡорт иле, башҡорт теле беҙҙең күңелдәргә ныҡлап уйылған. Өфөгә һуңғы килеүемә биш йыл да үтеп киткән. Әммә Өфөнән бер ҡайҙа ла китмәгәнмен һымаҡ тойғолар кисерәм әле. Башҡортостанға юлға сығыр алдынан бер нисә дуҫым менән телефон аша һөйләштем, Өфөгә барам, тигәс, уларҙың берикеһе хатта иланы. Сөнки Башҡортостан тураһында беҙҙең күңелдәрҙә шул тиклем матур хәтирәләр һаҡлана. Ауыр ваҡыттар ҙа булманы түгел. Урал тауҙарына барғанда, өшөп, туңып, илаған ваҡыттарыбыҙ ҙа булды. Шуға ҡарамаҫтан, күңелдәрҙә бары тик яҡшы, матур хәтирәләр генә. Шул хәтирәләр менән йәшәйбеҙ. Башҡортостанды яратабыҙ.

**➔ Исмәт бей, бына Һеҙ рәхәтләнеп, ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшәһегеҙ, башҡорт теле Һеҙгә төрки дәүләттәрендә булғанда ниндәй абруй килтереүен һөйләйһегеҙ, ә шул уҡ ваҡытта Башҡортостандың йөрәгендә - Өфөлә ҡатнашҡан сараларҙа рус телендә лә сығыш яһарға тура килә, тиһегеҙ...**

- Эйе, әлеге конференциялағы сығышымда ҡотлау һүҙен башта русса әйттем дә, һүҙемде тиҙ генә башҡортсаға күсерҙем. Залдағы башҡорт ғалимдарының таныш йөҙҙәре һәм күҙҙәре менән осрашҡас, рус телендә һөйләргә ҡыйыулығым етмәне. Әлбиттә, мин русса ла сығыш яһайым, русса ла һөйләшәм, мәҡәләләр ҙә яҙам. Һәм башҡортса һөйләшеүҙән дә проблема яһарға, оялырға кәрәкмәй, тип уйлайым. Йәштәр башҡорт теленең дәүләт теле статусын күтәреү өсөн тырышырға, һәр ерҙә рус теле менән бергә туған телендә лә һөйләшергә тырышырға тейеш. Башҡортостан иҡтисади яҡтан күтәрелә, нығына, был күҙгә ташланып тора: матур биналар төҙөлә, юлдар төҙөк, уларҙан матур машиналар елдерә. Әммә матди байлыҡ - ваҡытлыса ғына, халыҡ үҙенең рухи байлығын юғалтырға тейеш түгел. Мин, Башҡортостанға Төркиәнән килгән кеше булараҡ, шуны ғына әйтергә теләйем: 10 йыл элек Башҡортостанда уҡып, белем алып, телде үҙләштереп, Төркиәгә ҡайттым, һаман да башҡортса һөйләйем, башҡортса йәшәйем. Ситтә, сит милләттәр араһында йәшәйем, тип, башҡорттар үҙҙәре туған телен онотмаһын ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо хәл аҙым һайын күҙәтелә һәм был мине бик нык борсой...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



## МИЛЛИ РИЗЫҠТАРЫБЫҘ

**Башҡорт мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү проблемалары актуалләшкән ваҡытта милли ризыҡтарҙы пропагандалауға ла етди иғтибар бирелә. Аҙыҡ-түлек комплексы милли ҡаҙаныш тип ҡабул ителгән этник символдарҙың төп билдәләренең береһе булып тора. Традицион аҙыҡ-түлек һәм эсемлектәр, уларҙы әҙерләү ысулдары, ризыҡтарҙы тәҡдим итеү, уларҙы ейеүҙең социаль аспекттары иң сағыу һәм ныҡлы урын алған мәҙәни-көнкүреш традицияларға ҡарай.**

Традицион туҡланыу системаһы халыҡтың мөхиткә яраҡлашыуы процесында формалаша, аҙыҡ-түлек ресурстары уның ҡайҙа йәшәүенә һәм алып барылған хужалыҡ итеү структураһына бәйле була. Натураль хужалыҡ алып барған башҡорттарҙың традицион аҙыҡ-түлек комплексы миҙгелгә ҡарап алышынған. Көньяҡ башҡорттарының тарихи моделе һөт, ит, үҫемлек продукттарынан торған. Ултыраҡ тормошҡа күсә барған һайын продукттар балансы иген-һөт-ит моделенә күскән. Менюға индерелгән продукттар һәм ашау сифаты ғаиләнең социаль статусына һәм матди хәленә бәйле булған. Башҡорт кухняһын анализлау халыҡтың аҙыҡ-түлек продукттарын (ит, һөт, иген культуралары, төрлө үләндәр, емеш-еләк һ.б.) эшкәртеүҙең бик күп ысулын оҫта ҡулланыуын, шуға күрә традицион менюның, бигерәк тә йәйге-көҙгө миҙгелдә, бай һәм төрлө булыуын күрһәтә.

Башҡорттарҙың туҡланыу системаһында бер нисә төрлө ваҡытҡа ҡараған, әммә үҙ-ара бәйле ҡатламдарҙы күрергә мөмкин. Туҡланыу мәҙәниәтендәге үҙгәрештәр хужалыҡ тармаҡтарының үҫешенә, сеймалды эшкәртеү һәм һаҡлау ысулдарының камиллашыуы, шулай уҡ хужалыҡ-иҡтисади һәм этномәҙәни бәйләнештәрҙең йоғонтоһо менән аңлатыла.

Аҙыҡ-түлектең бер төрө иртә ҡатламға ҡарай. Уға аҙыҡ-түлек өсөн файҙаланырға яраҡлы үләндәрҙе, тамырҙарҙы (ҡырағай һуған-йыуа, һарымһаҡ, балтырған, һарына һ.б.), еләк-емеште индерергә мөмкин. Башҡорттарҙың традицион кухняһындағы тәбиғи компоненттар йыш ҡына һөт, иген һәм ит продукттары менән тулыландырыла. Шундай ашамлыҡтарға, мәҫәлән, еләкле эремсек, һөттә бешерелгән еләк йәки һары майҙа консерваланған еләктәр; ярмалар, ҡаймаҡ, май менән йәшел аштар; үләндәр ҡушылған ит аҙыҡтары һ.б. инә. Башҡорттар борон шулай уҡ ҡырағай хайуандарҙың һәм ҡоштарҙың итен, балыҡты усаҡта ҡурып ашаған. Борон башҡорттарҙың ҡайһы бер төркөмдәрендә "айыу туйы" байрамы уҙғарылған. Унда айыу итен ашағандар. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ҡырағай хайуандарҙы һәм ҡоштарҙы изгеләштергәндәр (айыу, аҡҡош, торна һ.б.) һәм уларға һунар тыйылған.

Балды халыҡтың туҡланыу рационына индереү ҙә боронғо сығанаҡтарға эйә. Ҡырағай бал ҡорттарының балын системаһыҙ, осраҡлы ғына йыйыу һуңынан башҡорттарҙың традицион хужалыҡ шөғөлөнә (солоҡсолоҡ, умартасылыҡ) инеп киткән.

I-II мең йыллыҡтар сигендә, шулай уҡ урта быуат эпохаһында һәм артабанғы йөҙ йыллыҡтарҙа (XX быуатҡа тиклем) башҡорттарҙың туҡланыуында малсылыҡ продукттары өҫтөнлөк итә. Ул теге йәки был кимәлдә ер эшкәртеү, хужалыҡтың башҡа тармаҡтары менән берләшеп, төп ҡатламды (ит-һөт-үҫемлек-селек) тәшкил итә һәм быуаттар буйына формалаша, даими рәүештә аныҡ ялан, урманлы ялан, таулы урман шарттарына яраҡлаша. Уларҙа төрлө мәҙәни традицияларға ингән ҡатламсыҡтар айырыла - иртә күсмә, һуң күсмә. Иртә күсмә халыҡ һөттән сыр яһай белгән. Бейә һөтөн әсетеү традицияһы ла киң тарала. Геродоттың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ҡымыҙ скифтарға билдәле була. Шул осорҙа башҡорттарҙың ҡорот эшләп киптереүе лә мәғлүм. Һыйыр, кәзә, һарыҡ, дөйә һөтөн эшкәртеү бер нисә стадиянан тора. Башҡорттарҙың һәм малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡа төрки халыҡтарының туҡланыу мәҙәниәтенә тиҙ ҡуллана торған (ҡаймаҡ, һөт өҫтө, май, эремсек, әсетелгән һөт, ҡымыҙ, айран) һөт аҙыҡтары ла, оҙаҡ һаҡлана торғандары ла (ҡоро сыр-ҡорот, эремсек, һары май һ.б. ) инә.

**Э. МИҺРАНОВА.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөнгө көндә бер башҡорт ижадсыһының концертына башҡорттар ҙа, урыҫтар ҙа, немецтар ҙа билет һатып алып килә - ул Роберт Юлдашев, сөнки ул көнө-төнө репетициялар үткәрә, үҙен даими камиллаштырып тора.***

**XX быуаттың икенсе яртыһында быға тиклем булған "совет эстрадаһы" төшөнсәһен бөтөнләй икенсе төрлө йүнәлеш - шоу-бизнес алыштырҙы. Сәнғәт донъяһы хәҙер башлыса иктисади закондар буйынса йәшәй һәм башҡорт эстрадаһы ла ошо ҡанундар буйынса үсешергә мәжбүр. Күренеш булараҡ, башҡорт музыкаль шоу-бизнесы нимәнән ғибәрәт? Ғөмүмән, башҡорт шоу-бизнесы бармы, булһа, уның милли үҙенсәлектәре нимәлә? Ошо темаға һөйләшер өсөн бөгөн эшҡыуарлыҡтың өр-яңы төрө - промоутерлыҡ менән шөғөлләнеүселәр, "Шау-шоу интертеймент" промоутер үҙәген ойоштороусылар - Заһир ҠОТЛОСУРИН менән Рөстәм БИКМӨХӘТОВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

# ҮҘ АЛЛЫЛЫҠҠА

## ижад үрен

**► Хәҙер интернетта бар мәғлүмәт тә бар, тиергә яратабыҙ, әммә унда артистарҙың шәхси тормошона ҡағылышлы ғәйбәт, ниндәйҙер имеш-мимештәрҙән тыш, "Нимә ул Рәсәй шоу-бизнесы?" тигән ябай һорауға ла яуап табыуы ауыр. Был Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә шоу-бизнестың булмауы тураһында һөйләйме?**

**З. Ҡотлосурин:** "Шоу-бизнес" терминын төрлөсә аңларға була, әммә уның төп мәғәнәһе - күңел асыу индустрияһы. Әгәр ҙә бөгөнгө көндә Башҡортостанда артистар йырлап аҡса эшләй, фатир, машина һатып ала икән, тимәк, ул индустрия беҙҙә лә бар. Мәҫәлән, йырсы Сәғиҙулла Байегет йәки һүҙ оҫтаһы Илнур Юламанов миҫалын алайыҡ. Улар теләһә ниндәй концертта ла, туйҙарҙа ла, хөкүмәт концерттарында ла көтөп, саҡырылып алына торған артистар. Шулай уҡ Роберт Юлдашев шәхси кисәләрҙән алып дөйөм Рәсәй кимәлендәге концерттарҙа юғары баһалана. Бына быларҙың барыһы ла шоу-бизнесты тәшкил итә лә инде. Шулай булғас, башҡорт күңел асыу индустрияһы бар, ә бына был индустрияның күләме, әйләнеше тураһында һүҙ йөрөткәндә, әлбиттә, уныһы икенсе мәсьәлә.

**Р.Бикмөхәмәтов:** Артистың таланты бар икән, уның ошо талантын яраталар икән һәм ул ошо таланты арҡаһында үҙен-үҙе туйҙыра ала икән, был күренеш бизнесҡа әйләнә. Шоу-бизнес "шоу" менән "бизнес" тигән һүҙҙәрҙән тора, ә был һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын бөгөн берәүгә лә төшөндөрөп торорға кәрәкмәйҙер. Күңел асыуҙан табыш алыу - шоу-бизнестың төп йүнәлеше шул.

**З. Ҡотлосурин:** Иҡтисади закондар буйынса ҡараһаҡ, ижадсы бар, уның ижадын ҡабул итеүселәр ҙә бар. Ошо ике теләк шоу-бизнесты булдыра. Әгәр ҙә бер шәмбе кисендә Өфөнөң өс клубында башҡорт аудиторияһына, йәштәр сегментына йүнәлтелгән өс төрлө сара була икән, уларҙың өсөһөнә лә билет һатыласаҡ. Был башҡорт шоу-бизнесы барлығының күрһәткесе, әммә ул әле ҙур булмаған майҙансыҡта үсешә, киңәйеп китер ине, баҙар һыйҙырышлығы тигән нәмә бар. Ул тар, сөнки бөгөнгө көндә бөтөн Ер йөҙөндә ике миллион ғына башҡорт йәшәй һәм уларҙың ун проценты ғына йырға-моңға мохтаж. Шуның тағы ун проценты концерттарға билет һатып алып инергә теләй. Ҡулланыусылар баҙарының тар булыуы сәбәпле, артистар күпмелер үсешә лә, туҡтап ҡала. Ындай хәлгә тарымайым, тиһәң, башҡорт аудиторияһына ғына эшләүҙән туҡтап, киңерәк масштабҡа, әйтәйек, Рәсәй эстрадаһы кимәленә сығырға кәрәк. Мәҫәлән, Роберт Юлдашев башҡорт тамашасыһын күҙ уңында тотоп ҡына

ижад итһә, ул да үсешә алмаҫ ине. Радик Юльяҡшин тураһында ла шулай тип әйтергә була, бөгөн ул Мәскәүҙә эшләй. Белеүемсә, хәҙер Заһит Ҡунафинға тәҡдимдәр менән йыш шылтыраталар. Бөгөн башҡорт шоу-бизнесы тип, уға ғына йөҙ төбәп торһаҡ, үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнап, үсеш булмаясаҡ. Шуға ла үҙебеҙҙә промоутерҙар булараҡ, юғарыраҡ кимәлдә күрәбеҙ һәм беҙҙең маҡсат - халыҡ-ара транснациональ промоутер компанияһы булдырыу.

**► Йәмғиәттә быға тиклем, продюсерҙар булмайынса, башҡорт эстрадаһы тейешенсә үсешә алмаясаҡ, тигән ҡараш йәшәй ине. Хәҙер тағы ла яңынан-яңы терминдар, хеҙмәт төрҙәре барлыҡҡа килә, әммә башҡорт эстрадаһы һаман да бер урында тапана кеүек...**

менән хыялды икеһен ике төрлө төшөнсә итеп күрә. Хыялланырға һәм был хыялды тормошҡа ашырыу өсөн ялҡау булмаҫҡа ғына кәрәк. Бының өсөн милләтең менталитетын үҙгәртергә кәрәк. Ялланып эшләгән милләт бер ҡасан да азат була алмаясаҡ, ә беҙҙә бөгөн бөтөн халыҡ эштән яҡлау эҙләй. Совет заманында ҡартайғас, исмаһам, лайыҡлы пенсияһын түләйҙәр ине. Бөгөн дәүләткә ышанып ултырыу мәле үтеп, үҙеңә ышанырға кәрәк, бигерәк тә шоу-бизнеста. Эстрадаһы продюсер ҙа, промоутер ҙа үҙе генә алға этәрә алмаясаҡ, бының

яңы һулыш кисерә, йырҙарына клиптар төшөрә башланы. Хәҙер Заһит Ҡунафин үҙе гастролдәр ойоштора, уның тирәһендә башҡа ижади йәштәр өйөрөлә, ул кемгәлер текст, кемгәлер көй яҙа.

Вилдан Яруллин айырым продюсер үҙәге булдырып, музыканттар йыйҙы, нисәмә башҡорт егетенә эш бирҙе. Ул шулай уҡ клиптар төшөрә, шуның арҡаһында халыҡ араһында киңерәк танылыу яуланы. Әгәр ҙә Заһит йәки Вилдан клип төшөрә икән, икенсе бер башҡорт егетенә, шул уҡ Әҙелбаевҡа аҡса түләй. Йәғни, бер хәрәкәт икенсе хәрәкәтте тыуҙыра. Әгәр ҙә улар дәүләттән эш хаҡы алып, берәй ерҙә ултырһа, бында хәрәкәт тә булмаҫ ине. Шул рәүешле, ижадсы үҙ аллылыҡҡа ынтылырға тейеш, шул саҡта ғына башҡорт эстрадаһы алға китәсәк. Шуға ла бында Мәҙәниәт министрлығынан көтөп ултырырға түгел, үҙеңә ҡыбырлау шарт.

Әйткәндәй, бөгөн министрлыҡтағы системалы көрсөктөң

ғанда сығыш яһарға теләгән ҡайһы бер йәштәргә үҙҙәрен күрһәтеү өсөн майҙан бирәбеҙ.

**З. Ҡотлосурин:** Башҡорт эстрадаһында, мәҫәлән, Заһит Ҡунафин, Радик Юльяҡшин үҙенә үҙе продюсер. МС Баш "Бишбармаҡ" фестивале, батлдар үткәрә, клиптарына төшөү өсөн кастингтар ойоштора, алып барыусыларҙы йәлеп итә, йәғни уны маҡсатлы эшләгән продюсер тип әйтергә була. Үҙҙәрен рекламалау йәһәтенән Гөлнур Ҡарабулатова менән Айҙар Хәмзинды маҡтап телгә алырға була, тере тауыш менән йырлау йүнәлеше лә киң популяр. Клуб мәҙәниәте йүнәлешен үстереүсе диджейҙар бар. Ә беҙҙең үҙәк промоутерлыҡ эше менән шөғөлләнә. Беҙ әҙер продуктты алабыҙ ҙа, шуны һатабыҙ. Ҡыҫҡа итеп әйткәндә, беҙҙең дөйөм эш күберәк шоуҙың бизнесында, сөнки ҙур сараларҙы башҡорт даирәһендә генә түгел, Мәскәү һәм көнбайыш кимәленә сығып эшләйбеҙ.



өсөн тырыш ижадсылар ҙа булыуы шарт.

Бөгөнгө көндә бер башҡорт ижадсыһының концертына башҡорттар ҙа, урыҫтар ҙа, немецтар ҙа билет һатып алып килә - ул Роберт Юлдашев, сөнки ул көнө-төнө репетициялар үткәрә, үҙен даими камиллаштырып тора. Беҙ уның бер нисә концертын эшләнек, һуңғыһында хатта билеттар ҙа етмәне. Шул уҡ ваҡытта, башҡорт, Рәсәй шоу-бизнесынан тыш, донъя музыкаһы тигән төшөнсә лә бар. Әгәр ҙә Роберт Юлдашевты донъя кимәленә сығарырға теләһәк, беҙ уны шул кимәлдәге музыканттар менән бергә ҡуйырға тейешбеҙ.

Шуның өсөн дә донъяла танылыу алған Тываның "Хуун-Хуур-Ту" һәм Санкт-Петербургтың "Терем-Квартет"ы менән кон-

сәбәбе бер - унда берәү ҙә үҙ эше менән шөғөлләнмәй. Ҡурайсы - ҡурай уйнарға, йырсы - йырларға, етәксе - етәкләргә тейеш, ә беҙҙә бөгөн быларҙың барыһы ла буталып бөткән. Мәҙәниәт үсешһен өсөн яҡшы идарасылар булырға тейеш, тап улар тарҡау төркөмдө һәҙәмтәле көскә әйләндерер ине. Миненсә, Өфө сәнғәт академияһында белем алыусыларҙы барыһына ла сәнғәт менеджменты уҡытырға кәрәк, сөнки уларҙың ҡайһы берҙәре иртәме-һуңмы етәксе булып эшләйәсәк. Хәҙер Мәҙәниәт министрлығы күҙәтеү, контролдә тотоу йәһәтенән үҙенең эшен эшләмәй, профессиональ милли сәнғәт үсешенең концепцияһы

**Р.Бикмөхәмәтов:** Мин алты йыл буйына башҡорт шоу-бизнесының беренсе ижадсыһы - Роберт Юлдашевтың директоры булып эшләнем. Заһир Башҡорт йәштәре иттифағы менән төрлө мәҙәни саралар ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан, унан һуң Башҡорт дәүләт филармонияһында концерт эшмәкәрлеге менән ныҡлап шөғөлләнгән кеше. Һөйләштек тә, уртаҡ теләктәр, маҡсаттар булғас, икәүләшеп ҙаллы үҙәк төҙөнөк. Эшләй башлағаныбыҙға көҙ ике йыл була, төүге йылда проекттар эшләйбеҙ, тип, ҙур бурыстарға батып бөттөк. Әммә был ваҡытлы күңелһеҙлектәр беҙҙе нығытты ғына, тип уйлайым.

**З. Ҡотлосурин:** Ниндәй генә кешенән, ни өсөн эшҡыуарлыҡҡа тотондоғоҙ, тип һораһаң, сараһыҙлыҡтан һәм аҡса булмағанлыҡтан, тип яуап бирә. Бөтөн проблемалар һине килтереп бер мөйөшкә ҡыҫҡан саҡта ғына кеше үҙенең өйрәнгән комфорт зонаһынан сыға. Минең менән дә шундайыраҡ хәл килеп сыҡты ла, мин күптән хыялланып йөрөгән эшемә тотондом. Көн һайын кемдер эшләгән ғәҙәти концертты эшләге килмәй ине. Енел юлды һайлаһаҡ, ҡыйыныраҡ булырын да белдек, сөнки бөтәһе лә еңел юлды һайлай, һәҙәмтәлә, конкуренттар күбәйә. Уйлаштыҡ та, юлдың ауырын һайланыҡ. Ауыр булһа ла, кеҫәлә бер тин аҡса булмаған саҡтарҙа ла 5 миллионлыҡ проекттарға тотонорға ҡурҡмай, уны йырып сыҡҡан ваҡыттар булды. Әлеге ваҡытта килəһе йылдың февраль айына концерттарға килешеүҙәр төҙөйбөҙ, сөнки яҡшы артистың пландары ике йылдан алып биш йылға тиклем алдан төҙөлә.

Ә промоутер булып эшләүҙең схемаһы бик ябай. Берәй артис-

***"Шоу-бизнес" терминын төрлөсә аңларға була, әммә уның төп мәғәнәһе - күңел асыу индустрияһы. Әгәр ҙә бөгөнгө көндә Башҡортостанда артистар йырлап аҡса эшләй, фатир, машина һатып ала икән, тимәк, ул индустрия беҙҙә лә бар. Мәҫәлән, йырсы Сәғиҙулла Байегет йәки һүҙ оҫтаһы Илнур Юламанов миҫалын алайыҡ. Улар теләһә ниндәй концертта ла, туйҙарҙа ла, хөкүмәт концерттарында ла көтөп, саҡырылып алына торған артистар. Шулай булғас, башҡорт күңел асыу индустрияһы бар.***

**З. Ҡотлосурин:** Әгәр ҙә Голливудта 19 йәшлек Селена Гомес 1 миллион һумлыҡ гонорар эшләй һәм популярлыҡ яулай икән, Бөрйән районының төпкөл ауылында йәшәгән ҡыҙ ошондай уҡ мөмкинлектәргә эйә. Дима Билан, МС Баш эшләгәндә, башҡалар ҙа эшләй ала. Әммә бының өсөн ул башҡалар кеүек уйлауҙан туҡтарға тейеш. Беҙҙең егеттәрҡыҙҙар берәй эше килеп сыҡмаһа, уны атҡарыусыҙын башҡа кидарын эҙләү урынына, ҡулын һәлендерә лә ҡуя. Кемдер нимәлер тейеш, ти башлайҙар. Был донъяла бер кем дә бер кемгә лә бер нәмә лә тейеш түгел. Беҙҙә кеше ни өсөндәр ысынбарлыҡ

церт уңышҡа ла өлгәште, Робертты ла бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрҙе. Ошо концертта беҙ был ижадсыларҙың фекерҙәш икәнен дә аңланыҡ. Роберт Юлдашев мондоң Хоҙай тарафынан бирелгән мөғжизә икәнлеген таный һәм уның эргәһендә ошондай уҡ ҡарашлы музыканттар йыйыла. Бына ошондай фекерҙәштәрҙе бер ҡорға йыйыу ынғай энергия бирә.

Бынан ниндәй һығымта яһарға мөмкин һуң? Әгәр ҙә ижадсы үҙенең талантын үҫтереү өстөндә эшләй, яңы ижади ғәүһәрҙәр тыуҙыра икән, ул халыҡҡа ла ҡыҙыҡ. Бөгөнгө башҡорт эстрадаһын алып ҡараһаҡ, унда МС Баш

юҡ. Белгестәр әҙерләйбеҙ, уларҙы эшкә урынлаштырмайбыҙ.

**► Промоутерлыҡ эше продюсер эшенән нимәһе менән айырыла? Һеҙҙе эшҡыуарлыҡтың был төрө менән шөғөлләнә башлауға нимә этәрҙе?**

**Р.Бикмөхәмәтов:** Продюсер ижадсыны таба, уның ижадының концепцияһын билдәләй, шуны алға этәрә, уға көй яҙа, аранжировкалар эшләй. Йәғни, продюсер ижад емеше тыуҙырып, шуны һата ла, шуның процентына йәшәй. Ә беҙ көй яҙмайбыҙ, аранжировкалар эшләмәйбеҙ, шулай ҙа берәй сара ойоштор-

# ЫҺТЫЛҒАНДАР... яулар

***✓ Бөгөнгө көндә миллилек - беҙҙе башҡаларҙан айырып тороусы баҙар үҙенсәлеге булып тора. Тап миллилек менән генә беҙ донъяны аптырата алабыҙ. Роберт Юлдашевтың ижадында тап ошо үҙенсәлек бар.***



***Татар эстрадаһының күпкә үҫешкәнерәк булыуының үҙенең сәбәптәре лә бар. Беренсенән, улар һан яғынан күберәк, тимәк, татар эстрадаһы артистарының ижадын аҡса түләп ҡараусылар күберәк. Ижадсы өсөн үҙ тамашасыһының булыуы мотлаҡ. Беҙҙең артистар Көньяҡ Урал райондарына сығып китәләр ҙә, шул төбәктә генә концерт ҡуйып ҡайтырға мәжбүрҙәр, сөнки башҡорттар күпләп ошо райондарҙа йәшәй. Башҡа райондарға улар бөтөнләй сығып йөрөмәй тиерлек.***

тың ижады менән танышабыҙ, уға шылтыратып йәки интернет аша эҙләп табабыҙ һәм һөйләшеүҙәр башлайбыҙ. Артистарҙы, жанрҙарҙы һайлауҙа үҙебеҙҙе бер нисек тә сикләмәйбеҙ, эштең килеп сығыуына ышанһаң, ул барыбыр уңышлы сыға. Тағы ла бер әйбер - әгәр ҙә ижадсы үҙендең күңеленә ятмаһа, уны "һатыуы" ауыр. Финанс күҙлегенән сығып, аҡса эшләйем, тип тотонһаң, эш килеп сыҡмай. Икенсерәк, изге ниәт менән, әйҙә, халыҡты ҡыуандырайыҡ, тип эшләһәң, үҙеңә лә шул тиклем оҡшай. Быйыл Эйвор тигән Фарер утрауҙарынан килгән йырсының концертын эшләнек. Рәсәйҙә ул беренсе тапҡыр сығыш яһаны. Иң һәйбәт реклама - ул ижадсының концерты, беҙҙәге уңышынан һуң, Екатеринбургта шунда уҡ билеттар һатылып бөткән.

**Р.Бикмөхәмәтов:** Әйткәндәй, беҙгә күптәр, концерттарығыҙ интеллектуаль, тип баһа бирә. Ынғай энергиялы, башлыса инструменталь жанрҙа эшләүсе ижадсыларҙы саҡырырға тырышабыҙ, концерттан кеше насар кәйеф менән ҡайтып китергә тейеш түгел. Был саҡта уның бөтөн кире кәйефе һиндә ҡала. Матди яҡтан концертты нисек - табыш алыпмы, зыян күреп үткәрәһеңме - быныһы мөһим түгел. Ун билет ҡына һатыла, әммә ул ун кеше лә ҡыуанып ҡайтып китә икән - бына ошоноһо мөһимерәк.

**▸ Донъя музыкаль индустрияһында башҡорт ижадсыһын ниндәй үҙенсәлек айырып тора аласаҡ?**

**З. Ҡотлосурин:** Бөгөнгө көндә миллилек - беҙҙе башҡаларҙан айырып тороусы баҙар үҙенсәлеге булып тора. Тап миллилек менән генә беҙ донъяны аптырата алабыҙ. Роберт Юлдашевты ни өсөн яраталар, сөнки уның ижадында тап ошо үҙенсәлек бар. Бөгөн республиканың симфоник оркестры Д. Шостакович, Г. Малерҙың әҫәрҙәрен уйнап, донъя иғтибарын яуламаҡсы була. Үҙебеҙҙең башҡорт композиторҙарының уйналмай ятҡан әҫәрҙәрен тамашасы иғтибарына сығарһалар, улар күпкә отор ине. Ҡыҙғанысҡа күрә, ошо ябай ғына хәҡиҡәтте аңламайбыҙ. Был фекерҙең асыҡ миҫалы булып "Урал моңо" фестивале тора. Унда һәр ҡатнашыусы үҙенең милли мәҙәниәте менән килә һәм ул үтемле була ла. А. Масляковтың КВН-ын алып ҡарайыҡ. Ни өсөн "Астана kz" командаһы алға сыға, сөнки уларҙа ҡаҙаҡтарға хас милли юмор бар. Шул уҡ "Парни из Баку", "Махачкалинкие бродяги" командаларын ҡарағыҙ, уларҙың барыһы ла милли үҙенсәлеген күрһәткән өсөн юғары баһалана. Өфөлә КВН эшләйбеҙ тип йыйылып, нимәнәндер көләләр ҙә, таралалар. Был Өфө тамашасыһына ҡыҙыҡтыр, әммә Мәскәүҙә беҙ башҡорт колориты, башҡорт юморы менән генә алдыра alaсаҡбыҙ. Миллилек, милли үҙенсәлек - баҙар хаҡы икән, башҡорт халыҡ йырҙарын тәбиғи тауыш менән йырлау донъяла башҡорт өсөн иң ҡиммәт баһалана торған хеҙмәт булырға тейеш.

**▸ Концерт миҙгеле башланһа, Башҡортостанға күпләп Татарстан эстрадаһы йондоҙҙары ағыла башлай. Тимәк, беҙҙең промоутерҙар улар менән дә күберәк эшләй килеп сығамы? Күршеләребеҙҙә милли эстрада яҡшыраҡ үҫешеүе тураһында ла хәбәрҙарбыҙ, был нимә менән бәйле?**

**Р.Бикмөхәмәтов:** Татар эстрадаһының күпкә үҫешкәнерәк булыуының үҙенең сәбәптәре лә бар. Беренсенән, улар һан яғынан күберәк, тимәк, татар эстрадаһы артистарының ижадын аҡса түләп ҡараусылар күберәк. Ижадсы өсөн үҙ тамашасыһының булыуы мотлаҡ. Беҙҙең артистар Көньяҡ Урал райондарына сығып китәләр ҙә, шул төбәктә генә концерт ҡуйып ҡайтырға мәжбүрҙәр, сөнки башҡорттар күпләп ошо райондарҙа йәшәй. Башҡа райондарға улар бөтөнләй сығып йөрөмәй тиерлек. Әммә үҙенең ижады өҫтөндә ныҡлап эшләгән кешеләр өсөн бындай сиктәр юҡ. Бының асыҡ миҫалы булып Ғәзим Ильясов тора. Ул күберәк республиканың көнбайыш райондарында башҡортса концерттар ҡуйып йөрөй, уның ижадын яраталар һәм бик яҡшы ҡабул итәләр.

**З. Ҡотлосурин:** Бәлки, ҡайһы берәүҙәр хәтерләйҙер, Бөтөн союз кимәлендәге "Таҫма" тигән магнит ленталы кассеталар етештереү заводы Татарстанда урынлашҡайны, уның студияһы бар ине. Союз тарҡалғас, ул республикала тороп ҡалды һәм үҙенә күрә татар эстрадаһының үҫешенә ярҙам итте. Унан, күршеләрҙә үткән быуаттың 90-сы йылдарында уҡ профессиональ сәнғәттән эстраданы айырҙылар. Бөгөн ни өсөн башҡорт шоу-бизнесы юҡ, сөнки күп артистар һаман да дәүләт ҡанаты аҫтында. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт филармонияһы бөгөнгө көндә профессиональ статусы булған өс базалы коллектив - БР-ҙың Дәүләт академик хор капеллаһы, БР-ҙың Халыҡ инструменттары милли оркестры, эстрада-джаз оркестры һәм айырым эстрада төркөмдәренән тора. Ижади берәмек булараҡ, был эстрада төркөмдәре актуаллеген юғалтты, сөнки халыҡ араһында Хәсән Усманов, Ғәзим Ильясов, Вилдан Яруллин, Радик Юлъяҡшин һәм башҡалар ҙур һорау менән файҙалана. Әгәр ҙә филармония артистарын шулай уҡ ирекле баҙарға сығарып ебәрһәң, улар ҙа үҙҙәренең ижадына нисек итеп халыҡты ылыҡтырыу тураһында уйланыр һәм ижад менән шөғөлләнә башлар ине. Бөгөн ни өсөн Татарстан артистары беҙгә сығыш яһарға килә? Сөнки Салауат Фәтхетдинов та, Хәниә Фәрхи лә, башҡалар ҙа бизнес берәмектәре. Әгәр ҙә улар йыл һайын килеп, фонограммаға йырлап, халыҡты алдап торһа, икенсе тапҡыр уларҙың тамашаһына берәү ҙә билет һатып алмаясаҡ. Шуға ла улар тырышып эшләй, яңы программалар төҙөй. Айҙар Ғәлимовты ҡарағыҙ, уға берәү ҙә эш хаҡы түләмәй һәм ул ижадын даими үҫтермәһә, уның концерттары кеше йыя алмай, тимәк, ул килемһеҙ ҡала. Бындай хәл килеп сыҡмаһын өсөн ул көнө-төнө яңы проекттар эшләй. Дәүләт ҡурсыуы аҫтындағы артистар социаль яҡтан яҡлаулы - уларҙың эш урыны бар, тик улар ана шуға алданып, комфорт зонаһынан сыға алмай, һөҙөмтәлә, үҫешмәй ҙә. Әлбиттә, улар юғары профессиональ йырсылар, туғыҙ йыл буйына уҡығандар, шуға ла был йырсылар башҡорт мәҙәниәтенең үҙәген тотоп торорға тейеш кеүек. Тик улар уҡыу йортонда профессиональ опера йырлау техникаһын өйрәнеп сығалар ҙа, халыҡ һәм эстрада йырҙары йырлай башлайҙар. Бындай йырсы тауышының тәбиғилеге лә, моңо ла юҡ, улар, бәлки, дөрөҫ йырлайҙарҙыр, әммә башҡарған йырҙары халыҡтың йөрәгенә үтеп инмәй. Артистың профессионаллеге, популярлығының иң ҙур күрһәткесе - ул һатылған билеттар һаны. Әгәр ҙә концертыңа халыҡ үҙе теләп килеп, үҙенең эшләгән аҡсаһына билет һатып ала икән - бына ул иң ҙур күрһәткес!

Беҙҙә, бына шул, теге йырсы талантлы, тик эсә шул, тиҙәр. Бөгөн уңышлы булам, тиһәң, 99 процент тырышлыҡ һәм хеҙмәт һөйөүсәнлек кәрәк, 1 процент талант менән генә әллә ни алға китеп булмай. Ирекле йөҙөүгә сығарып ебәрһәң, бәлки, аҙналар буйы эсеп йөрөгән ана шул талантлы йәш егеттәр ҙә эшләп китер ине.

**▸ Милли профессиональ сәнғәтебеҙ ниндәй генә кимәлдә юғары үҫешмәһен, бөгөнгө заман йәштәре филармония, театрҙарҙа түгел, төнгө клубтарҙа ял итеүҙе өҫтөнөрәк күрә. Ярамай, оҡшамай, тип кенә, берәү ҙә уларҙы дискотекаларға йөрөүҙән тыя алмаясаҡ, шуға ла бөгөн йәштәр өсөн тәғәйенләнгән башҡортса сараларҙы тағы ла күберәк эшләргә кәрәк булып сыға түгелме? "Шау-шоу интертеймент" промоутер үҙәге йәштәрҙе милли күңел асыу сараларына туплау йәһәтенән үҙ өлөшөн индерәме?**

**З. Ҡотлосурин:** Әлбиттә, башҡортса саралар ҙа үткәрәбеҙ. Урбанизация процесы бара, шуға ҡалала милли мөхит тыуҙырыу бигерәк мөһим. Дискотекаларҙы, йәштәр унда һыра эсә, тип яманлайҙар ул, тик башҡорт дискотекаһы булмаһа, ул һыраны йәш кеше башҡа дискотекала ла эсә ала. Икенсе яҡтан, эсмәүсе йәштәргә эйәреп, эсмәйенсә лә күңел асып була икәнлегенә инана барыусылар улар араһында хәҙер күпселекте тәшкил итәлер тип уйлайым.

Башҡорт йәштәре өсөн үткәрелгән сараларҙы ниндәйҙер темаға арнарға тырышабыҙ. Уның тематик идеяһы булырға тейеш. Мәҫәлән, Ғашиҡтар көнөн үткәрәбеҙ икән, ул ябай концерт ҡына түгел, уның башҡорт йәштәрен таныштырыу тигән маҡсаты ла була. "Беҙгә барыбер" командаһы кубогына шаяндар һәм тапҡырҙар клубы уйындары, "30 йыр", "Сәләм, студент!" һәм башҡа сараларҙың барыһының да идеяһы бар. Әйткәндәй, башҡорт клуб мәҙәниәте яйлап үҫешә башланы, элек дискотекаларға килгәндә кеше үҙенең ҡиәфәтенә иғтибар итмәй ине, хәҙер матур итеп кейенеп киләләр. Үҙ-ара башҡортса һөйләшәләр, башҡортса музыкаға бейейҙәр.

**Р.Бикмөхәмәтов:** Был саралар ғәҙәттә "Өфө уттары"нда үтә, унда мең ярымлап кеше йыйыла. Күңел асыу комплексы персоналы, меңдән ашыу кеше, әммә улар бер-береһен танып белә, тип аптырай. Тимәк, был саралар ысын мәғәнәһендә милли мөхит булдырып, унда башҡорт йәштәрен йыя ала.

**З. Ҡотлосурин:** Клуб сәнғәтенең популяр булыуына аптырарға кәрәкмәй, күпселек йәштәребеҙҙе гламур тормош үҙенә ылыҡтыра. Матур йәшәргә теләйҙәр, әммә бының өсөн нимәләр эшләргә теләмәйҙәр. Хәҙерге коммуникатив, ҙур тиҙлектәге хәрәкәттәр заманы, кисәге һатып алған әйберең бөгөн актуаллеген юғалта. Бөгөнгө көн ул кисәге көн, ә иртәге көн - бөгөнгө көн, иртәнән һуң ғына киләсәк башлана. Күптәр өсөн мәктәпте, институтты тамамлағас та уҡыу процесы туҡтала һәм ул ғүмер аҙағынаса деградация кисереп йәшәй. Йәштәрҙән, һуңғы тапҡыр ҡасан китап уҡының, тип һора, мәктәптә, тип яуап бирә ул. Тормош интенсив рәүештә алға бара, әлеге ваҡыттағы BMW X3 машинаһы менән идара итеү өсөн талап ителгән белем кимәле 1962 йылда космонавтарға өйрәтелгән белем кимәле менән тигеҙ. Бөгөнгө көндә һәр водитель - ул космонавт, сөнки улар функциональ яҡтан машина менән идара иткән саҡта 1962 йылда космонавт хәл иткән мәсьәләләрҙе хәл итә. Тимәк, кешенең мөмкинлектәренең сиге юҡ, бары тик саҡ ҡына тырышыраҡ булырға кәрәк, күп йәштәр шуны аңламай. Ошоларҙың барыһы ла ижадсыға ла ҡағыла.

Һуңғы йылдарҙа үҙеңде рухи яҡтан үҫтерергә өйрәтеүсе семинарҙар күп, шуларға йәштәр йөрөмәүенә аптырайым. Бик йөрөр ине лә, мин-минлеге ҡамасаулай. 90 процент ваҡытын йөҙөн, сәсен-башын матурлауға бүлһә лә, 10 процент ваҡытын ғына рухи үҫешкә, эске яҡтан үҙен матурлауға тотонһа - йәмғиәттә ыңғай ҡарашлы кешеләр күбәйер ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн музыкаль шоу-бизнес мәсьәләләрен көйләп ебәреүсе закондар юҡ; мәҙәниәт һаман да иң аҙ тәьмин ителгән өлкә булып ҡала бирә; ижадсыларҙың репертуары йылдар буйына үҙгәрмәй - ҡыҫҡаһы, проблемалар күп, әммә уларҙың барыһы ла башлыса мәҙәниәт менән сәнғәттең үҫешендә дәүләттең роле түбәнәйеүе менән бәйләләр, моғайын. Икенсе яҡтан ҡарағанда, хәҙер концерт донъяһы бөтөнләй икенсе нигеҙҙә ҡорола, яйлап барыһы ла иҡтисади бәйләнештәргә тороп ҡала, һәр башҡарыусы айырым, үҙ аллы субъектҡа әйләнә икән, шәхси үҫеш өсөн был да яҡшы күренеш. Шул саҡта, бәлки, беҙҙең үҙенсәлекле мәҙәниәт тураһында ситтә лә күберәк беләрҙәр. Бының өсөн бары тырышлыҡ һәм маҡсатҡа ынтылыу ғына кәрәк.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Был тән, йән һаҡсыһы булырҙай милли кейемдәр, бер яҡтан, сәләмәтлек өсөн яҡшы булһа, икенсе яҡтан, беҙҙе зауыҡлы күрһәтә һәм үҙ-үҙебеҙгә ышанысты арттыра. Әйҙәгеҙ, үҙебеҙсә кейенәйек!*



ӘЙҘӘГЕҘ...

**Элегерәк Ҡурған өлкәһендә бер күренешкә тап булып, Башҡортостандан барған вәкилдәр хайран ҡала. Ниндәйҙер бер ауыл мәктәбенә барып инһәләр, унда кластар әллә ни йыһазландырылмаған, хатта тәҙрәләрҙә ҡорғандар ҙа юҡ, ә бына балаларҙың да, уҡытыусыларҙың да өҫтәрендә - башҡорт милли костюмдары. Тәҙрәләрҙә ни өсөн ҡорғандар юҡлығын һорағас, улар былай тип яуап бирә: "Ҡорғанға тигән туҡыманан беҙ үҙебеҙгә милли кейемдәр тегеп алдыҡ, сөнки ҡорған беҙҙең милли рухты һаҡлай алмай". Ысынлап та, беҙ милли кейемдәребеҙҙең әһәмиәтен, баһаһын белеп еткерәбеҙме? Уларҙың тәү тәғәйенләнеше, төп асылы, фәлсәфәһе ниҙә? Уны кейеү тәртибе нисек башҡарылған? Ошолар хаҡында фольклорсылар, халҡыбыҙ ижады өлгөләре һаҡсылары - Сибай ҡалаһынан Асия ҒӘЙНУЛЛИНА һәм Учалы ҡалаһынан Ғәрифә КУДРЯВАЯ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМ КЕЙӘЙЕК ТӘ...

## яман күҙҙәрҙән һаҡлаулы булайыҡ!



**А.ҒӘЙНУЛЛИНА:** Борон һәр кейемдең үҙ тәғәйенләнеше булған. Әйтәйек, ҡатын-ҡыҙҙар 7-10 килограмдай торған һаҡалды, йә башҡа ауыр биҙәүестәрен тағып, бейә һаумағандыр, эш эшләмәгәндер, тим. Йылғала кейеҙ баҫалар икән, унда ла һаҡал, ҡашмау кейеп йөрөмәгәндәрҙер. Ә бына яуға сапҡан ваҡытта улар һаҡалды, һис шикһеҙ, кейгән, кейеҙ өҫтөнә тәңкә тегеп эшләнгән был кейем уны уҡ-һаҙаҡтан да, һыуыҡтан да һаҡлаған. Уларҙың һәр миҙгелгә, көндәлек тормошҡа ярашлы кейемдәре булған. Беҙҙең кейемдәр тән йылытҡысы ла, йән йылытҡысы ла булған. Йән һаҡсыһы, тигәндән, мин төрлө конференцияларҙа, симпозиумдарҙа эшлекле костюм өҫтөнән оҙон һаҡал йәки селтәр тағып алһам, үҙемде шундай ышанyслы тоям, күҙ тейеүҙәрҙән дә һаҡлаулы икәнемде беләм.

**Ғ.КУДРЯВАЯ:** Ырыуҙарға хас кейем стилдәрен фольклорыбыҙ һаҡлай. Фольклорҙан күренеүенсә, һәр бер ырыуҙың үҙенә хас костюмы булған һәм уның өлгөләре әлеге көнгә тиклем һаҡланған. Ҡурған яҡтарында йөрөгәндә һәр өйҙә ҡатай ырыуы башҡорттары кейгән милли кейемдәр эленеп тороуын күреп һоҡландыҡ. Ә беҙҙә үҙ ырыуының кейемен һаҡлаған йә хәтерендә тотҡан кешеләр бик һирәк.

Башҡорттоң кейем төрҙәре йәшкә, вазифаға ҡарап айырылған. Мәҫәлән, кендек инәһененең бүтәндәрҙән айырып торған үҙ кейеме булған. Бала имеҙгән ҡатындар өсөн дә махсус күлдәк тектерелгән. Намаҙ күлдәге лә үҙенә айырым тегелгән. Ҡатын-ҡыҙ күлдәк аҫтынан ыштан кейеп йөрөгән. Ҡунаҡ саҡырғанда, аш-һыу йүнәтеп йөрөгәндә ҡатын-ҡыҙҙар мотлаҡ алъяпҡыс быуған, уның эсенән келәт асҡысын йөрөтөр өсөн элмәк булған.

Ирҙәргә иһә һыбай йөрөгәндә уңайлы булһын өсөн салбарҙы "П" хәрефе рәүешендә теккәндәр. Еләнде тик ил ағалары булырҙай ир затына ғына япҡандар. Ә бөгөн яңы ғына ҡулына ҡурай тотҡан малайҙарҙы ла сәхнәгә елән ябып сығаралар. Был дөрөҫ түгел. Унан һуң, еләнде ир-егет ат менгәндә түгел, ҡор башында ултырғанда иңенә һалған. Ә ат өҫтөндә ултырғанда улар сәкмән кейгән.

Кейемдәргә бәйле ырым-йолалар ҙа булған. Мәҫәлән, бала тыуғас та, тарылай тәгәрәп үҫһен, тип, һыуға ете тары һалып ҡойондорғандар ҙа, аҙаҡ уға "эт күлдәге" кейҙергәндәр. Был күлдәк ҡораманан ике яҡтан һырып тегелгән. Яңы тыуған баланың күҙҙәре ике аҙна буйы баш-түбән күрә, сөнки уның күҙ алмаһы урынына ултырмаған була. Хәҙер бының өсөн төрлө уйынсыҡтар, алымдар бар. Ә башҡорттар ҡораманан күлдәк, йүргәк тегеп, баланың күҙ алмаһына үҙәгенә ултырырға ярҙам иткән. Бала шул ҡораманан тегелгән йүргәктән ниндәйҙер төҫтө эҙләгән, шуға ла ул төҫтәрҙе айырырға өйрәнгән. Өс көн кейгәс, был күлдәкте ете эттең исемен әйтеп саҡыралар ҙа, берәһененең ауыҙына ҡаптырып ебәрәләр. Бала эт кеүек әрһеҙ, ныҡ булып үҫһен өсөн шулай эшләйҙәр. Атаһына яҡынайһын, эҫенһен өсөн баланы атаһының кейеме менән һөртөндөрәләр.

**➔ Башҡорт милли кейемдәрендәге төҫтәр балҡышы ҡайҙан килә? Ул ниндәйҙер мәғәнәгә эйәме?**

**Ғ.КУДРЯВАЯ:** Милли костюмдарҙа һәр халыҡтың йәшәгән еренә бәйле төҫтәр сағылыш тапҡан. Диңгеҙ буйында йәшәгән халыҡтарҙың кейемдәрендә аҡ, күк төҫтәр өҫтөнлөк итһә, беҙҙең Урал ерҙәре бөтә төҫтәргә лә бай. Шуға ла, ғәҙәттә, еләндә тәбиғәттәге бөтә төҫтәр ҙә сағылыш таба. Төҫтәр балҡышын да, уны табыу ысулын да тәбиғәттең үҙенән алғандар, өйрәнгәндәр ата-бабалар. Ҡайын япрағынан - йәшел, еректән - ерән, һуған ҡабығын ҡайнатып, алтынһыу төҫ алғандар. Халҡыбыҙ биҙәүес әйберҙәренә лә ҙур иғтибар бүлгән. Мәрйенде Ҡыҙыл диңгеҙ буйынан, ҡортбашты Һиндостандан килтергәндәр.

**А.ҒӘЙНУЛЛИНА:** Элек өләсәйҙәр үҙебеҙҙең буяҡтар һәм туҡымалар менән генә эш итмәгән. Карауан юлында ултырғас, беҙҙең халыҡҡа сауҙәгәрлек тә, ситтән килгән сауҙәгәрҙәр менән алыш-биреш итеү ҙә ят булмаған. Түшкә таға торған һаҡал-селтәрҙәрҙә Италия, Германия, Франция, Ҡытай аҡсалары һәм биҙәүестәре йыш осрай, тимәк, шул илдәр менән дә бәйләнеш булған. Ул илдәр шулай уҡ сағыу туҡымалар ҙа алып килгән беҙҙең яҡтарға. Бер елән тектерер өсөн генә әллә күпме мал һатып, бер нисә йыл буйы аҡса йыйғандар. Сөнки елән ситса, сатиндан йәки үҙебеҙҙә етештерелгән киндерҙән тегелмәгән. Бер көтөүлек мал биреп тегелгән еләндәр ҙә булған. Ундай еләндең төҫө лә бай, алтын, көмөш биҙәүестәре, төрлө затлы таштары ла күп булған.

Беҙҙең халыҡ һары, ҡыҙыл, йәшел төҫтө яратҡан. Һары төҫ байлыҡты аңлатҡан һәм быңдай төҫтәге күлдәкте байҙар ғына кейгән. Ҡыҙыл төҫ байрам ваҡыттарында ҡулланылған. Беҙ мәрйенде тик ҡатын-ҡыҙҙар кейемендә генә булған, тип фаразлайбыҙ. Белеүебеҙсә, ҡыҙыл мәрйен ирҙәрҙең ғәйрәт көсөн һаҡлаусы тип иҫәпләнгән һәм уларҙың кейемендә биҙәүес булараҡ урын алған.

**➔ Беҙҙең милли кейемдең бүтән милләттән айырып торған төп фәлсәфәһе?**

**А.ҒӘЙНУЛЛИНА:** Кейем аша донъяға үҙ ҡарашын белдергән башҡорт. Беҙҙең милли атрибутикалар араһында ай, ҡояш символдары бар. Ир-атҡа ай нуры хас, ул нур эсендә ҡот бар, тип иҫәпләнгән. Ҡатын-ҡыҙға ҡояш нуры хас, был нурҙың йәшәүгә көс биргән ҡеүәте бар. Бына шуны кейемдәрҙә сағылдырғандар. Унан һуң, кейемдәргә кешене һаҡлау өсөн төрлө мөһөрҙәр баҫылған: суҡлы мөһөр, һигеҙ ожмах асҡысы, ҡортбаш мөһөрө. Әйткәндәй, беҙҙең башҡорт кейеме өлгөләре бөгөн яҡлауға һәм һаҡлауға мохтаж, сөнки уның элементтарын сит милләт халыҡтары сәлдерә икәне һәр кемгә мәғлүм.

**Ғ.КУДРЯВАЯ:** Ҡатын-ҡыҙҙың бар байлығы кейемендә тупланған булған. Ирен яуға оҙатҡанда, уҡ ҡаҡлығып ситкә осһон, тип, ҡатыны түшендәге һаҡалдан көмөш тәңкә йолҡоп алып биргән. Һыуға барһа, һыу инәһенә рәхмәт йөҙөнән көмөш тәңкә ырғытҡан. Бала тыуһа, ҡаштары ҡыйғас булһын, тип, көмөш тәңкә менән ипләгән. Өләсәйҙәрҙән ҡалған бөтә ошо байлыҡты беҙ һаҡлай алмағанбыҙ. Беҙҙең яҡтарҙа, мәҫәлән, өләсәйҙәрҙең көмөш тәңкәле һаҡалдары, селтәрҙәре, еләндәрен һуғыш ваҡытында Силәбе танк заводына арба-арба тейәп алып барғандар. Һәр бер һаҡал хаҡы бер танк хаҡына торошло булған, тиҙәр.

Башҡорттоң барлыҡ кейемдәре лә сәләмәтлек өсөн тәғәйенләп тегелгән. Сит ил кейемдәре беҙҙең организм өсөн ҡулай түгел. Беҙгә киләсәк быуынды сәләмәт итеп тәрбиәләү өсөн үҙебеҙҙең милли кейемдәрҙе тергеҙеү тураһында хәстәрләргә кәрәк. Әйҙә, ул заманға ярашлы итеп үҙгәртеп тегелһен, әммә уның элементтары беҙҙең көндәлек кейемдәребеҙҙә сағылһын. Беҙ милли кейемдәрҙең ни тиклем ҡөҙрәт-ҡеүәткә эйә булыуын, әһәмиәтен белеп бөтөрмәйбеҙ. Мин, мәҫәлән, республиканан ситкә сыҡҡанда өҫтөмдә милли костюм булһа, үҙемдә ышаныс, көс-ғәйрәт тоям...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шуныһы ғәжәп: ни өсөндөр беҙ ете диңгеҙ аръяғынан килтерелгән әләм-һәләмде кейергә оялмайбыҙ, ә бына милли кейем кейеп урамға сығырға тартынабыҙ. Беҙ үҙ булмышыбыҙға хас кейемдәр кейгәндә, биҙәүестәр таҡҡанда ғына рухи асылыбыҙға ныҒыраҡ яҡыная алабыҙҙыр. Унан һуң, апайҙар әйтеп үткәнсә, был тән, йән һаҡсыһы булырҙай милли кейемдәр, бер яҡтан, сәләмәтлек өсөн яҡшы булһа (ундағы биҙәктәр һәм биҙәүестәр яман күҙҙәрҙе яҙлыҡтыра, нәфрәтте ситкә алып китә, тип ышанған боронғолар), икенсе яҡтан, беҙҙе зауыҡлы күрһәтә һәм үҙ-үҙебеҙгә ышанысты арттыра. Әйҙәгеҙ, үҙебеҙсә кейенәйек!**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## КЕШЕ ТӘРТИБЕНӘ ҠАРАП...

## үҙеңдекен төҙәт

● Аяғөҫтө йоҡлап йөрөмә, ат ҡына баҫҡан килеш юшай.

● Белем алып, ғалим булыуҙан алда яҡшы кеше булыуың һәйбәтерәк.

● Кеше тәртибенә ҡарап, үҙеңдекен төҙәт.

● Һүҙ йөҙгә, дөйә ҡойроғо ергә етә яҙҙы, тигәндәй, файҙаһыҙ әңгәмәгә ваҡыт әрәм итмә.

● Ҡоймағына күрә - майын, ҡунағына ҡарап һыйын тап.

● Ҡуян - тауҙа, эт - бауҙа тигәндәй, ғәмһеҙ йәшәмә - бөлөрһөң, йәлсемәҫһең.

● Ҡәҙерләгәндең ҡәҙерен бел, хурлағандың кәрәген бир.

● Гел аҡыл биреүселәргә табынма: үҙ хыял-маҡсаттарыңды оноторһоң.

● Ер өҫтөн тимер ҡаплаһа - ҡазаға, ялған баҫһа - язаға.

● Ҡан ҡайнатырлыҡ асыуың килһә - йоҙроғоң кеҫәңә тыҡ, ут сәсерлек һүҙең булһа - шырпы ҡап.

● Көймә, янма: бала көтһәң- маҙаһы, мал көтһәң - ҡаҙаһы сығып тора.

● Һанда һаяҡ ҡулда таяҡ, тип һелтәнмә: таяғың үҙ башыңа ҡаҡлығыр.

● Тәүге уңышһыҙлыҡтан ҡурҡма - алдағы эшеңдә ваҡ уңайһыҙлыҡ тыуҙырыр, тәүәккәл бул.

● Күп йөрөүҙән тау биләне шымарыр, аҡыллыны тыңлаһаң, тәжрибәң артыр.

● Бүҫкә сәйнүк ҡайнағанда быҒырҙай, ҡурҡаҡтар йыйындан һуң мығырҙай.

● Илен һанламаған ир ҡанлы күҙ йәшен түгер.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЗАУЫҠ

# КЕМ БӘХЕТЛЕ ӨЙӨНДӘ -

## Шул бәхетле илендә

Әсхәл ӘХМӘТ-ХУЖА

### Парсалар

Яуыз менән көрәшергә
Етмәһә көсөң,
Исмаһам, изгелек эшлә
Көсһөҙҙәр өсөн.
* * *
Һәр бер һаҡаллы
Булмай аҡыллы.
* * *
Әсәһенә ҡул күтәргән улың
Кемгә генә күтәрмәҫ һуң ҡулын?
* * *
Тәҙрәләрҙе, пәрҙәләрҙе
Сыуаҡ көнгә асып ҡуйһаң -
Өйөңә бөркөлөп ҡояш инер.
Тәҙрәләрҙе, пәрҙәләрҙе
Сыуаҡ көнгә ябып ҡуйһаң -
Өйөңә борсолоп врач инер.
* * *
Төнгә төҫтәр пәрҙә ҡорһа,
Ҡояш офоҡҡа юл ала.
Һөмһөҙ хистәр пәйҙә булһа,
Оят тойғоһо юғала.
* * *
Йөрәгеңде биреүеңдең
Юҡтыр һис бер кәрәге -
Әгәр ҙә йәрең бирмәһә,
Алмашҡа үҙ йөрәген.
* * *
Мондарына әсир итеп
Әҙ генә йәшәй былбыл.
Йөҙ йәшлек юбилей туйлай
Ҡарҡылдаҡ ҡарға быйыл.
* * *
Ыласын-ҡошто ҡыуып тотоп булмай,
Ыласын-ҡошто атып ҡына була.
Ысын дуҫты һатып алып булмай,
Ысын дуҫты һатып ҡына була.
* * *
Хәлеңдән килмәһә сереңде
Йәшерер өсөн.
Сереңде һаҡларға минең
Етмәҫ шул көсөм.
* * *
Кем һиңә яралар һала,
Яуызлыҡ ылып,
Үҙ йөрәген дә яралай,
Яуызлыҡ ҡылып.
* * *
Һиңә килеп бүтәндәрҙе
бысраҡ ябып хурлаған -
Һине инде бүтәндәргә
бара һалып ҙурламаҫ.
* * *
Хеҙмәт һөймәгән матур ир -
Ҡатын-ҡыҙ башына төшкән
Дауалап булмай торған сир.
* * *
Үҙ башҡортом бахыр, тиеп, һыҡтап,
Башҡа милләттәрҙе ҙурлама!
Үҙ ҡатыным алтын, тиеп, маҡтап,
Ғәзиз әсәйеңде хурлама!
* * *
Кем бәхетле өйөндә -
Шул бәхетле илендә.
* * *
Тамағыңды тый, исмаһам, әҙәп өсөн:
Һинең ҡорһаҡ кәбер түгел
Тауыҡ, өйрәк, күркә йә ҡаҙ,
Һарыҡ йәки кәзә өсөн.
* * *
Тарихта бер ҙә миҫал юҡ:
Ишәктән тыумай ишан.
Тарихта гәрсә миҫал күп:
Ишандан ишәк тыуа шул...
Әйткән һүҙемә ышан!
* * *
Түбән йәнгә күрһәт ихтирам -
Тиҙүк яһар һинән ыстырам.
* * *
Аҡыл тауың тәпәш булһа,
Белем гөләң булһа һирәк,
Өңдәшмәй шым ултырыуың -
Хәйерлерәк.
* * *
Ах, был алйорош замана
Сыҡты лаһа саманан:
Күпме сволочь-һөйрәтке
Күтәрелде бит үргә...
Ә ырым-йола буйынса:
Һис ҡасан да һепертке
Менмәҫкә тейеш үргә!
* * *
Ситтәр гонаһы китабын
Өтөр-нөктәһенә тиклем
Беләһең яттан.
Үҙ гонаһың томдарының
Уҡымағанһың, исмаһам,
Бер юлын хатта.
* * *
Асыуына түҙмәй әгәр
Тотоп әрләһә берәү,-
Тыңла, бәлки, шул әр һиңә,
Яңылышһаң, булыр терәү.
* * *
Бүкһәһенә ни оҡшаһа -
Шуны ейә ҡатын-ҡыҙ.
Бүтәндәргә ни оҡшаһа -
Шуны кейә ҡатын-ҡыҙ.
* * *
Әгәр ҙә мин яҡламаһам
Үҙ өйөмдө, үҙ илемде,-
Уларҙы һаҡлайбыҙ тиеп
Дошман килмәҫ бит инде.
* * *
Әгәр ҡанат бирһә Хоҙай -
Барса ҡоштарҙы ла сыҫҡан
Өҙәр ҙә бөтәр ине,
Өҙәр ҙә бөтәр ине.

Әгәр мөгөҙ бирһә Хоҙай-
Хатта аттарҙы ла сусҡа
Һөҙәр ҙә төкөр ине,
Һөҙәр ҙә төкөр ине.
* * *
Һине артыҡ өркөтмәһен
Дошмандарҙың уҡмашыуы,
Дошмандарҙың ныҡлығы.
Ул уҡмашыу йыландарҙың
Бер-берен ашар алдынан
Ваҡытлыса дуҫлығы.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ТӘҮҘӘ - ИМАН,

## аҙаҡ - шағирлыҡ...



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Лира ЯҠШЫБАЕВА, яҙыусы, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:** Оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан яҙыусы булараҡ, минең әҙәбиәт, ижад, шағирҙар, яҙыусылар тураһында әйтә торған үҙ фекерҙәрем бар.

Минеңсә, кеше үҙенең әйткән һүҙен эштәре менән, йәшәйеше менән раҫларға тейеш. Матур һүҙҙәр һөйләп, насар эштәр эшләп йөрөүҙән дә ҙурыраҡ зыян юҡ халыҡ өсөн. Бигерәк тә йәштәр ишетһен ине был һүҙҙәрҙе. Мин күп кенә яҙыусыларҙы, шул иҫәптән оло быуынды ла, йәшерәк быуынды ла беләм. Бер ваҡыт яҙыусылар тормошондағы күп кенә хәлдәрҙе күргәндән һуң, "Балыҡ башынан серей" тигән мәҡәлә яҙырға булдым. Был мәҡәләне яҙып һалып ҡуйҙым. Ни өсөн "Балыҡ башынан серей" тигән мәҡәл беҙең яҙыусыларға тап килә һуң? Сөнки беҙҙең яҙыусы егеттәр араһында ла иманы, әҙәбе, тәүфиғы түбән булғандарҙы, эскелек, аҙғынлыҡ менән мауыҡҡандарҙы күҙәтергә тура килде тормошта. Яҙыусы матур һүҙҙәр һөйләп, насар эштәр эшләп йөрөргә тейеш түгел, минеңсә. Әйткән һүҙенә ул үҙе үк тоғро ҡалырға тейеш. Әйткән һүҙенә тоғро ҡалмаған кешене диндә монафиҡ тип әйтәләр. Ислам буйынса монафиҡ гүмер буйы тамуҡ ғазаптары кисерә. Шуның өсөн халыҡ та монафиҡтарҙы яратмай. Әгәр шағир халыҡтың йөрәгенә үтеп инерҙәй һүҙ әйтә икән, был һүҙ уның үҙенең холҡона, булмышына һәм асылына тап килергә тейеш.

"Есенин да эскән" тигән һылтау менән күптәр үҙҙәрен аҡлап маташа. Иман - иң беренсе урында булһын, унан һуң ғына шәхес, унан һуң ғына шағирлыҡ килергә тейеш. Ә был юҫыҡта минең фекерем шул: әҙип - "әҙәпле" тигән һүҙҙән алынған. Ысын мәғәнәһендәге әҙәпле әҙиптәр менән беҙҙең әҙәбиәтебеҙ ҙә күтәрелә, милләтебеҙ ҙә алға китәсәк.

Оло кешеләргә быны әйтеп тороуҙың файҙаһы юҡ, шуға ла нәсихәт һүҙҙәремде, теләктәремде йәштәргә адреслайым. Бөгөнгө көндә ҡәләм тибрәткән йәштәр оло ағинәйҙәре әйткән һүҙҙе тотһон ине.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-АТ



# БЕР САЛҒЫНЫ КИҪЕП...

## ҡумыҙ эшләргә өйрәндем

**Йүгергән кешегә йүрмә лә эләгә, тигән кеүек, нимә ҡулыңдан килә, нимәгә дәртең бар, шуны тырышып эшләргә кәрәк. Төп һөнәрем буйынса умартасымын. Стәрлетамаҡта өс йыл бал ҡорто үрсетеү серҙәрен үҙләштерҙем. Ун йыл колхозда умарталыҡ хужалығында эшләнем. Бер үҙемә йөҙҙән ашыу умартаны ҡарарға тура килде. Хәҙер инде ике тиҫтәгә яҡын умарта тотам.**

Умартасы буларaҡ, ҡорт менән һәр кешене дауалай алам, үҙем дә дауаланам. Үлгән ҡорттарҙы мин ташламайым. Уларҙы шулай файҙаланырға кәңәш итер инем: ҡорттарҙы һыуҙа быҡтыраһың, ошо һыуҙы резина итекккә ҡояһың һәм шунда аяҡтарҙы тығып ултыраһың. Быуындар һыҙлауҙан арҙам итә. Ҡорттан сағылһаң иһә, тағы ла файҙалыраҡ. Ҡортто пинцет менән тотоп алаһың да һыҙлаған урынды сағтыраһың. Күптәр түҙмәй, әммә түҙергә кәрәк. Ә умарта эргәһендә эшләгәндә пинцет кәрәкмәй, үҙҙәре һырып ала. Ҡайһы саҡта 15-20 ҡорт сағып ташлай. Түҙәһең.

Яратҡан шөғөлдәремдең береһе - ҡумыҙ яһау. Был һөнәрем хужалыҡ эштәренән, ҡорттар ҡарауҙан бушаған мәлгә тура килә. Ғәҙәттә, йәйгеһен баҡсала бал етештерәм, ҡышҡы кистәрҙә оҫтаханала ҡумыҙ яһайым. Ҡумыҙ эшләү заказдарға ла бәйле. Халыҡ йышыраҡ мөрәжәғәт иткән һайын, уйын ҡоралдары күберәк эшләнә. Ҡумыҙҙы нисек эшләйһең, тигән һорау биргәндәре бар. Өйрәнергә теләгән кешегә мин дөйөм ысулдарҙы ғына әйтеп бирә алам. Сөнки һәр оҫтаның күҙ ҡараһылай һаҡлаған сере була. Артабан һәр кем күңел талабы, фантазияһына ҡарап, үҙ йүнәлешен, үҙ технологияһын таба. Ниҙер эшләйһең икән, ул башҡаларҙыҡына оҡшамаһын, һинеке генә булһын. Мин эшләгән уйын ҡоралдарына уйнап ҡараусылар әйтеүенсә, ҡумыҙҙарым моңло яңғырашы менән айырылып тора. Күп кенә фольклор коллективтары минең уйын ҡоралдарымда сығыш яһай. Быйыл Мәсетле районында үткән ҡумыҙсылар фестивалендә минең ҡумыҙҙарҙа уйнаған коллективтың гран-при алыуы ла минең өсөн ғорурлыҡ. Ошондай уңыштар, һөйөнөстәр һәр оҫтаны дәртләндереп ебәрә.

Мин иң киң таралған ҡумыҙ төрө - тимер ҡумыҙ эшләйем. Ағас ҡумыҙға ла тотонорға була, ләкин уға әлегә һорау юҡ. Күптәр минең ҡумыҙға ҡарап, быны мин дә эшләй алам, тигәне бар. Ләкин уларҙың береһенең дә аҙаҡтан ҡумыҙ яһағанын күргәнем булманы. Сөнки был һөнәр тәү ҡарашҡа ғына еңел һымаҡ. Ҡумыҙ эшләү өсөн тәжрибә менән ныҡытылған оҫталыҡ кәрәк. Мин инде быны менән 30 йыл тирәһе шөғөлләнәм. Үҙ аллы өйрәндем. Ә өйрәнеү ғилләһе былай булды. Өләсәйем йәш сағын хәтергә төшөргәндә, ирендәренә ике бармағын ҡуйып, нисек ҡумыҙҙа уйнағанын күрһәтә торғайны. Һуңғараҡ радио киң таралып китте, пластинкалар сыға башланы. Ҡумыҙ тауышын тәүге тапҡыр ошо пластинкалар аша ишеттем. Бер заман ауылға Салауат ҡалаһынан "Шәүрәкәй" пьесаһы менән артистар килеп төштө. Яҡуп Шәрипов тигән актер, ҡыҙыҡһыныуымды һиҙгәндер инде, яныма килде лә "Ҡумыҙ кәрәкме?" ти. "Кәрәк, тик мин уйнай белмәйем. Өйрәтеп китегеҙ әле", тим. "Берәй инструментта уйнайһыңмы?" "Гармунда уйнайым", мин әйтәм. "Улай булғас, тиҙ өйрәнерһең", тине лә сиртеп күрһәтте. Бер ун минут эсендә отоп алып, ҡумыҙҙа уйнарға өйрәндем. Өйгә алып ҡайтып, балаларға көй сығарып күрһәттем. Бер ваҡыт улар ҡумыҙҙы уйынсыҡ урынына йөрөтөп, телен һындырып сығарҙы. Ни эшләмәк кәрәк, йүнәтергә тотондом. Тик бының өсөн бер салғыны тотонорға тура килде. Салғыны ҡырҡып, ҡумыҙ теле яһап ҡуйҙым. Былай булғас, ҡумыҙҙың үҙен дә эшләргә мөмкин, тигән уй тыуҙы. Йәйләп шулай был һөнәргә тотоноп киттем. Ул ваҡытта ҡумыҙҙар бик һирәк осрай ине. Шуға күрә миңә мөрәжәғәт итеүселәр тиҙ табылды. Эшләй-эшләй оҫтара, нескәлектәренә төшөнә барҙым. Кеше үҙ хатаһында өйрәнә бит инде.

Ололар әйтмешләй, һөнәрле кеше был донъяла һүнмәй. Мин үләндәр менән дә бик ҡыҙыҡһынам. Йәйгеһен төрлө дауалы үләндәр йыям, киптерәм. Ҡыш буйы шул үләндәрҙән файҙа күрәбеҙ. Һөнәрле булып йәшәргә кәрәк, ә күп һөнәр белһәң, тағы ла яҡшыраҡ.

**Фуат ҠУЖӘХМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы Яныбай ауылы.**

***✓ 1770 йылда ғалим И.И. Лепехин мәмерйәлә була һәм ентекле өйрәнелгән тағы бер зал тураһында мәғлүмәт ҡалдыра. Әммә бөгөнгә көндә ул залды... таба алмайҙар.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ГЕНИЙ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?

## Гений кеүек туҡлан!

**Генийлыҡ йомағы өҫтөндә бөтә быуын ғалимдары ла баш вата. Берәүҙәр барлыҡ "сәбәпте" гендар үҙенсәлегендә һәм мейе төҙөлөшөндә күрһә, икенселәр бындай һәлә тте ниндәй ҙә булһа һирәк ауырыуға япһара. Өсөнселәр иһә генийҙар бары тик ҡыш көнө генә тыуа, тип иҫбат итә. Ләкин был гипотезаларҙың береһен дә дөрөҫлөккә тап килә, тип иҫбат итеп булмай.**

Тикшеренеүселәр бөйөк кешеләрҙең нисек туҡланыуын тикшергән һәм шундай һығымтаға килгән: уларҙың барыһы ла гурман булған һәм ашҡаҙандары тулы булғанда ғына ижад иткән. Шуға күрә "Ижадсы ас булырға тейеш", тигән хәҡиҡәт ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип әйтергә була. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, дөрөҫ булмаған туҡланыу иң тәүҙә мейегә тәьҫир итә һәм ҡайһы бер билдәле матдәләрҙең етмәүе мейе эшмәкәрлеге үҙгәрештәренә килтерергә мөмкин. Ниндәй ҙә булһа матдәнең етешмәүе тиҙ арыуға, ә был үҙ сиратында хәтерҙең насар булыуына килтерә. Шул уҡ ваҡытта белгестәр тәмле һәм файҙалы ашамлыҡтар ашау аҡылдың үҫеүенә килтерә, тип тә билдәләй. Һынамыш һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәре интеллектуаль һәләттәрҙе бер-нисә тапҡырға күтәрергә һәләтле икән.

Кешенең ҡулына ҡәләм алыр йәки сәхнәгә сығыр алдынан тәмле итеп ашау теләгән белгестәр түбәндәгесә аңлата: баш эше менән шөғөлләнгән кешеләргә мейе эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләндерерлек аҙыҡ-түлек ашау мөһим. Ундай аҙыҡ-түлектәр рәтенә, беренсе сиратта, мүк еләге, ҡара көртмәле, финик, йөҙөм, кәбеҫтә, сөгөлдөр, шпинат, кишер инә. Шулай уҡ балыҡ, тауыҡ ите ашау һәм һөт, сәй, кофе эсеү ҙә файҙалы. Бар донъяға билдәле кешеләрҙең аҙыҡ-түлек рационына нәҡ ошо ашамлыҡтар ингән икән. Мәҫәлән, Леонардо да Винчи составында кишер, сельдерей, бәрәңге, цуккини, кәбеҫтә, помидор, пармезан сыры булған ашты яратып ашаған. Федор Достоевский иһә сәтләүек ярырға яратҡан. Шулай уҡ ул йыш ҡына тауыҡ ите ашаған һәм йылы һөт эскән. Кәйефе күтәренке ваҡытта яҙыусы сыр, әфлисун, лимон, ыуылдырыҡ һәм француз гәрсисе, ә күнеле төшкәндә һурпа эскән. Тағы ла ул сәй һәм шарап яратҡан. Ит ашамаған Лев Толстой төшкө ашҡа, гәҙәттә, һыуыҡ сөгөлдәр ашы һәм итһеҙ щи, ә кискелеккә макарон, йәшелсә-емеш ашаған. Баллы икмәкте һолонан эшләнгән кеҫәл менән ашарға яратҡан. Ләкин яҙыусының иң яратҡан аҙығы - ул ҡыяр булған. Бөйөк шағир Александр Пушкин да тәмле итеп ашарға яратҡан. Уның яратҡан аш-һыуҙары иҫәбендә быҡтырылған бәрәңге, ебетелгән алма һәм шпинат, ҡуҙғалаҡ һәм йәш кесерткән япрактарынан, йомортҡа, шпинаттан эшләнгән котлеттан торған щи булған. Шулай уҡ ул аҡ крыжовник ҡайнатмаһын да үҙ иткән.

ТӘБИҒӘТЕБЕҘ ҠАҘНАҺЫ

# ЕТЕ МӨҒЖИЗӘБЕҘҘЕҢ БЕРЕҺЕ...

## үҙ серҙәрен асып бөтмәгән әле

**Бөтә донъяға билдәле Шүлгән мәмерйәһе Бөрйән районында "Шүлгән-Таш" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы биләмәһендә урынлашҡан. Мәмерйәлә һүрәттәр табылыуына ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтеп тә киткән. Әммә Шүлгән үҙ серҙәрен асырға ашыҡмай әле.**

Һүрәттәр барыһы ла ҡыҙыл охра менән 13-15 мең йыл элек төшөрөлгән. Тәү осорҙа бер-нисә генә һүрәт табылған булһа, бөгөнгә көндә уларҙың һаны 200-гә яҡынлай. Улар араһында мамонт, ат, бизон, мөгөҙморон (носорог), ҡоралай кеүек хайуандар һүрәттәре һәм трапецияға, баҫҡысҡа, өсмөйөштәргә оҡшаш геометрик фигуралар бар. Был абстракт билдәләрҙең үҙ тәғәйенләнеше һәм мәғәнәһе барлығы аңлашыла, әммә уны бөгөн аңлаған кеше юҡ. Ошо палеолит осорона ҡараған һүрәтле мәмерйәләр Көнбайыш Европала ла бар барлыҡҡа, әммә был мәмерйәләрҙә ошо геометрик фигуралар юҡ.

Мәмерйәлә һүрәттәр күп, шуға күрә уның беренсе ҡатында урынлашҡандарына ғына байҡау яһайыҡ әле.

Шүлгән мәмерйәһе өс ҡаттан тора. Урындағы халыҡ мәмерйәне Таш-Өй тип тә йөрөтә. Ул Ағиҙел йылғаһынан 200 метр тирәһе ситтә урынлашҡан. Мәмерйәнең ауыҙы Портал тип атала. Уның бейеклеге 21 метр, ә киңлеге 35 метр самаһы. Порталда 2 күл урынлашҡан. Ҡояш үҙенең тәүге нурҙарын һипкән саҡта күгереп ятҡан күлдең исеме лә есеменә тура килеп тора - Зәңгәр күл. Зәңгәр күлдән секундына 500 литр һыу урғыла. Уның тәрәнлеге 78 метрға тиклем өйрәнелгән. Түңәрәк күл күпкә бәләкәйерәк - уның киңлеге яҡынса 6 метр самаһы. Порталдан һуң Төп галерея башланып китә. Уның оҙонлоғо 87 метр, уртаса киңлеге 20 метр, бейеклеге 7 метр.

Төп галереянан һуң мәмерйәнең залдары башлана. Иң беренсе зал - Сталагмит залы. Залға бындай исем бушҡа бирелмәгән - уның уртаһында ярты метр бейеклегендәге сталагмит урынлашҡан. Был залда һауа йылы, хатта ҡыш көнө лә һыу туңмай. Бында әлегә һүрәттәр табылмаған. Улар киләһе залдан башлап осрай башлай. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - залдарҙың башланған һәм бөткән урындары күп осраҡта асыҡ билдәлә. Әле лә быйа бейеклеге 15 метр самаһы булған Сталагмит залынан киләһе залға үтеү өсөн тәбиғәт эйелеп үтерлек кенә урын (лаз Горло) ҡалдырған. Эйелгән килеш уның аша беҙ киләһе залға сығабыҙ.

Был залдың исеме бигерәк матур - Көмбәҙ зал (зал Купольный). Исеме есеменә тура килеп тора - түңәрәк һәм бейек. Бында һүрәттәр бар, әммә улар насар һаҡланған. Сәбәбе - заманында туристар күп йөрөгән бында. Һүрәттәр менән танышайыҡ әле. Беренсе һүрәт - мамонт. Насар һаҡланған, мамонтты бары тик компьютер ярҙамында ғына танып була. Икенсе һүрәт - ҡоралай, ул мамонттан өҫтәрәк урынлашҡан. Күпкә насар һаҡланған. Уны ла компьютер ярҙамында ғына танып була. Һүрәттең бер өлөшө таш менән ҡуша кеше (әлбиттә, хәҙерге кеше) тарафынан аҡтарып алынған. Киләһе һүрәттәге хайуанды бик ауырлыҡ менән мамонт тип атап була, таныуы ауыр, сөнки уның өҫтөнә "Смирнов" тип яҙылған. Дүртенсе һүрәттәге болан менән дә шул уҡ хәл - был юлы уның өҫтөнә "Беседин" яҙып киткән. Бишенсе һүрәттең хәле бигерәк аяныслы - мамонттың яртыһы таш менән ҡуша аҡтарып алынған, һаҡланып ҡалған өлөшөнә "Кумертау" тип яҙып ҡуйғандар. Алтынсы һүрәт сағыштырмаса һәйбәт һаҡланған, әммә хайуанын танып булмай. Кеҫәрткегә оҡшап ҡуя былай. Уның эргәһендә геометрик фигура - трапеция урынлашҡан, быныһының мәғәнәһен аңлап булмай. Һигеҙенсе һүрәт - ҡыр кәзәһе. Ул һикерергә әҙерләнеп тора. Башҡаларҙан айырмалы рәүештә ҡыр кәзәһе кеше ҡуҙенә бигүк салынып бармаған урында эшләнгән, шуға күрә был һүрәт һәйбәт һаҡланған. Тағы геометрик фигура осрай - был юлы өсмөйөш. Унынсы һүрәт бик насар һаҡланған - уны бик ауырлыҡ менән мөгөҙморон (носорог) тип атап була. Бәхәс тыуҙырған һүрәт тә бар был залда - был рәшәткә ("решетка") һүрәте. Был һүрәт бик бәхәсле, сөнки бында һүрәт өҫтөнә һүрәт төшөрөлгән, буғай. Шуға күрә уны аңлап булмай. Етмәһә, уның эргәһендә "К", "Т" хәрефтәренә оҡшаш билдәләр һәм өсмөйөш һүрәте бар. Нишләп һүрәт өҫтөнә һүрәт төшөргәндер инде боронғо рәссам, эргәһенә ниндәй тамғалар ҡуйғандыр инде - аңлатыуы ла, аңлауы ла ҡыйын.

Юлыбыҙ киләһе залда дауам итә. Унда үтер өсөн эре таш өйөмдәрендәге тар ғына "ишек"тән ашатлап үтәбеҙ. Эре таштар емерелеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгәнме, әллә уларҙы кешеләр үҙҙәре ташып һалғанмы - билдәһеҙ. Залдың исеме - Билдәләр залы (зал Знаков). Исем бушҡа бирелмәгән - хайуан һүрәттәре лә күп бында, трапециялар, баҫҡыстар, өсмөйөштәр ҙә күп осрай. Киләһе зал - Хаос залы. Әгәр ҙә тәү осраҡта таш өйөмө "ишек" ҡалдырһа, был юлы ике зал сигендә тау һымаҡ ҙур таш өйөмө ята. Таштар бигерәк ҙур, кеше көсө етерлек түгел - бәғзеләре 100 тоннанан ашып китә. Шикләнергә урын ҡалмай - был таштар түбәнән емерелеп төшкән, тигән фараз дөрөҫтөр, буғай. Зал ҙур - оҙонлоғо 90 метрға етә. Был зал һүрәттәргә бик бай. Иң билдәлеһе - 1976 йылда табылған һүрәттәр. Аттар бигерәк матур төшөрөлгән, уның эргәһенән геометрик фигура-трапеция урын алған.

Мәмерйәнең тәүге ҡаты Хаос залы менән тамамлана. Тамамлана, тиеү, бәлки, хаталыр ҙа. Сөнки күптәрҙең күңелен бер хәл өйкәп тик тора. Эш шунда: 1770 йылда ғалим И.И. Лепехин мәмерйәлә була. Әлеге Көмбәҙ, Билдәләр һәм Хаос залдарында ул да була, әммә ул ошо залдарҙан тыш ентекле өйрәнелгән тағы бер зал тураһында мәғлүмәт ҡалдыра. Әммә бөгөнгә көндә ул залды... таба алмайҙар. Мәмерйәнең дауамы бармы, юҡмы - әлегә был сер булып ҡала.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: Шүлгән мәмерйәһе һәм ундағы һүрәттәр бар ерҙә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Мәмерйәне өйрәнәһе лә өйрәнәһе. Ә бөгөн уны тәү сиратта һаҡларға, ҡырағайҙарҙан ярҙарға кәрәк. Көмбәҙ залындағы һүрәттәрҙең аяныслы хәле быйна шул турала иҫкәртә лә инде беҙҙе.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**



*Заманында был һүрәт ғалимдар тарафынан тулыһынса асылған, ә бөгөн ул таш майы менән (кальцитовый натек) кире ҡапланып бара. Бәлки, ошондай асылмаған һүрәттәр күптер һәм улар үҙ асыусыһын бөгөн дә көтәләрҙер.*



*Ат һүрәте эргәһендә төшөрөлгән абстракт билдә - трапеция. Нимә аңлатты икән был һүрәт - аңлатыуы ла, аңлауы ла ҡыйын.*

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*



# АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ ТЕЛӘҺӘ,

## үҙең дә теләһәң...

**Рәфил АҪЫЛҒУЖИН, философия фәндәре кандидаты:** Эйе, Аллаһы теләһә, быға үҙең дә булышлыҡ итһәң, һау-сәләмәт булырһың. Сәләмәтлекте һәр кем үҙенсә аңлай, ә минең был мәсьәләгә ҡарашым бер нисә пунктты үҙ эсенә ала. Миненсә, сәләмәт тормош, тәү сиратта, алкоголле эсемлектәрҙән, тәмәке тартыуҙан, хәрәм ризыҡтарҙан баш тартыу. Шулай уҡ сәләмәт булыу өсөн нимә ашағанынды һәм саманды белергә кәрәк. Юҡһа, ҡайһы бер кешеләр, ашҡаҙан тулһын, тип, ниндәй ризыҡ ҡабул иткәненә иғтибар биреп бармай. Ә мосолмандарға бары хәләл ризыҡ ҡына ашау зарур. Хәҙер магазиндарҙа матур-матур ҡаптарға төрөлгән күҙ ҡыҙҙырырлыҡ аҙыҡ-түлек бик күп. Балаларҙың, ғәҙәттә, уларҙың тышҡы ялтырауығына иҫе китә. Шуға ла уларҙы бала саҡтан уҡ, хәләл ризыҡ ҡына ашарға, тигән ҡанунға өйрәтергә кәрәк, ә төрлө ГМО-лар ҡушылған ағыуҙы түгел. Мин үҙем аҙнаһына бер тапҡыр мотлаҡ ашамай торам, йәғни дүшәмбе ризыҡ еймәйем. Рамаҙан айында инде тулыһынса ураҙа тотам. Көнөнә биш намаҙымды ҡалдырмайым. Ураҙаның, намаҙҙың кеше организмына ниндәй ыңғай тәьҫире булыуы тураһында әйтеп тороуҙың кәрәге лә юҡ, тип уйлайым, был хаҡта күп һөйләнелә һәм яҙыла. Ғөмүмән, хаҡ мосолмандарға ошо ғәмәлдәрҙе үтәү зарур. Бынан тыш, организмыма артыҡ көсөргәнеш килтермәгән физик күнекмәләр эшләйем. Кәйефем булғанда иртән йүгерәм, бындай көндәрем аҙнаһына икеәс көн булып китә. Миҙгелендә көн һайын һыу инеп ҡалырға тырышам. Шулай уҡ аҙнаһына мотлаҡ бер тапҡыр мунса инеү ҙә сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһай.

Сәләмәт булыу өсөн ҡалала түгел, ауылда йәки ҡала ситендәге коттедж ҡасабаларында йәшәү отошло. Кеше ни тиклем тәбиғәткә яҡын, һаулығы ла шул тиклем ныҡлы була. Өҫтәүенә, йортоң эргәһендәге баҡсала тирләгәнсе эшләп, рәхәтләнеп мунса инһәң, организмдағы барлыҡ шлак-тоҙҙарын ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығасаҡ. Шуға өҫтәп, йылына бер тапҡыр мотлаҡ диңгеҙ буйына барып ҡайтһаң, мәҫәлән, Мысырға йәки Төркиәгә, был да сәләмәтлек нигеҙҙәренең бер бағанаһы.

Ҡатыным эшләмәй, йорт эштәре һәм балалар тәрбиәләү менән шөғөлләнә, мине тәрбиәле йөрөтөргә лә, иғтибар бүлергә лә ваҡыты ҡала.

Ләкин йәмғиәттә йәшәп, унан азат булып булмай, тигәндәй, йәмғиәттә йәшәүҙең бер етешһеҙлеге бар: йыш булмаһа ла, табиптарға тикшерелергә барырға кәрәк. Ә үҙем диндар кеше булараҡ, сирләү, йәшәү һәм үлем мәсьәләләренә тыныс ҡарайым - сөнки барыһы ла Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ӘСӘ ҠАРЫНЫНДАҒЫ ӘҢГӘМӘ

Ауырлы ҡатындың ҡарынында ике бәпес һөйләшә, ти. Береһе - иманлы, икенсеһе - иманһыҙ. Иманһыҙы иманлыһынан: "Яҡты донъяға тыуғандан һуң ғүмер барлығына ышанаһыңмы?"- тип һорай икән. "Әлбиттә. Яҡты донъяға тыуғандан һуң ғүмер бар икәнен бөтәһе лә белә. Аҙаҡтан көслө һәм һынауҙарға әҙер булыр өсөн беҙ - бында", - ти иманлы бәпес. Тегеһе: "Был йүләрлек. Аҙаҡтан бер ниндәй ғүмерҙең булыуы мөмкин түгел. Ул ғүмерҙе күҙ алдына килтерәһеңме һуң?". "Тулыһынса күҙ алдына килтермәйем. Әммә унда яҡтылыҡ күберәк буласаҡ, һәм беҙ унда атлап йөрөй аласаҡбыҙ, үҙ ауыҙыбыҙ менән ашай аласаҡбыҙ, тип ышанам". "Буш һүҙ. Үҙебеҙ йөрөй ҙә, ашай ҙа алмайбыҙ. Беҙҙе кендек туҡландыра. Беҙҙең ғүмер ҙә - кендек, башҡаһы юҡ". "Ә мин бар, тип ышанам. Тик ул ғүмер икенсерәк буласаҡ". "Ләкин унан бит әле бер кем дә ҡайтмаған. Ғүмер яҡты донъяға тыуғандан һуң тамамлана. Һәм, ғөмүмән, ғүмер интегеүҙән һәм ҡараңғылыҡтан ғына тора". "Юҡ! Юҡ! Яҡты донъяға тыуғандан һуң беҙ әсәйҙе күрәсәкбеҙ һәм ул беҙҙең хаҡта хәстәрләйәсәк". "Әсәйҙе? Һин әсәйгә ышанаһыңмы? Ҡайҙа һуң ул?" "Ул тирәяғыбыҙҙа. Беҙ уның эсендә көн күрәбеҙ. Ул булғанға, хәрәкәт итәбеҙ һәм йәшәйбеҙ. Унһыҙ беҙ ҙә булмаҫ инек". "Был мәғәнәһеҙлек. Мин бер ниндәй ҙә әсәй күрмәнем, тимәк, ул юҡ". Иманлы бәпес: "Мин һинең менән ризалаша алмайым. Ҡайһы ваҡыт уның йырлағанын ишетергә һәм беҙҙе һыйпағанын тойорға була. Ысын ғүмеребеҙ яҡты донъяға тыуғандан һуң ғына башланасаҡ, тип ныҡ ышанам. Ә һин?.."

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Тештәр тураһында

**Ғәҙәттә, тешегеҙҙе фторлы теш пастаһы менән таҙартығыҙ, шул ваҡытта бер ниндәй ҙә кариес ҡурҡыныс түгел, тиҙәр. Кешеләр тештәрен фторлы теш пастаһы менән таҙарта, ләкин стоматологҡа эләккәндәр һаны бер ҙә кәмемәй.**

Шул уҡ ваҡытта телевизорҙан ҡырағай ҡәбиләләрҙе күрһәтәләр, уларҙың тештәре ап-аҡ. Ни өсөн? Баҡтиһәң, улар фторҙың "файҙаһы" тураһында бөтөнләй белмәй һәм теш пастаһын ҡулланмай икән! Парадоксмы?

Мәктәп программаһынан иҫләүегеҙсә, фтор Менделеев таблицаһында хлор менән бер бағанала тора, тимәк, агрессив химик элементтарҙың береһе. Ахырҙа, беҙ ни тиклем күберәк фтор ҡулланабыҙ, тештәребеҙ шул тиклем нығыраҡ боҙола, тештәребеҙ генә лә түгел... Фтор бик әүҙем, ул лайлалы тиресә аша мейегә үтеп инә һәм үҙенең эҙемтәләрен башлай. Һөҙөмтәлә шешек һымаҡ биҙҙең (Дженифер Люк һ.б.) эшмәкәрлеге блокадалана. Был биҙ мелатонин - организмдың барлыҡ күҙәнәктәренең дә нормаль эшмәкәрлеген тәьмин итеүсе "йәшлек" гормоны бүленеүен көйләй. Шулай уҡ ул матдәләр алмашыныуы процесы менән идара итә, иммунитет өсөн яуаплы, ирекле радикалдарҙы блокадалай һәм организмдағы башҡа бик күп функцияларҙы контроллэй. Йәғни ул кеше организмында йәшәү өсөн кәрәкле биҙ. Тап ул кешенең аңы, мәғлүмәт ҡыры менән бәйләнеш урынлаштыра, рухиәт өсөн яуап бирә. Был биҙ етмәгәндә кеше ихтыярын юғалта, зомби кеүек булып ҡала, уға теләһә ниндәй идеяларҙы һеңдереп, еңел генә идара итергә мөмкин.

Айырым селтәрле маркетингтарҙа шуның менән файҙаланалар ҙа инде: яһалма рәүештә мелатонин бүленеүен стимуллап, кешеләрҙе яһалма рәүештә эйфория торошона индерәләр, шунан файҙаланып, үҙ программа-ҡуйылыштарына инандыралар. Һуңынан кеше барыһын да үҙенең "супер продукцияһы" менән ҡаңғыртып бөтә. Фторҙы ҡулланыу эҙемтәләре араһында шулай уҡ яман шеш, Альцгеймер, һимереү, интеллект түбәнәйеүе, летаргия, яралғының генетик үҙгәреүе һ.б. ауырыуҙар бар.

Ә теште, улай булғас, нимә менән таҙартырға, тигән һорау тыуыр. Әйҙәгеҙ, тәбиғәт тәжрибәһенә мөрәжәғәт итәйек. Диңгеҙ хайуандарында һәм балыҡтарҙа бер ваҡытта ла кариес булмауы билдәле. Сөнки диңгеҙ һыуының иретмәһе теләһә ниндәй ярыҡтарҙы ла ямай. Тимәк, әгәр һеҙ ашағандан һуң ауыҙығыҙҙы диңгеҙ тоҙо менән сайҡатһағыҙ, бер ниндәй ҙә кариес ҡурҡыныс түгел. Диңгеҙ тоҙо менән теште таҙартырға ла була! Океан һыуы менән ҡан составының микроэлементтар һәм минералдар составы буйынса бер-береһенә оҡшаш икәнлеге билдәле. Йәғни, уларҙа кремний, натрий, марганец, неон, тимер, никель, магний, баҡыр, цинк һәм организмға кәрәкле башҡа элементтарҙың процент нисбәте тигеҙ. Әгәр тешегеҙҙе диңгеҙ тоҙо менән таҙартаһығыҙ йәки диңгеҙ һыуы менән сайҡатаһығыҙ икән, ауыҙҙың лайлалы тиресәһе аша организмға кәрәкле микроэлементтар инә.

Шулай уҡ диңгеҙ тоҙо һалынған йылы ванна ҡабул итеү ҙә файҙалы (ваннаға бер килограмм диңгеҙ тоҙо һалырға) - организм тире аша үҙенә кәрәкле микроэлементтарҙы һәм минералдарҙы ала, ә концентрацияланған диңгеҙ һыуы барлыҡ шлактарҙы сығара, һөҙөмтәлә тотош организм йәшәрә!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың серле формулаһы

**Үткән һандарҙа маҡсаттар ҡуйыу буйынса эш семинарын тамамланығыҙ. Маҡсаттарығыҙға тиҙерәк өлгәшеү өсөн уңыштың айырым формулаһы бар. Был ысул бер ни тиклем сәйерерәк күренер, әммә ул - иң һөҙөмтәлеләрҙең береһе.**

Эшҡыуарлыҡта, спортта, сәнғәттә, фәндә бик күп лидерҙар уны ҙур уңыш менән ҡуллана. Формула үҙ-үҙеңде инандырыу принцибы буйынса эшләй һәм, әгәр уға ышанып, бер нисә ай дауамында ҡулланһағыҙ, һеҙҙең өсөн ул мөғжизә тыуҙырырға һәләтле. Ошо ваҡыт тамамланғанға тиклем үк тормошоғоҙҙа ыңғай үҙгәрештәр тойорһоғоҙ. Эйнштейн, Эмерсон, Наполеон Хилл, Олимпия уйындары чемпиондары һәм башҡа билдәле кешеләр был стратегияны һөҙөмтәле булғаны өсөн ҡулланған.

1. Маҡсатығыҙҙы аныҡ билдәләгеҙ һәм уға өлгәшеүҙе мейегеҙҙә көн һайын йоҡлар алдынан өйөрөлтөгөҙ. Үҙегеҙҙе иң яҡшы уңышҡа өлгәшкән тип уйлағыҙ. Был тамашаны асыҡ һәм сағыу итеп һүрәтләгеҙ.

2. Үҙегеҙҙә маҡсатығыҙ ысынбарлыҡҡа өлгәшеүенә көслө ышаныс үҫтерегеҙ. Бының өсөн көн дауамында үҙ-үҙеңде инандырыу (идеяны телдән әйтеү) ысулын ҡулланығыҙ. Бындай ысул (үҙ-үҙеңә кәңәш биреү) Көнсығышта дүрт мең йылдан ашыу ҡулланыла һәм ныҡлы ышаныс булдырыуҙың иң боронғо ысулы булып тора. Теләгегеҙҙе көн һайын йоҡлар алдынан 10 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

3. Уйығыҙҙы ҡабат-ҡабат ҡабатлау иҫәбенә уны тынғы бирмәгән, бәйләнсек теләккә әйләндерегеҙ.

4. Хыялығыҙҙы нисек тормошҡа ашырыуҙың аныҡ планын эшләгеҙ һәм бының өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе һәм уңайлы шарттарҙы эҙләгеҙ.

5. Маҡсатығыҙҙы, нимәләр эшләү планын һәм уға өлгәшеү датаһын ҡағыҙға яҙығыҙ. Ошо теркәлгән яҙыуҙы көн һайын 10 тапҡыр уның өлгәшелеүенә тәрән ышаныс һәм илһам менән ҡабатлағыҙ.

Әйтеп кителгәнсә, был уңыш формулаһы сәйер булып күренер, әммә уны бер тапҡыр ғына ҡулланып ҡарап, ташлап ҡуйырға ашыҡмағыҙ. Уны бүләк кеүек ҡабул итегеҙ, уның һеҙҙең өсөн мөғжизә тыуҙырырына ышанығыҙ. Шул саҡта аңығыҙҙағы барлыҡ хыялдарығыҙ алғы планға сығыр, ә аң көсө уларҙы тормошҡа ашырырға мәжбүр итер.

Хәҙер һеҙ ҡайҙа барғанығыҙҙы һәм нимәгә өлгәшәсәгегеҙҙе беләһегеҙ. Бының өсөн көн һайын даими рәүештә маҡсаттарығыҙҙы анализлау һәм маҡсаттарығыҙға өлгәшкәс, нимәләр эшләйәсәгегеҙ тураһында хыялланыу өсөн көн һайын ваҡыт бүлегеҙ. Бындай стратегияны ҡулланып, аңығыҙҙы һәм аҫҡы аңығыҙҙы хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыуға дәртләндереп торасаҡһығыҙ. Тормошоғоҙҙағы яңы үрҙәргә артылғанда Вудро Вильсондың һүҙҙәрен иҫегеҙҙә тотоғоҙ: **"Беҙ хыялдарыбыҙ арҡаһында ғына бөйөк булып үҫәбеҙ. Барлыҡ бөйөк кешеләр ҙә - хыялланырға яратыусылар. Улар предметтарҙы яҙғы көндөң серле балҡышында йәки оҙон ҡышҡы төндәрҙең алһыу шәфәғендә күрә. Ҡайһы берҙәребеҙ бөйөк хыялдарын үлтерә, икенселәр хыялдары ысынбарлыҡҡа әйләнеренә һәр саҡ ышана, уларҙы яҡты ҡояшлы көнгә алып сыҡҡансы һаҡлай, туҡландырып тора, үҙҙәренә ауыр булғанда ла уларҙы хәстәрләй".**

✓ *Ни эшләргә? Тәү сиратта ҡорт ҡаяуын алырға кәрәк, һуңынан ағыуын һурып алырға, киң таралып китмәһен өсөн яранан өҫкө яҡҡа жгут һалырға, антигистамин дарыу (зиртек, кларитин) эсергә кәрәк.*



## ИЮЛЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Баймаҡ районының Ниғәмәт ауылында йәшәүсе туғаныбыҙ, өс бала атаһы **БУРАНШИН Фәйзулла Зекрейә улының 60 йәше** тула. Уны алтын юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ, ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, ейән-ейәнсәрҙәр шатлығы теләйбеҙ. Һәр ваҡыт шулай көләс йөҙлө, туған йәнле, йылымыҡлы мөнәсәбәтле, асыҡ күңелле булып ҡал, ҡәҙерле туғаныбыҙ!

**Буранбай ауылынан апаһы Сәғирә, Ғәйетбаевтар, Үтәбаевтар.**

## ИҒЛАНДАР

Өфө ҡалаһы Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһына башланғыс класс уҡытыусылары талап ителә.
Талаптар:
1. ФГОС курсын үтеү тураһындағы документ.
2. Башҡорт телен белеү.
**Мөрәжәғәт итеү өсөн телефон: (347) 289-52-50**

* * *

Дөйөм туҡланыу предприятиеһына мөдир, ашнаҡсылар, технолог, бухгалтер-калькулятор, һатыусылар, ВС категориялы водителдәр кәрәк.
**Телефон: 8-927-088-00-81.**

## 26-сы һандағы сканворд яуаптары:

**Горизонталь буйынса:** Велосипед. Публицистика. Замана. Афиша. Ашлыҡ.Камалов. Арҡар. Мәнфәғәт. Ҡалъя. Ҡыпсыуыр. Әсә. Троя. Үрт. Анархист. Полковник. Осмот. Сыйырсыҡ. Шланг. Яуап. Ләғнәт. Аҡһөйәк. Әкәмәт. Борсаҡ. Арҡалыҡ. Рапс. Әлгәнйәк. Алдыр. Бәшмәк. Мәрәкә. Кураре. Айыу.

**Вертикаль буйынса:** Әҙип. Күкһәүел. Айғыр. Теолог. Азарт. Ятаҡ. Рейн. Пазл. Авария. Китап. Өйрөлтмәк. Вилла. Күсәр. Ашҡаяҡ. Офис. Бәке. Аҙыҡ. Мәртәбә. Шама. Психиатрия. Әбей. Артмаҡ. Алмас. Какаду. Ыҙан. Ырыҡта. Арсый. Фосфор. Ылымыҡ Хәтер. Угги. Сөмбөл. Ректор. Ҡалмыҡ.

## КИҪӘТӘБЕҘ!

# ЙӘЙГЕ СИРҘӘР

**Һәр миҙгелдең үҙ ауырлыҡтары. Ә бына йәйге осорҙа беҙҙе ниндәй ауырыуҙар һәм ауырлыҡтар һағалай һуң?**

### Гипертиреоз

Гипертиреоз - ҡалҡан биҙенең гиперфункцияһы боҙолоуы ул. Ҡояш радиацияһы, эҫе һауа, артыҡ йөда ҡалҡан биҙе шәп эшләй башлауына килтереүе бар. Ҡалҡан биҙенең гормондарҙы күп етештереүе гипертиреоз ауырыуы барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итеүе мөмкин. Был ауырыуҙың төп симптомдары: һәр ваҡыт эҫе кеүек тойола, тирләтә, күңел торошо йыш үҙгәрә, йөрәк йыш тибә, күҙ тирәһе шешенә, яҡшы ашаған осраҡта ла ябыҡтыра, һәр ваҡыт һыуһата, бәҙрәфкә йыш йөрөтә, сәс ҡойола. Был сир белгестәр ҡарамағында оҙайлы һәм яҡшы дауаланыуҙы талап итә. Ни эшләргә? Ҡояшта ҡыҙынмағыҙ.

### Миозит

Был сир оҙайлы йоҡларға йә кондиционер алдында ултырырға яратыусыларҙа барлыҡҡа килә. Сөнки был ҡыш көнө асыҡ тәҙрә төбөндә оҙаҡ баҫып тороуға тиң. Йоҡлап торғандан һуң һеҙ мускулдарығыҙ ауыртыуын, хәрәкәт иткән һайын хәл бөтөүен тояһығыҙ.

Ни эшләргә? Һыҙланыуҙы баҫыу өсөн ятып торорға, массаж яһатырға, спиртлы компресс һалырға, шешенеүгә ҡаршы төнәтмәләр эсергә мөмкин.

### Тире ауырыуҙары

Йәйге осорҙа ҡорсаңғы йә бәшмәк ауырыуы йоҡтороуы бик еңел. Пляж, бассейн буйында яланаяҡ йөрөгән саҡта микоз (бәшмәк) йоҡтороу ҡурҡыныcы янай.

Ни эшләргә? Яҡын-тирәләгеләргә тәнегеҙ менән тейеүҙән һаҡланығыҙ, һыҙырылған йә яраланған урындарығыҙҙы пластырь менән ҡаплағыҙ, пляжда аяҡ кейемдәрегеҙҙе сисмәгеҙ, үләнгә һәм ҡомға түшәк түшәмәйенсә ултырмағыҙ. Тәнегеҙҙе ниҙер борсой башлаһа, шундуҡ һаҡлыҡ сараларын күрегеҙ.

### Бөжәк тешләһә

Серәкәй, бал ҡорто, һағыҙаҡ, күгәүен, траш (шершень), иңкеш тешләүенән урындағы реакция (шешенеү, ҡыҙарыныу, лимфа төйөндәре ҙурайыу) һәм токсик реакция булыуы (күңел болғаныу, ҡоҫоу, өшөү, быуындар һыҙлау), баш ауыртыу, температура күтәрелеү, артериаль ҡан баҫымы түбәнәйеү, тын ҡыҫылыу, аңды юғалтыу мөмкин.

Ни эшләргә? Тәү сиратта ҡорт ҡаяуын алырға кәрәк, һуңынан ағыуын һурып алырға, киң таралып китмәһен өсөн яранан өҫкө яҡҡа жгут һалырға, антигистамин дарыу (зиртек, кларитин) эсергә кәрәк. Профилактик саралар иһә ябай: бөжәктәр күп булған урындарҙы алыҫтанығаҡ урап үтергә, кейенеп йөрөргә. Әгәр ҙә инде һеҙҙе талпан тешләһә, нисек кенә үҙегеҙҙе яҡшы тойһағыҙ ҙа табибҡа күренергә кәрәк.

### Ангина, ларингит, фарингит

Туңдырма, һыуыҡ һут, һалҡын һыуҙа йөҙөү - былар барыһы ла йотҡолоҡта йәшәүсе вирус һәм бактерияларҙы ҡуҙғытып ебәреүсе саралар. Һөҙөмтәлә инде - тамаҡ шеше.

Ни эшләргә? Йылымыс итеп күп миҡдарҙа һелтеле эсемлек эсергә (йылытылған минераль һыу, йәшел сәй, мүк еләгенән морс), муйынға йылы әйбер ҡаплап йөрөргә (мәҫәлән, мамыҡ шарф). Әгәр ҙә инде табиб, ангина менән ауырыйһығыҙ, тиһә, дарыу ҡулланырға тура килер. Сөнки ангина йөрәк һәм бөйөргә ауырлыҡ килтереүе мөмкин.

### Эсәк инфекциялары

Улар 30-ҙан ашыу. Ауырыу тыуҙырыусы микробтар бөтә ерҙә лә булыуы мөмкин, улар кеше организмына һыу, ашамлыҡ йә ҡул йыумайынса ашауҙан килеп инә ала. Был инфекциялар эҫелә тиҙ үрсей. Бигерәк тә вирустар ныҡ зарарлы, шунлыҡтан кеше ғаилә, коллектив менән ауырый. Эсәк ауырыуҙары тыуҙырыусы микробтар төрлө шарттарҙа ла йәшәүсәндәр. Инфекция йоғоуҙың тәүге симптомдары: хәлһеҙлек, күңел болғаныу, эс китеү, юғары температура.

Ни эшләргә? Тиҙ генә һауығып китеүҙең төп шарты - һыуҙы күп эсеү. Һоло, дөгө бутҡаһы ашарға кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

АФАРИН!

# ПОЛИЦИЯЛА ЛА...

## һылыу ҡыҙҙар эшләй

**Республиканың Эске эштәр министрлығында матур йолаға әүерелгән сара - "Башҡортостан полицияһы һылыуы - 2012" матурлыҡ һәм һөнәри оҫталыҡ бәйгеһе үтте. Унда Стәрлетамаҡ, Бөрө һәм Әбйәлил районларынан, баш ҡаланың юл-патруль хеҙмәте полкынан, эксперт-криминалистика үҙәге һәм Эске эштәр министрлығының шәхси состав менән эшләү буйынса идаралығынан 14 гүзәл зат ҡатнашты.**

Алыштырғыһыҙ хеҙмәткәр, яратҡан ҡатын, хәстәрлекле әсәй, иғтибарлы ҡыҙ, яҡшы әхирәт, ипле водитель, мәргән атыусы, тиҙ йүгереүсе, оҫта йөҙөүсе һәм, әлбиттә, ғәжәп сибәр ҡатын-ҡыҙ - Башҡортостан полицияһы ведомствоһының беренсе матуркайы исеменә көрәшергә йөрьәт иткән һәр ҡатнашыусыны ошондай сифаттар менән билдәләргә мөмкин. Башҡа гүзәллек бәйгеләренән айырмалы рәүештә, конкурстың финалына сығыусылар баһалама ағзаларын ижади һәләттәре менән һоҡландырырға ғына түгел, ә башҡа ҡатнашыусыларҙы һөнәри оҫталыҡта һәм физик әҙерлектә уҙырға тейеш ине. Шуға ла бәйгенең тәүге көнө "Динамо" спорт комплексында үтте, унда ҡыҙҙар йүгереү, барьер аша артылыу, һикереү буйынса һәләтлектәрен һәм хатта самбо алымдарын күрһәтте, атыш буйынса көс һынашты.

Конкурстың икенсе өлөшө тағы ла мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлыраҡ булды: милли костюм һәм киске күлдәктәрҙәге дефиле, аш-һыу оҫталығы һәм ижади конкурстар һөҙөмтәһендә "Башҡортостан полицияһы һылыуы" ғына түгел, айырым номинациялар буйынса еңеүселәр билдәләнде. Мәҫәлән, конкурста халҡыбыҙҙың милли үҙенсәлектәрен күрһәтә алғаны өсөн Эске эштәр министрлығының Әбйәлил районы буйынса бүлеге тәфтишсеһе, юстиция лейтенанты Ләйсән Искужина "Милли йолаларға тоғролоро өсөн" тигән номинацияға лайыҡ булды. Һаҡлыҡ органдарында хеҙмәт итеү ир-егеттәр өсөн дә ауыр һәм хәүефле һаналһа ла, Ләйсән һөнәрен яуаплылыҡ, сыҙамлылыҡ өлгөһө булған өсөн ярата. "Гел эш, йышыраҡ йоҡоһоҙ төндәр, енәйәттәр асыҡлау менән булып, ҡайһы саҡта үҙеңдең гүзәл зат икәнеңде онотоп та китәһең. Мәктәптә уҡыған йылдарымда шиғырҙар, хикәйәләр яҙып, журналист булырға әҙерләнә инем. Һәр хәлдә, матурлыҡ донъяһы беҙгә ят түгел. Шуға ла был конкурстың матурлыҡты күрһәтеү этабы минең өсөн бигерәк әһәмиәтле булды", - ти бәйгесе үҙе.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡортостан полицияһы һылыуы" исеме Бөрө районынан полиция капитаны Светлана Ғәйнуллинаға тапшырылды. Ул шулай уҡ конкурстың профессиональ этабы һөҙөмтәләре буйынса булдырылған "Мисс профессия" номинацияһында икенсе урын алды. Был номинацияла беренсе урынға Олеся Евдокимова, өсөнсө урынға Алина Яппарова лайыҡ булды.**

**Сәйлән ӘБЙӘЛИЛОВА.**

КИТАП СЫҠТЫ

# ҒАТА СӨЛӘЙМӘНОВҠА АРНАЛА УЛ



**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге Республика Дәүләт премияһы лауреаты, "Почет Билдәһе" ордены кавалеры, йырсы, ҡурайсы, артист, уҡытыусы Ғата Зөлҡәфил улы Сөләймәновтың ғүмер, ижад юлына бағышланған сираттағы альбом баҫылып сыҡты.**

Ришат Рәшит улы Рәхимов, Сәйҙә Мөхтәр ҡыҙы Рәхимова төҙөгән был альбом Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала. "Инеш" өлөшөндә автобиографияһы һәм эшмәкәрлеге, наградалары тураһында тулы мәғлүмәт, замандаштарының, дуҫтарының шәхес тураһындағы йылы иҫтәлектәре бирелә. Йыйынтыҡтың "Ғүмер миҙгелдәре" бүлегендә Ғата Зөлҡәфил улының ғаилә фондында һаҡланған фотоһүрәттәр урын алған. "Ғата Сөләймәновтың ижади мираҫынан" бүлеге уның тарафынан республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән йыйылған йыр-көй тарихы, легендалар тәҡдим итә. Һуңғы бүлек Ғата Сөләймәновтың ҡурай өсөн эшкәрткән көйҙәре ноталары менән тулыландырыла. Сәнғәтебеҙ күгендәге яҡты йондоҙҙарҙың береһенең ижады менән ҡыҙыҡһыныусы йыр-моң һөйөүселәр өсөн тәғәйенләнгән баҫма тиражы 1000 дана менән баҫылған һәм нәшриәттең фирма магазиндарына һатыуға сығарылған.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИЛЬЯС -

## "Аллаһтың ятҡаны"

**Ильяс - бик матур яңғырашлы, боронғо исем. Ул "Аллаһтың яратҡаны, Аллаһтың ҡөҙрәте" тигән мәғәнәгә эйә. Башҡорт балалары араһында был исемде йөрөтөүселәр байтаҡ ҡына. Бөгөн һеҙҙе шундай малайҙарҙың береһе менән таныштырмаҡсыбыҙ.**



Өфө ҡалаһында йәшәүсе Ильяс Хөсәйенов, бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, үтә ярҙамсыл малай. Атаһына Шамонин ауылындағы өйҙәрен төҙөргә ярҙам итә - уға төрлө эш ҡоралдары алып бирөп тора, уларҙы кире урынына һалыу, тәртипте тотоу ҙа уның иненә йөкмәтелгән. Тимәк, Ильяс исеменең "ярҙамға килеүсе" тигән мәғәнәһе лә тулыһынса уның холҡонда сағылыш тапҡан. Атаһы эштә саҡта әсәһе менән урамда йөрөргә, төрлө уйындар уйнарға, велосипедта елдерергә ярата. Был исемде йөрөтөүселәр, ғәҙәттә, сәйәхәт ярата. Ильяс та машинаға ултырып, Стәрлебаш һәм Хәйбулла райондарында йәшәгән олатай-өләсәйҙәренә йыш ҡына ҡунаҡҡа ҡайта.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫҒА - ҺҮҘ...

## яманға сүп эйәрә

Йөҙ күтәреп кешенән теләнгәнсе, башыңды эй ҙә ерҙән һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бары тик хыял ғына ояла белмәй.

**(Джон Донн).**

Тәбиғәттә тамыр - дымға, ағас олоно ҡояшҡа тартыла, үҫемлек шулай бөрөүҙең икенсене ҡәнәғәтләндермәүе һөҙөмтәһендә формалаша.

**(Поль Валери).**

Шарап менән артыҡ мауығыу барлыҡ лайыҡлы нәмәләргә ишек яба һәм барлыҡ күңелһеҙлектәргә, сирҙәргә ишек аса.

**(Валерий Максим).**

Матур нәмәләрҙән матур мәғәнә эҙләүселәрҙә беҙҙең барлыҡ өмөт.

**(Оскар Уайльд).**

Дуҫлашыуҙың юл башында - маҡтау, дошманлашыуҙың юл башында тәнҡит тора.

**(Император Бөйөк Василий).**

Дуҫыңа хыянат - бер ниндәй аҡланыу һәм кисереү мөмкин булмаған енәйәт.

**(Лопе де Вега).**

Ҡиәмәт көнөндә беҙҙән нимәләр уҡыуыбыҙ тураһында түгел, ә нимәләр ҡылыуыбыҙ тураһында һораясаҡтар. Әммә кешенең тормошонда ни ҡылыуы йыш ҡына уның нимә уҡыуына ла бәйле бит.

**(Фома Кемпийский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше ауыл халҡы алдында ғәйепле тип табыла. Ғәйепләне соҡорға ташлайҙар, ә унан зыян күргән ауылдаштарҙың һәр береһе уны үҙе теләгәнсә хөкөм итергә тейеш була. Быны бөрөүҙәр соҡор ситенә баҫып, ғәйеплегә төкөрә, икенселәр быҫраҡ ташлай, өсөнсөләр серек йомортҡа ырғыта. Ә бер кеше соҡор төбөндәге ғәйепләнеүсегә тос ҡына таш бәрә. Ғәйепләнеүсе унан аптырап һорай:**

**- Мин бындағы кешеләрҙең барыһын да беләм, уларҙы мин ысынлап та рәнйеттем һәм уларҙың минән алыр үсе бар. Ә һин ниңә миңә таш ташлайһың?**

**- Ә һин мине бынан егерме йыл элек рәнйеткәйнең, - ти кеше.**

**- Улай булғас, егерме йыл буйы ҡайҙа булдың һуң һин? - тип аптырап һорай ғәйепләнеүсе.**

**- Ошо йылдар буйы мин әле һиңә бәргән ташты йөрәгемдә йөрөттөм, - ти таш ташлаусы. - Бына хәҙер һине шундай меҫкен хәлдә күргәс, ул ташты йөрәгемдән алып, һиңә олаҡтырҙым..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәррирәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 5387
Заказ 2597